ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 сентябрь (нарысай)

2021

№38 (976)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**

**Тауға ҡарап...**
таш атма

2-3

**Салауат Юлаевҡа...**
ярҙам кәрәк!

5

**Аты барҙың ҡанаты бар**

9

**Мин баш итеп күрәм ирҙе,**
Аша бик атламайым

11

**ТВ-программа** 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле башланды. Шулай итеп, 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 1 сентябрҙән 731 һум 66 тин тәшкил итә. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.***

***Мөхәрририәт.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Рәсәй Президенты указы менән пенсионерҙарға ла, балаларға ла 10-ар мең аҡса бирелде. Ошо ярҙам саралары тураһында ни әйтерһегеҙ?

***Сәлимә АРЫҪЛАНОВА, Көйөргәҙе районы:*** Йәй урталарында булһа кәрәк, Рәсәй Президенты мәктәп йәшендәге балалары булған ғаиләләргә дәүләт ярҙам итәсәк, тип белдерҙе. Күп тә үтмәй, ошо хаҡта Указ да сыҡты. Владимир Путиндың тәҡдиме менән 10-ар мең һум август баштарына уҡ күсерелде һәм күптәр уны балаларын мәктәпкә әҙерләүгә тотондо.

Ил етәксеһе тарафынан бындай ярҙам беренсегә генә күрһәтелмәй. Ошо хаҡта мин телевидениенан күреп, ваҡытлы матбуғаттан уҡып ҡына белмәйем, ә ҡыҙымдың ғаиләһе хәл-торошона ҡарап та фекер йөрөтәм. Уның мәктәп йәшендәге ике ҡыҙы бар, уларҙы уҡыу йылына әҙерләгән осорҙағы финанс проблемаһы нисек торғанын яҡшы беләм. Уҙған йылда ла 10-ар мең һум алғас, быйылғыһы уға өҫтәмә генә булыуы һәйбәт күренеш. Хәҙерге ил етәкселегенең үҫеп килгән быуындың киләсәктә быны онотмай, тоғро илһөйәрҙәр булып тәрбиәләнеренә өмөтө ул.

Ошондай ҡарарҙар ҡабул ителеүҙе ишеткәс, мин тағы бер яҡланмай ҡалған ил граждандары хаҡында уйлана инем. Улар - ғүмер буйы ауыл хужалығында, завод-фабрикаларҙа тир түккән пенсионерҙар. Улар нисек кенә тырышмаһын, бер нисек тә пенсия суммаһын арттыра алмай. Айлыҡ пенсияһына аҙыраҡ өҫтәмә булһын тип, бер нисә сәғәткә генә эшкә сыҡҡан хаҡлы ялдағылар шунда уҡ "эшләүсе пенсионерҙар" категорияһына күсә лә ҡуя бит. Дәүләт Думаһы депутаттары илдәге хәл-торош менән таныш булмағас, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһына индексация үткәреүҙе лә һаман һуҙа килә бит. Башҡаларға пенсия артҡанда, эшләп йөрөгәндәргә ул үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Шуға күптәр һаулығы яҡшы булһа ла, эшкә сыҡмай, сөнки өс-дүрт мең һум эшләрһең дә, ай һайын өҫтәлгәненән ҡолаҡ ҡағырһың. Халыҡ әйтмешләй, ҡулдағы турғай күктәге торнаға ҡарағанда һәйбәтерәк шул.

Беҙ, пенсионерҙар, һуңғы көндәрҙә ил Президентының һәр хаҡлы ялдағы гражданға биргән 10-ар мең һумын алып ҡыуанып ултырабыҙ. Үҙ-ара һөйләшеүҙәр шул теманан башлана. Минең күрше апай процентҡа банкыға һалырға йыйыныуын йәшермәй. Күптәр дарыуға тоторға йыйыныуын белдерә, сөнки хәҙер ҡарттар уны аҙыҡ-түлек урынына ашай тиһәң дә була. Ошо ҡарар сыҡҡас та дарыуханалар хаҡтарҙы арттырыр, тип көткәйнем. Пенсия суммаһы күтәрелеүгә бер-ике ай ҡалып та өлгөрмәй, магазиндарҙа тауар хаҡы арта башлай бит, ә был юлы дарыуханаларҙың даими клиенттары аласаҡ өҫтәмәне ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырамаһын тип, шулай эшләрҙәр, тип уйлағайным.

Дөрөҫ, бөтә пенсионерҙар ҙа үҙ аҡсаһын дарыу алыуға ғына тотонмаҫ. Студент ейән-ейәнсәрҙәренә лә биреп ебәргәндәр бар. Мин, мәҫәлән, үҙем ҡышҡылыҡҡа кейем-һалым алыуға тотонасаҡмын. Өҫ һәм аяҡ кейемдәрен күптән алмаштырырға ваҡыт еткәйне инде. Нисек кенә тартып-һуҙһам да, ашауға, дарыуға һәм коммуналь хеҙмәткә түләүҙәрҙән арттырып булмай тора ине. Бик яҡшы булды әле. Дәүләтебеҙгә беҙҙе ҡайғыртып күрһәткән ярҙамына рәхмәт, ә ул аҡсаны кем ҡайҙа тотона, уныһы шәхси эше. Бүләк иткән аттың тешенә ҡарамайҙар тиҙәр бит әле, аҡсаһы булғас, тотонорға урыны табылыр инде.

## АФАРИН!

# АҪАЛЫ БАЛАҪ ҺУҒЫУСЫЛАР

## боронғо һөнәрҙе яңырта

**Стәрлетамаҡ районының Күсәрбай ауылында балаҫ һуғыу оҫталары йыйыла, тигән хәбәрҙе алыу менән күңелгә ошо ауыл исеме менән бәйле яҡты хәтирәләр тулҡыны бәрелде: тархан Аҡсулпановтар ошо төбәктә йәшәгән. Иллә күркәм урында урынлашҡан был ауыл. Һайлай белгән бит Аҡсулпан тархан тоҡомдары һәм ырыуҙаштары өсөн нигеҙ ҡорор төбәкте. Батша уны - Шаһихәйҙәр Шаһигәрәй улы Аҡсулпановты - бик ҙурлаған: ауыр яуҙарҙағы шәхси ҡаһарманлығы өсөн юрматы ырыуы ерендә, йәне теләгән урында мәңге йәшәрлек грамота менән бүләкләгән... Бейек булмаған тау һырттары, иркен бесәнлеге, көтөүлеге, иң мөһиме, таҙа һыулы, балыҡ мыжғып торған йылғаһы бар!.. Йәшел тәбиғәт әлегә саф өмөттәр менән тулы, гөлдәре сәскәгә бөрөләнгән. Йорттар ҡалҡыу ғына ерҙә балҡып ултырғандай...**

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**



12+

✓ - Беҙҙең атай унда мыштырҙап нимә эшләй? - тип һорай икән. - Нимә эшләһен инде, нисек итеп көн үткәрергә белмәйенсә, ағастарҙың ботағын һындырып алып, юлға ташлап бара, - тип яуап биргән уға ҡустыһы.



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# БАЛАЛАРҒА ЯРҘАМ ИТЕП...

**Интернетты асып, "Нисек" һүҙен яҙыу менән "Нисек өҫтәмә аҡса эшләргә?", "Нисек аҡса эшләргә?" тигән юлдар пәйҙә була. Тимәк, был һорау күптәрҙе борсой һәм интернет селтәрендә эҙләнгән һорауҙар араһында иң актуалдәр рәтендә тора. Мин дә даими рәүештә аҡса эшләүҙең төрлө юлдарын эҙләйем. Бөгөн үҙем яратып башҡарған һәм бер ниндәй ауырлыҡһыҙ эшләп була торған шөғөлөм тураһында яҙам. Тәү сиратта, әлеге еңел, әммә аҡсалы шөғөл ҡул эше менән булырға яратыусыларға айырыуса ҡулай.**

Көҙөн, балалар баҡсаһы тулы ҡеүәтенә эшләй башлағас, мәктәптәр балаларҙы ҡабул иткәс, минең аҡсалы шөғөләмдөң ваҡыты етә. Балалар баҡсаһында һәм мәктәптә "Алтын көҙ", "Һаумы, көҙ" исемле байрамдар даими уҙғарыла. Ул сараларға мотлаҡ рәүештә көҙгө уңышты ҡулланып эшләнгән ҡул эштәре алып килеү электән килә. Тәбиғи, 3-5 йәшлек бала бер үҙе генә был эште атҡарып сыға алмай, ата-әсә ярҙамы кәрәк. Ә күпселек атай-әсәйҙәрҙең йә ваҡыт яғы тығыҙ, йә фантазиялары етмәй, йә ялҡауҙары килә. Мин иһә ошондай эш менән булышырға ғәләмәт яратам һәм һәр ваҡыт ихлас эшләйем. Былтыр төркөмдөң ватсаптағы чатында бер әсәйҙән ошо йүнәлештә ярҙам итеүҙе һорап яҙған мөрәжәғәте булды. Етмәһә, аҡса түләргә әҙер булыуы хаҡында ла белдерҙе. Минән башҡа эшләргә теләүселәр табылманы, ә эшләтеп алыусыларҙың һаны 8 кешегә барып етте хатта. Шулай итеп, ике көндә мин баҡсалағы көҙгө уңышты ҡулланып, төрлө хайуанйәнлек, йорт хужалығын һәм башҡа төрлө күренештәрҙе сағылдырған һигеҙ ҡул эше башҡарҙым. Тәғәйенләнгән көндә барыһы ла үҙ эштәрен килеп алды, ә минең кеҫәм 4 мең һумға ҡалынайҙы. Бер эш өсөн 500 һум аҡса бирҙе һәр кеме. Өйҙә генә ултырып, 3 көн эсендә ошо күләмдә аҡса эшләү бик тә яҡшы, тигән фекерҙәмен. Етмәһә, бөтә эш өсөн кәрәк булған әйберҙәр үҙ баҡсамдан, һатып алырға ла кәрәкмәне.

Хәҙер ошо эш менән даими шөғөлләнәм. Төрлө байрамдарға арналған саралар йыш була, шуға күрә заказ биреүселәр ҙә күп. Хәҙер балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәренә генә түгел, мәктәп уҡыусыларына ла эшләп бирәм. Яңы йылға ҡарата ниндәй ҙә булһа ҡул эше, космонавтар көнө, 8 март һәм 23 февраль, сәскә байрамы һәм башҡа төрлө саралар йыш үткәрелә бит бөгөнгө көндә. Уҡыусылар ҙа төрлө конкурс һәм сараларына эшләтеп ала. Хаҡы эштең ауырлығынан, ни тиклем тиҙ эшләргә кәрәклегенән һәм ҡулланылған материалдарҙан сығып билдәләнә.

Иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем эш өсөн кәрәк буласаҡ әйберҙәрҙе йыям - үлән, сәскә, төрлө формалағы ағас ботаҡтары, тубырсыҡ, йылға таштары һәм башҡалар. Үҙемә оҡшаған шөғөл табыуыма һәм, иң мөһиме, унының килемле булыуына ҡыуанам. Гәзит уҡыусылар араһында ла ошо эште оҫта башҡарыусылар һәм үҙҙәренең кәрәк-ярағына етерлек аҡса эшләй алыусылар булырына ышанам.

**Гөлсөм ЯЛМЫРҘИНА.**
**Иглин районы.**

ХАЛЫҠ АҠЫЛЫНА ТАЯН!

# ТАУҒА ҠАРАП...

## таш атма

**"Тауға ҡарап, тау була алмаҫһың " тип тә әйтәләр. "Тауға ҡарап таш атма" әйтемен иһә, ябай ғына итеп, "тауға ҡарап таш атма, атһаң, башыңа үҙеңдән атҡан ташың төшәр", тип тә аңларға була. Ысынлап та, бейек тау янында ҡулына таш тотоп, уны тау башына ташларға йыйынып торған кешене күҙ алдына килтерһәң, был күренеш көлкө лә тойола, шул уҡ ваҡытта әйтемдең мәғәнәһе үтә ябай һәм аңлайышлы кеүек. Әгәр ҙә мәғәнәһе шулай ғына булһа, ниңә кәрәк булды һуң әле былдай фәлсәфә, тип тә уйларлыҡ. Шуға күрә тәрәнгәрәк ҡараш ташлап ҡарайыҡ.**

Япондарҙың бер кенәзлегендә шундай закон ҡабул ителгән: алтмышы тулған һәр кешене балалары тауға алып барып ҡалдырып китергә бурыслы. "Беҙгә үҫеп килгән балаларҙың һәм йәштәрҙең өлөшөнә ингән артыҡ ауыҙҙар, әрәмтамаҡтар кәрәкмәй", тигән был хаҡта закон ҡабул итеүсе кенәз. Закон буйынса, балалары аталарын һуңғы юлға арҡаһына һалып йөкмәп алып барырға, бының менән уларға һуңғы тапҡыр хөрмәт күрһәтергә тейеш икән.

Шулай итеп, бер ваҡыт ағалы-ҡустылы ике егет алтмышы тулған аталарын алмашлап күтәрә-күтәрә, тауға менеп баралар икән. Бына бер ваҡыт атаһын йөкмәп барған ағай кеше, арҡаһына ымлап, ҡустыһынан:

- Беҙҙең атай унда мыштырҙап нимә эшләй? - тип һорай икән.

- Нимә эшләһен инде, нисек итеп көн үткәрергә белмәйенсә, ағастарҙың ботағын һындырып алып, юлға ташлап бара, - тип яуап биргән уға ҡустыһы.

- Атай, ниңә улай итәһең, беҙ ҡайтып киткәс, ергә ташланған ботаҡтар буйынса кире өйгә ҡайтмаҡсыһыңмы? - тигән арҡаһындағы атаһын һелкетеп-һелкетеп алып өлкән улы. - Кенәз кире ҡайтҡан атайҙарҙы таш менән туҡмап үлтерергә ҡуша. Шуға күрә юҡ менән булма, атай, был законды беҙ уйлап сығарманыҡ, ҡарышма...

Улдарына бер ни тип тә яуап бирмәгән атай кеше. Ул һаман да ҡулына эләккән ботаҡтарҙы һындырып алып, юлға ташлауын белгән. Улар тау үренә әңер төшөүгә генә барып еткән. Егеттәр аталарын ҙур ағастың төбөнә ултыртҡан да, таң атҡанын да көтөп тормайынса, шундуҡ ҡайтырға ҡарар иткән. Улар атаһы менән бәхилләшкән, уға барлыҡ ризыҡтарын, әсәр һыуҙарын ҡалдырған. Үҙҙәре һөҙәк урау юлдан ҡайтыуҙы яйһыҙ күреп, тоҫмал менән туп-тура ауылдарына табан ынтылған. Уларҙың алдында һуҡмаҡ осраған, шунан бер аҙ бара биргәс, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, кире үргә табан киткәндәр. Һуҡмаҡтан ситкә тайпылыуҙары булған, шырлыҡ араһында тамам аҙашып, үҙҙәрен бүреләр ҡамап алған. Шул саҡ ҡараңғы төн килгән. Һупылдаған өкөләрҙең йыйлаған күҙҙәрен күреп, малайҙар илай-илай аталарына ҡысҡырып, уны ярҙамға саҡырған. Ишетмәгән шул уларҙы ата-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Рәсәй Президенты указы менән пенсионерҙарға ла, балаларға ла 10-ар мең аҡса бирелде. Ошо ярҙам саралары тураһында ни әйтерһегеҙ?***

***Гүзәл КӘРИМОВА, күп балалы әсә, Мәләүез ҡалаһы:*** Баланы мәктәпкә әҙерләү етди мәсьәлә генә түгел, бик сығымлы ла проблема ул. Йәй көнө нык ҡына үҫкән малайҙарҙы баштан-аяҡ кейендерергә кәрәк. Ҡыҙҙар ғына һаҡлап, ҡәҙерләп кейә белә. Апайҙарынан ҡалғанды һеңлеләре кейә ала. Ә малайҙарҙың кейеме үҙҙәренә бер миҙгелгә лә етмәй ҡала, тиһәң, бер ҙә шаштырыу булмаҫ. Йә салбарының төбө һүтелеп ҡайта, йә еңе йыртылып. Шуға күрә йыл һайын тиерлек мәктәп формаһын да, портфелен дә, аяҡ кейемдәрен дә яңынан алабыҙ. Уҡыу кәрәк-яраҡтары, кәнсә тауарҙары тураһында әйтергә лә түгел. Өс балаға барыһын да ала башлаһаң, хаҡтары ярайһы нык ҡына кеҫәгә һуға.

Августа ғаилә бюджеты "көрсөк"кә килеп терәлеүенән һаҡланып, июнь-июль айҙарында уҡ кәрәкле нәмәләрҙе йәйләп ала башланыҡ. Йәй уртаһында мәктәп кәрәк-яраҡтарының хаҡтары ла ул ҡәҙәр "тешләшмәй" торған. Иң беренсе өсөһөнә лә форма алдыҡ, сөнки уҡыу кәрәк-яраҡтары араһында ул иң ҡиммәте. Икешәр аҡ күлдәк, жилеттар, алмаш салбар, сумка, дәфтәрҙәр - барыһын да алып ҡуйғайныҡ. Аяҡ кейеме, көҙгө курткалар ғына ҡалғайны, Президент һәр береһенә 10-ар мең аҡса күсерҙе. Уны инде ҡышҡы кейемдәр алыуға тотонасаҡбыҙ. Бик ҡыуандыҡ. Көҙгө, ҡышҡы аяҡ кейемдәре аласаҡбыҙ. Ике улыбыҙға махсус ортопедик ботинкалар кәрәк. Ғөмүмән, беҙ ғаиләлә аяҡ кейеме натураль күндән тегелгәненә, уңайлы булыуына ҙур иғтибар бирәбеҙ. Уларҙың иһә хаҡтары арзан түгел, балаларҙыҡы ололарҙыҡына ҡарағанда ла ҡыйбатыраҡ хатта.

Балаларға тип Владимир Путин биргән аҡсаны мотлаҡ улдарыма ғына тотонасаҡмын. Бер тинен дә башҡа маҡсатҡа йүнәлтмәйәсәкмен. Әсәйебеҙ Президенттың 10 меңен, балаларына тотон, тип биргәйне, уны Һаҡлыҡ банкыһына һалып ҡуйҙыҡ, өйҙә ятһа, нисек кенә һаҡларға тырышһаң да тотонола ла ҡуя. "Ҡара көнгә" түгел, ә, киреһенсә, "аҡ көнгә" тип һалдыҡ. Алда яҡын кешеләремдең юбилейы көтөлә.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Оператив штабтың 17 сентябренә мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда коронавирустан 16 үлем осрағы теркәлгән. Йәмғеһе 1373 сирленең, шул иҫәптән 60 йәштән өлкәнерәк 1118 кешенең ғүмере өҙөлгән. Бер тәүлектә коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 315 осрағы асыҡланған. Бөтә осорҙа уларҙың һаны 62 245-кә еткән. Әлеге ваҡытта 737 пациент, шул иҫәптән 60 йәштән өлкәнерәк 480 кеше стационарҙа дауалана. Уларҙың 54-ененң хәле ауыр, 11-е үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Бер тәүлектә 162 дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓"Демография" милли проекты сиктәрендә быйыл Башҡортостанға социаль учреждениелар төҙөүгә 620,5 млн һум аҡса бүленә. Был Өфөләге "Именлек" Республика геронтология үҙәгенә һәм Благовещен психоневрология интернатына яңы корпустар төҙөү мөмкинлеген бирә. Төҙөлөш 2022 йылда башланасаҡ. Ошо турала республика Башлығы социаль селтәрҙәрҙә хәбәр итте һәм ҡарау талап иткән оло йәштәгеләр йәшәгән күп кенә дәүләт учреждениелары биналары иҫке булыуын, уларҙы яңыртыу йәһәтенән эштәр дауам итәсәген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров БР Мәғариф министрлығына төбәктә һөнәри белем биреү буйынса Совет ойоштороурға ҡушты. Был тармаҡты киләһе 4-5 йылда үҫтереү, һөнәри белем биреү оҫталарын күтәрмәләүгә грант системаһын булдырыу, БР Мәғарифты үҫтереү институты базаһында педагогтарҙың квалификацияһын үҫтереү, уҡыусыларҙың стипендияларын күтәреү мәсьәләләрен тикшереү өсөн кәрәк. Шулай уҡ йәш һөнәрмәндәрҙе йүнәлтмә буйынса уҡытыу, республика район-ҡалаларына беркетеү буйынса ла проекттар әҙерләнәсәк.

✓Башҡортостанда миҙгелле грипп ауырыуына ҡаршы вакцинация башланды. Әлегә республикаға 18-60 йәшлектәр өсөн 134 190 доза "Ультрикс Квадри" һәм өлкәндәр өсөн 1 058 230 доза "Совигрипп" вакциналары килтерелгән. Вакцина медицина, мәғариф учреждениелары хеҙмәткәрҙәре, вуз студенттары, 60 йәштән өлкәндәр һәм башҡа хәүеф аҫтындағы кешеләр, призывниктар өсөн тәғәйенләнгән. Әлегә 223 630 өлкән йәштәге кеше вакцина эшләткән. Балаларҙы иммунлаштырыу өсөн вакциналарҙы сентябрҙең икенсе яртыһында алып килә башлайҙар.

✓ *Тәбиғәттең олпат өлөшө тау тип аталһа, кешеләр араһында ундай олпатлыҡҡа өлкән кешеләр эйә. Олоно оло итә белеү, ихтирам итеү, хатта ғәйептәре булған сүрәттә лә уларҙы аяу хаҡында ла бара бында һүҙ...*





лары, бик алыҫ урында ҡалған. Егеттәр был саҡта инде тауҙың бөтөнләй икенсе яғына барып сыҡҡан булған. Уларҙы бүреләр өҙгөләүенән усаҡ яғыуҙары ғына ҡотҡарған.

Төнө буйы ҡысҡыра-ҡысҡыра тамаҡтары ҡарлығып, сарсап, бүреләрҙән ҡоттары осоп, дер ҡалтырауҙан йөрәктәре алынған һәм асыҡҡан егеттәр таңғы ҡояш нурҙары күренеү менән үк ҡотолоу сараһы эҙләп, баштары һыҡҡан яҡҡа киткән. Көнө буйы тау битләүендәге урман араһын ҡыҙырған улар. Инде тамам арып, талсығып, ҡолар хәлгә еткән саҡтарында аталары юлға ташлаған ботаҡтарға килеп сыҡҡан ағалы-ҡустылы был икәү. Йүгереп барып еткән улар аталары янына һәм ҡәҙерле кешеһенең аяғына йығылып, ғәфү үтенгән. Аталары һаман да, улдары ағас төбөнә нисек ултыртып киткән булһа, шул килеш ҡымшанмай ҙа ултыра икән. Улар ҡалдырған ризыҡҡа ла, һыуға ла бөтөнләй ҡағылмаған атай кеше.

Артабан нимә булған, тиһегеҙме? Улар өсәүләшеп ултырып, тамаҡ ялғаған, һыуһынын ҡандырған һәм улдары, атаһының ҡаршылашыуына ҡарамайынса, уны арҡаһына йөкмәп, ҡайтыр юлға сыҡҡан. Уларға ауылға тиҙ генә ҡайтып етер юлды ергә ташланған ағас ботаҡтары күрһәтеп барған. Егеттәр ошо урында ғына аталарының уларҙы нисек итеп ятҡанын аңлаған. Улдарым кире ауылға ҡайтҡан саҡта юлда аҙашмаһын, тип ташлаған булған ул юлға ағас ботаҡтарын.

Ауылда инде, билдәле, кенәз сығарған закон буйынса атай кешене таш менән үлтергәнсе туҡмау әмәле көткән. Әммә егеттәр аталарын һаҡларға ҡарар иткән һәм йорттарына төндә кеше күрмәгәндә генә ҡайтып төшөп, иҙәндәренең аҫтына ҙур баҙ ҡаҙып, аталарын шунда йәшереп йәшәтә башлаған. Көндөҙҙәрен улар алмашлап аталарына ашарға төшөргән, төндәрен атай кеше йортҡа күтәрелеп йоҡлар булған. Ошо рәүешле бер йыл үтеп тә киткән.

Бер ваҡыт туҙға яҙмаған закондар сығарыусы, фармандар биреүсе кенәз үҙенең биләмәһендә йәшәүселәргә көлдән арҡан ишергә бойорған. Кем дә кем был ғәмәлде башҡара, уны ҙур бүләк көтә икән. Егеттәр ҙә үҙ бәхетен һынап ҡарамаҡсы булған һәм аталарынан кәңәш һораған.

- Һаламды тоҙло һыуға тығып, ҡамсы итеп үрегеҙ. Һалам кипкәс, ҡамсыға ут төртөгөҙ, - тип кәңәш биргән уларға аталары. Егеттәр шулай иткән дә. Уларҙың уңғанлығына һәм тапҡырлығына һоҡланған кенәз:

- Улайһа, һеҙгә тағы ла бер эш ҡушам. Әгәр ҙә уныһын да эшләй алһағыҙ, һеҙҙең теләһә ниндәй һорауығыҙҙы үтәргә ризамын, - тигән туҙға яҙмаған закондар һәм фармандар батшаһы булған кенәз.

Был юлы ул егеттәрҙең ҡулына ҙур диңгеҙ ҡабырсағы тоттороп, уның әллә нисә бөгөлөшлө бәләкәй тишектәре аша еп үткәрергә ҡушҡан. Нишләһен егеттәр, тағы ла аталары янына килгән. Кенәздең йомошон аңлатҡас, аталары уларға ҡырмыҫҡа, еп һәм дөгө ярмаһы килтерергә ҡушҡан. Артабан ул ҡырмыҫҡаға еп бәйләгән дә, уны ҡабырсаҡ эсенә төшөрөп, ҡабырсаҡ осондағы ярыҡ янына дөгө һалып ҡуйған. Билдәле, ҡырмыҫҡа тәмлекәстең еҫенә тамшанып, ҡабырсаҡтың эсендәге әллә нисәмә лабиринтты үтеп, өҫкә килеп тә сыҡҡан.

Ошонан һуң егеттәр теге ваҡиғаны кенәзгә тулыһынса һөйләп бирергә мәжбүр булған һәм аталарына ҡарата законды ҡулланмауҙы үтенгән. Кенәз уларҙың һорауын үтәү генә түгел, ғөмүмән, алтмышы тулғандарҙы тауға алып барып ҡалдырыу тураһындағы законды ғәмәлдән сығырап, егеттәргә ҙур бүләктәр биреп, уларҙың дәрәжәһен дә күтәреү хаҡында фарман сығарған...

"Тауға ҡарап таш атма" әйтеме менән был ваҡиғаның ниндәй уртаҡлығы бар тиһегеҙме? Бар икән дә шул. Тәбиғәттең олпат өлөшө тау тип аталһа, кешеләр араһында ундай олпатлыҡҡа өлкән кешеләр, тормош аҡылын үҙенә туплаған аҡһаҡалдар эйә. Кенәздең шундай аҡһаҡалдарҙы тауға алып барып үлергә ҡалдырыу хаҡындағы законы уларға таш менән атыуға тиң булған. Һәр хәлдә, был хәлде кенәз һәм уның улдары шулай баһалаған. Олоно оло итә белеү, ихтирам итеү, хатта уларҙың ниндәйҙер ғәйептәре булған сүрәттә лә уларҙы аяу хаҡында ла бара бында һүҙ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Рәсәй Президенты указы менән пенсионерҙарға ла, балаларға ла 10-ар мең аҡса бирелде. Ошо ярҙам саралары тураһында ни әйтерһегеҙ?

***Зәбих ЗАҺИҘУЛЛИН, пенсионер, Күмертау ҡалаһы:*** Һуңғы арала пенсионерҙар араһында "Президент аҡсаһын нимәгә тотонаһың?" тигән һорау бик популяр булып китте. Беҙҙең хаҡтар менән 10 мең һум күпме инде? Аҙыраҡ тәмлерәк ашайым тиһәң, һис юғында, ун тапҡыр магазинға барып ҡайтыуға етә. Бөтөнләй булмағанға ҡарағанда, әлбиттә, биреүҙәре бик мәслихәт. Тик шуныһы ғәжәп: ниндәй каналды асһаң да, санкция, көрсөк тип һөйләйҙәр, ә шул хәтлем аҡсаны дәүләт ҡайҙан алып түләй һуң? Илдә бит пенсионерҙар йөҙ-ике йөҙ мең генә түгел. Аҙмыкүпме Рәсәй Федерацияһы халҡының өстән бер өлөшөн тәшкил итәбеҙ. Шуныһы ғына бер аҙ аптырата. Шулай ҙа күскән аҡсаны ҡыуанып алдым. Уны шунда уҡ баш ҡалабыҙға уҡырға ингән ейәндең картаһына ебәреп ҡыуандым. Беҙгә, ололарға ҡарағанда, бөгөн йәштәргә аҡса күберәк кәрәк бит.

Нисек кенә булмаһын, ошолай бер тапҡыр бирелгән түләүҙәргә барыбер бик ышанып етмәйем. Беҙ йәш саҡта киске уйынға атайҙың "матай"ын алып сығыр өсөн алдан уҡ уның күңелен күрергә, ризалатырға тырыша торғайныҡ. Әгәр шуларға өлгәшһәк, кисен күрше ауылға мотоциклда еләбеҙ, юҡ икән - йәйәү тәпәйләйбеҙ. Беҙҙе лә дәүләт ниндәйҙер маҡсатына ирешеү өсөн шулай алдаштыра кеүек булып китә ҡайһы берҙә. Элегерәк магазин кәштәләре буш булған заманда һайлау ваҡытында автолавкалар ойоштора, дефицит тауарҙарҙы һата торғайны бит. Шуның кеүек.

Иң борсолдорғаны, әлбиттә, хаҡтарҙың артыуы. 10 мең биреп, беҙҙе алдаштырып, хаҡтарҙы арттырып ебәрмәҫтәрме икән тим. Ярай, беҙ йәшәгәнен йәшәгәнбеҙ, балаларға ҡыйынға тура килә бит. Ике улыбыҙ ҙа былтыр йорт һала башлағайны. Бер йәйҙә стеналарын күтәреп, бер-береһенә ярҙам итеп, башын ябып ҡуйғайнылар. Быйыл эске-тышҡы эштәрен тамамларға ине ниәттәре. Тик төҙөлөш материалдарының хаҡы бермә-бер артып, быйыл икеһе лә бер ни ҡыйрата алманы. Өс тапҡырға артты бит! Бензинға ла хаҡ әллә ярты тинләп, ай һайын артты инде. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә лә йыл һайын тигәндәй күтәрелә. Беҙҙең, ярай, ҡатын менән бергә айлыҡ килемебеҙ ярайһы матур ғына килеп сыға. Бер пенсияға йәшәгәндәр нисек осон осҡа ялғайҙыр ул? Шуға күрә ай һайын пенсияға өҫтәп, унар мең биреп торһалар ҙа ризабыҙ.

Бер танышым Президент аҡсаһын теш ҡуйҙыртыуға алған кредитын ҡапларға тотонмаҡсы. Ул да етмәй әле ти. Тешен ике йыл элек ҡуйҙыртҡан, ә һаман түләй. Шуларҙы уйлаһаң, әлбиттә, ҡыйын булып китә. Йәштәр генә түгел, оло быуын вәкилдәре лә кредит түләһенсе әле! Ниндәйҙер затлы автомобиль өсөн түгел бит, ә һаулыҡ һәм ғүмер өсөн кәрәкле әйбер - теш өсөн!

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда халыҡты авария хәлендәге торлаҡтан күсереү программаһы ваҡытынан алда тамамланыуы бар. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалауға булышлыҡ итеү фонды республикаға финанс ярҙам күрһәтеүҙе хуплаған. Уға ярашлы 2022-2023 йылдарға ҡаралған сараларға ЖКХ фондынан 951,48 млн һум, ә Башҡортостан бюджетынан 211 млн һумдан артыҡ аҡса бүленәсәк. Был аҡса 16 муниципалитетҡа 602 йәшәүгә яраҡһыҙ торлаҡтан 1530 кешене күсереүгә йүнәлтелә.

✓Эшләп йөрөгән рәсәйҙәргә йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиелар автоматик рәүештә йәғни ғаризаһыҙ тәғәйенләнә. Яңылыҡ 2022 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инергә тейеш, тип хәбәр итте Рәсәй Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәте. Бынан тыш, электрон ауырығанлыҡ ҡағыҙына күсеүгә бәйле, киләһе йылдан уның буйынса аҡса алыу өсөн хеҙмәткәрҙәр эш биреүсегә ниндәй ҙә булһа мәғлүмәт тапшырыуҙан бушатыла.

✓Башҡортостан граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды грантына Белоретта "Сектор PRO" социаль башланғыстар район-ара ресурс үҙәге асылды. Үҙәктә коммерция булмаған ойошма асырға, йәки социаль эшҡыуар булырға теләгән кешеләр кәңәш алырға, гранттар отоу өсөн документтар йыйыу һәм тапшырыуҙа ярҙам һорарға мөмкин. Бында Белоретка күрше райондарҙан да мөрәжәғәт итергә була.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың социаль селтәрҙәрҙәге рәсми аккаунттары Рәсәйҙә иң яҡшыларҙың береһе тип табылған. "Диалог" автономиялы коммерция булмаған ойошманың төбәк етәкселәре һәм төбәк вәкиллектәренең рәсми биттәре араһында билдәләнгән ТОП-10 рейтингында ул дүртенсе урынға сыҡҡан.

✓Һамарҙа башҡорт ихатаһы ла индерелгән "Халыҡтар дуҫлығы паркы" этнографик комплексын асыу тантанаһы уҙҙы. Музей был төбәктә йәшәгән халыҡтарҙың үҙенсәлеген сағылдырған 20 ихатанан тора. "Беҙҙең башҡорт ихатаһы XX быуатта йәшәгән башҡорттарҙың мәҙәниәтен һәм көнкүрешен сағылдыра. Бында башҡорттар тотонған һауыт-һабанан алып, барлыҡ тиерлек көнкүреш әйберҙәрен күрергә була", - тине тантана барышында БР мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары Наталья Лапшина.

✓ Быйылғы инвестицион һабантуй сиктәрендә 98 млрд һумлыҡ 23 яңы проект-ты тормошҡа ашырыу тураһында килешеүҙәр төҙөлдө. Бөгөн төбәктә 37,3 мең эш урыны булдырыуҙы күҙаллаған 1624 инвестпроект тормошҡа ашырыла.



ҠЫҪҠАСА

# КЛАСС ЕТӘКСЕЛӘРЕНӘ...

✓ **Урта һөнәри белем биреү ойошмаларында класс етәкселеге өсөн айлыҡ түләү мәсьәләһе буйынса Премьер-министр Андрей Назаров етәкселегендә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ултырышы уҙҙы.** "Быйыл сентябрҙән Рәсәй мәктәптәрендә бөтә уҡытыусыларға класс етәкселеге өсөн 5 мең һум күләмендә федераль өҫтәмә түләү билдәләнде. Ошо йылдың 1 сентябренән был колледждарҙағы төркөмдәрҙең кураторҙарына ла ҡағыла. Уның күләме - 5 мең һум", - тине Андрей Назаров. Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин әйтеүенсә, 2021 йылда түләү Рәсәй Федерацияһының "Мәғарифты үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә федераль бюджет аҡсаһы иҫәбенә бирелә. Рәсәй Хөкүмәте бойороғо менән 2021 йылда Башҡортостан бюджетына 89 миллион һумдан ашыу аҡса бүленде. "Класс етәкселеге өсөн аҡса республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы, Мәҙәниәт министрлығы, Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы, Урман хужалығы министрлығы ҡарамағындағы барлыҡ колледждарҙа түләнергә тейеш", - тине Айбулат Хажин.

✓ **2021 йылдың 1 июленә Башҡортостанда пенсияның уртаса күләме 15 320 һумдан артҡан. Был былтырғы менән сағыштырғанда 826 һумға күберәк, тип хәбәр иттеләр Башстаттан.** Ошо уҡ ваҡытта республикала хаҡлы ялдағыларҙың һаны 1,192 миллиондан 1,159 миллионға тиклем кәмегән. Башҡортостанда пенсионерҙарҙың күпселегенә йәки 1,061 миллиондан ашыу кешегә страховка пенсияһы түләнә. Ағымдағы йылдың 1 июленә уның уртаса күләме республикала 15 755 һум тәшкил иткән. Был 2020 йылдың июленә ҡарағанда 886 һумға күберәк. Ғәҙәттәгесә, дәүләт пенсия тәьминәте буйынса пенсия алыусылар күпкә аҙыраҡ - яҡынса 97 мең кеше. Июлдә улар уртаса 10 613 һум алған, тип белдерҙе республика статистиктары.

✓ **Башҡортостан халҡы "Рәсәй хазинаһы" онлайн тауыш биреүҙә ҡатнаша ала. Бының өсөн russia.nat-geo.ru. һылтанмаһы буйынса үтергә кәрәк.** Теге йәки был туристик объект өсөн 10 октябргә тиклем тауыш бирергә мөмкин. Бер кеше бер нисә тапҡыр тауыш бирә ала, әммә тәүлегенә бер тапҡырҙан артығра тейеш түгел. Ул илдең иң мөһим иҫтәлекле урындарын билдәләргә генә түгел, ә Рәсәйҙең туристик картаһында яңы нөктәләр асырға ярҙам итәсәк. Проектта Башҡортостандан 10 туристик урын һәм объект төрлө номинацияла ҡатнаша: "Янғантау" геопарки, Ҙур Көньяҡ Урал һуҡмағы, Шүлгәнташ мәмерйәһе, "Кандраҡүл" тәбиғәт паркы, "Башҡорт кейеҙе", "Башҡорт солоҡ балы", "Арт-Квадрат" ҡала үҙәге, "Инйәр, Аҡиҙел, Сөн, Еҙем, Әй, Йүрүҙән йылғалары буйлап ағып төшөү", "Ваҡыт йылғаһы" тарихи реконструкция фестивале", "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге. Туризм" проекты. Тауыш биреү йомғаҡтары Nat-geo.ru сайтында һәм "National Geographic Traveler" журналында 2021 йылдың ноябрендә баҫылып сығасаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИНВЕСТҺАБАНТУЙ ЙОМҒАҠТАРЫ




**Уҙған аҙнала Сибайҙа "Урал арьяғы-2021" Инвестһабантуй үтте. Сара барышында Башҡортостан Башлығы "Киләсәк фабрикаһы" инновацион эшҡыуарлыҡ йортон реконструкциялау башланыуы хөрмәтенә капсула һалыуҙа ҡатнашты.**

"Киләсәк фабрикаһы" ҡала уртаһында, элекке "Сибай" ҡунаҡханаһы бинаһында урын аласаҡ. Уны ремонтлауҙың яҡынса хаҡы - 198 миллион һум. Радий Фәрит улы был эш алдағы ике йылда тормошҡа ашырыласаҡ, тип белдерҙе. Ә инде Сибай эшҡыуарҙары билдәләүенсә, бизнес-үҙәк урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса перспективалы һәм инновацион идеяларҙы юғары кимәлдә тормошҡа ашырырға ярҙам итәсәк.

Рәсәйҙә, Башҡортостанды, ҡыҙыҡлы мөмкинлектәре һәм сифатлы, етди хеҙмәт ресурстары булған Урал арьяғы тиған территорияны асыу - инвестфорумдың төп бурыстарының береһе, тип белдерҙе Радий Хәбиров. "Был бары тик өсөнсө Инвестһабантуй. 15-се лә, 20-се лә түгел һәм етди һөҙөмтәләр тураһында һөйләргә иртәрәк. Шул уҡ ваҡытта, яңы проекттар барлыҡҡа килеүе һөйөндөрә", - тине республика етәксеһе.

Сара барышында "Инвестиция сәғәте" эшлекле программаһының ултырышы үтте. Унда дөйөм суммаһы 2,5 миллиард һум торған биш инвестпроект буйынса фекер алыштылар. Беренсе проект - "МКХП-Ситно" ябыҡ акционерҙар йәмғиәте". Ул Сибайҙа тирмән комплексын реконструкциялауҙы һәм модернизациялауҙы, шулай уҡ макарон изделиелары сығарыу буйынса цех асыуҙы күҙаллай. Шулай уҡ Туймазы районының Ҡандра ауылы эргәһендә элеватор базаһында элеватор комплексы һәм контейнер майҙансыһы булған бүлеү-логистика үҙәген ойоштороу, Сибай һәм Өфө ҡалаһында Имплантация һәм протезлау үҙәктәре, Белорет районында ағас эшкәртеү цехы асыу, балаларҙың төҙәк-ара ял һәм дауаланыу үҙәген булдырыу буйынса тәҡдимдәр тикшерелде. Дөйөм алғанда, быйылғы инвестицион һабантуй сиктәрендә 98 млрд һумлыҡ 23 яңы проектты тормошҡа ашырыу тураһында килешеүҙәр төҙөлдө. Әйткәндәй, бөгөн төбәктә дөйөм суммаһы 1270,4 миллиард һум булған һәм 37,3 мең эш урыны булдырыуҙы күҙаллаған 1624 инвестпроект тормошҡа ашырыла.

Инвестһабантуй сиктәрендә предприятиелар һәм учреждениелар, халыҡ-художество кәсептәре оҫталарының эштәре күргәҙмәһе, "КымызFEST" фестивале үтте. Унда тамашасылар хатта бейә һауып ҡарай алды, Башҡортостанға ҡымыҙ менән дауаланырға "килгән" Лев Толстой, Антон Чехов, Марина Цветаева менән таныштыы. Шулай уҡ ҡала майҙанында милли аш-һыу буйынса Республика конкурс-фестивале үтте.

# КРЕМАТОРИЙ БУЛАСАҠМЫ?




**Һуңғы ваҡыт матбуғат һәм киң мәғлүмәт сараларында Өфөлә крематорий төҙөлөшө өсөн Орджоникидзе районынан ер участкаһы бүлеүгә рөхсәттән баш тартылыуы хаҡында яңылыҡ әүҙем яҡтыртыла.**

Тәүҙә үк шуны әйтергә кәрәк: был ҡарар формаль рәүештә эйә һәм муниципалитет пландарын юҡҡа сығармай. Ҡарар юридик нормаларҙы күҙәтеү йөҙөндә сығарылған. 2020 йылдың декабрендә Өфө ҡала округы Советы депутаттары ерҙе файҙаланыу һәм ҡала төҙөлөшө ҡағиҙәләренә төҙәтеүҙәр индерҙе. Шуның менән бәйле элекке Яңы Александровка ҡасабаһының Энергетиктар урамы менән "Башнефть-Новоил" акционерҙар йәмғиәте араһындағы участка коммерция-етештереү зонаһынан махсуслаштырылған (СП-1) биләмә категорияһын үҙгәртте. Хәҙер крематорий төҙөлөшө урынына фәҡәт ритуаль эшмәкәрлек саралары башҡарыласаҡ.

Крематорий төҙөлөшө мәсьәләһенә ҡала 2002 йылда уҡ мөрәжәғәт иткәйне, ләкин ҡайһы бер сәбәптәр менән был проект бойомға ашырыла алманы. Бынан тыш, өфөләр араһында һорау алыуҙар һөҙөмтәһе буйынса, крематорий хеҙмәттәре менән уларҙың ни бары 1 проценттан да кәмерәге генә файҙаланырға теләк белдерҙе. Ике тиҫтә йылдан һуң кешеләрҙең был мәсьәләгә ҡарашы ныҡ ҡына үҙгәрҙе. Рәсәйҙә хәҙер вафат булғандарҙың 40 проценты кремацияланa. 300 мең халҡы булған ҡалаларҙа крематорийҙарҙың төҙөлгәндәре лә байтаҡ, улар өҫтәп төҙөлә йәки яңылары проектлана. Шуға күрә миллион халҡы булған Өфө өсөн бындай төҙөлөш ваҡыт мәсьәләһе ине. Һуңғы ике йылда был йүнәлештә инженер (геология, экология, гидрометеорология йәһәтенән) тикшеренеүҙәр буйынса етди эш башҡарылды, крематорий проекты төҙөлдө, йәмәғәтселек тыңлауҙары булып үтте. Күптән түгел Өфө хакимиәте планлаштырыу проектын һәм биләмәне межалау эштәрен раҫланы, алда - дәүләт экспертизаһы үтеү ҡарала.

# МИЛЛИ КЕЙЕМ КӨНӨНДӘ...



**Башҡортостан халыҡтарының милли кейеме көнө быйыл 10 сентябргә тура килде. Республика Башлығы указы буйынса йылына ике тапҡыр билдәләнгән байрам көнөндә бөтә район-ҡалаларҙа саралар ойошторолдо. Өфөлә лә "Арт-Квадрат" ҡала үҙәгендә БР Халыҡтар дуҫлығы йорто тарафынан сағыу байрам сараһы уҙғарылды, уны билдәле актер Шәһит Хамматов алып барҙы.**

Байрам майҙансығында БР Халыҡтар дуҫлығы йорто филиалдарының башҡорт, урыҫ, белорус, украин, сыуаш тарихи-мәҙәни үҙәктәре этник оҫталыҡ дәрестәре уҙғарҙы. Благовар районының Ҡәнзәфәр бей исемендәге "Һарайлы" тарихи-мәҙәни үҙәгенән Гөлфирә Әхмәтшина балаларға башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының селтәр, яға, һаҡал, хәситә тип йөрөтөлгән милли биҙәүес төрҙәрен пластилин ярҙамында эшләргә өйрәтте. Оҫтабикә әйтеүенсә, балаларға энә-еп тоторға өйрәтеүе еңел түгел һәм пластилин был осраҡта ярҙамға килә. Бынан тыш ул ҡымыҙ буйынса ла оҫталыҡ дәресе күрһәтте. Сағыу концерт программаһында сығыш яһаған талантлы йәштәр төрлө милли йыр-моңдарҙы яңғыратты, халыҡ бейеүҙәрен башҡарҙы. Тамашасылар ҙа тик торманы: улар төрлө уйындарҙа ҡатнашып М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры, Дәүләт академия рус драма театры, М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры, "Нур" Өфө дәүләт татар театрына билеттар һәм "Радость есть" хәләл кафеһына сертификаттар отто.

Башҡортостан халыҡтарының милли кейеме көнөндә республиканың һәр район-ҡалаһында йәкмәткеле лекциялар, милли биҙәүестәрҙе эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре, экскурсиялар, күргәҙмәләр, осрашыуҙар уҙғарылды. Әлбиттә, йылдағыса барыһы ла милли кейемдәрҙә төшкән фотолары менән социаль селтәрҙәрҙә ойошторолған "Яратам2021" конкурсында әүҙем ҡатнашты. Башҡортостан халыҡтарының милли кейеме көнө эмблемаһын уйлап табыу буйынса ойошторолған конкурсҡа ла йомғаҡ яһалды. Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы үткәргән конкурста Өфө дәүләт авиация техник университетының 4-се курс студенты Илнур Абдуллин еңеүсе тип табылды.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Нижегородка биҫтәһендә йәшәүселәргә 2022 йылда биләмәне төҙөкләндерә башларға вәғәҙә бирҙе. "Греков менән ошо мәсьәләне тикшерҙек. Киләһе йылда Нижегородкала эш башлайбыҙ. Ике йылға иҫәпләнгән. Беҙ бер биләмәгә блоктар менән инәбеҙ. Был ауыр, аҡса кәрәк. Уның ҡарауы, кеше шунда уҡ һөҙөмтәне күрә", - тине Радий Хәбиров

✓Росприроднадзор етәксеһе Светлана Радионова Лаборатор анализ һәм техник үҙгәрештәр үҙәге көсө менән "Өфөхимпром" заводының етештереү майҙансығында тикшеренеүҙәр башланыуын хәбәр итте. Белгестәр әйтеүенсә, бында 143 гектар ер бысранған, 412 мең кубометр ағыулы шлам һәм ләм йыйылған. Башта ентекле инвентаризация яһала, һуңынан һәр участканың тупрағы тикшерелеп, һығымталар ил Хөкүмәтенә артабан ҡарар ҡабул итеү өсөн йүнәлтеләсәк. Тирәяҡ мөхиткә зыян килтергән ҡалдыҡтарҙы юҡ итеү һәм территорияны тергеҙеү бер нисә тиҫтә миллиардҡа барып баҫыуы бар.

✓Өфөлә "Башҡортостандың баш ҡалаһы мәктәпкәсә тиклем мәғариф учреждениеһының иң яҡшы педагогы - 2021" һөнәри оҫталыҡ конкурсы башланды. Унда хеҙмәт стажы 2 йылдан да кәм булмаған тәрбиәселәр, өлкән тәрбиәселәр, музыка етәкселәре, физик культура буйынса инструкторҙар ҡатнаша ала. Ярыш өс турҙа уҙа.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә етенсе халыҡ-ара марафон үтте, унда дүрт йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашты. Баш ҡала хакимиәте матбуғат үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, сарағa 18 илдән, Рәсәйҙең 34 төбәгенән, 229 ҡаланан спортсылар килгән. Улар телэктәре буйынса биш арауыҡтың береһен: ике, биш, ун, 21,1 һәм 42,2 километрҙы йүгереп үтте.

✓Өфөлә 17-19 сентябрҙә үткән һайлауҙарҙа халыҡ киләһе йылда төҙөкләндереләсәк йәмәғәт урындары өсөн дә тауыш бирҙе. Һайлау участкаларынан сыҡҡанда сәғәт иртәнге 11-ҙән төшкө 2-гә тиклем "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" проекты сиктәрендә тауыш йыйыу ойошторолдо. Өфөләр Орджоникидзе районындағы Дан бульвары тирә-яғы һәм М. Гәрәев исемендәге сквер, Калинин районындағы Мушников урамына һәм Йылы күленә яҡын территория, "Нефтихимиктар" мәҙәниәт һәм ял паркы, "Дим" мәҙәниәт һәм ял парктары буйынса үҙ фекерҙәрен белдерҙе.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Инженер-техник тикшереү буйынса, һәйкәл боҙола һәм батыр атының алғы һул аяғының аҫҡы өстән бер өлөшө алмаштырыуҙы талап итә. Шулай уҡ һәйкәлдең ҡойоп йәбештерелгән урындарында үтәнән-үтә тишектәр бар.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ЙЫЛЫТЫУ МИҘГЕЛЕ ЕТТЕ...

## штаб төҙөлдө



**Эҫе йәйҙән һуң ҡапыл ғына һыуытып ебәргәйне, шунда уҡ фатирҙарҙы йылытыу ҡорамалдарын тоҡандырҙыҡ, шулай бит. Өҫтәүенә, фатирҙарҙа һыуыҡ, ҡасан йылы бирәләр инде, тип етәкселәрҙе әрләп алырға ла онотманыҡ. Шөкөр, көндәр ҡабат йылыта башланы, ә шулай ҙа "Быйыл октябрҙә үк ҡар ята икән, ҡыш яман һыуыҡ була икән", - тигән хәбәрҙәр "өшөтә". Хәйер, Өфө ҡала хакимиәтендә лә, республика Хөкүмәтендәге сираттағы кәңәшмәлә лә көҙгө-ҡышҡы йылытыу миҙгеле темаһы төп урында торҙо.**

Быға тиклем хәбәр итеүебеҙсә, әгәр өс көн рәттән һауа температураһы +8 градус булһа, йылытыу миҙгеле башлана. Тәү сиратта социаль объекттар йылытыу системаһына тоташтырыласаҡ. Ошо көндәрҙә Республика Башлығы ҡушыуы буйынса торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса оператив штаб төҙөлдө. Ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Марат Ғәйфуллин белдереүенсә, оперштаб ике кимәлле буласаҡ. Райондар кимәлендә уға хәл-торошто көн һайын тикшереп тороу өсөн район хакимиәттәре башлыҡтары, ресурс менән тәьмин итеү, идара итеү ойошмалары һәм Граждандарҙы һаҡлау идаралығы вәкилдәре инһә, ҡала кимәлендә Өфө ҡалаһы райондары хакимиәттәре башлыҡтары, ресурстар менән тәьмин итеү ойошмалары етәкселәре, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарынан торған комиссия аҙна һайын халыҡтан һәм ойошмаларҙан килгән мөрәжәғәттәрҙе анализлаясаҡ, килеп тыуған мәсьәләләрҙең сәбәбен асыҡлаясаҡ. Төбәк етәксеһе халыҡ менән аралашыуҙың уңайлы каналын булдырырға ҡушты. Бының өлгөһө итеп ул республиканың коронавирусҡа ҡаршы хәл-торош үҙәге туплаған тәжрибәне ҡулланырға саҡырҙы һәм ЕРКЦ офистарының былтыр халыҡтан килгән мөрәжәғәттәр менән эшләп өлгөрмәүен белдерҙе.

Шулай уҡ йылдың иғтибар йәлеп иткән темаларының береһе Нуғай ауылына сыҡҡан шоссеның сиселешен төҙөү булды. Былтыр уның проект документацияһы эшләнһә, быйыл июндә төҙөлөшкә муниципаль контракт төҙөлдө. Ҡала хакимиәтенең Төҙөлөш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Константин Пеппе белдереүенсә, әле объектта төҙөлөш ҡаласығы эшләнгән, тупраҡ-үҫемлек ҡатламы алына, кәрәкле материалдар ташыла. Бында эштәр ике йылға иҫәпләнгән һәм 2023 йылдың мартында тамамланырға тейеш.

Һәм тағы ла: был аҙнала 17-19 сентябрҙә илдә РФ Дәүләт Думаһына, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һәм Өфө ҡала Советына һайлауҙар үтә. Баш ҡаланың барлыҡ һайлау участкалары мөһим сараға әҙер, участкалар белем биреү усаҡтарында ойошторолған урындарҙа был көндәрҙә дәрестәр булмай.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*КӨНАУАЗ*

# САЛАУАТ ЮЛАЕВҠА...

## ярҙам кәрәк!



**Эксперттар Өфөлә Салауат Юлаевҡа ҡуйылған һәйкәлде тикшереп, уны һүтергә (демонтаж) кәрәклеген белдергән. Бындай һығымта "Салауат Юлаев һәйкәле" федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объектын һаҡлау буйынса эштәр башҡарыуға проект документацияһы буйынса үткәрелгән тарихи-мәҙәни экспертиза һөҙөмтәләре нигеҙендә эшләнгән. Башҡортостандың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ сайтына ҡуйылған документтан күренеүенсә, экспертизаны Өфө, Мәскәү, Санкт-Петербург белгестәре ҡала хакимиәте заказы буйынса үткәргән.**

Инженер-техник тикшереү һәм эшләнгән иҫәпләүҙәр буйынса, һәйкәл боҙола һәм ныҡлығын юғалта бара. Аныҡлап әйткәндә, батыр атының алғы һул аяғының аҫҡы өстән бер өлөшө алмаштырыуҙы талап итә. Шулай уҡ һәйкәлдең ҡойоп йәбештерелгән урындарында үтәнән-үтә тишектәр бар. Айырым элементтарҙы иретеп йәбештергән урындар өлөшләтә зыянланған һәм ремонт талап итә. Бынан тыш, белгестәр һығымта яһауынса, һәйкәл тыштан да, эстән дә атмосфера һәм электрохимик (суйын менән ҡорос бер-береһенә тейеп торған урындар) коррозиянан һаҡланмаған. 2019 йыл менән сағыштырғанда коррозия кимәле 10 процентҡа артҡан, шул сәбәпле иретеп йәбештерелгән урындар үҙҙәренең тәғәйенләнешен юғалтҡан. Был урындар таҙартыуҙы, коррозияға ҡаршы эшкәртеүҙе һәм зыян күргән йәбештереү урындарын, ярыҡтарҙы ҡабаттан иретеп йәбештереүҙе талап итә. Монументта шулай уҡ эскә ҡар-ямғыр үтеп инерлек тишектәр, ярыҡтар бар.

"Һәйкәлдең ышаныслылығын һәм халыҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн уның эргәһендәге территорияны ябырға; һәйкәлде һәм плинтты һүтергә тәҡдим ителде. Аттың аяғын нығытыу өсөн плинтта өҫтәмә деталдәр булдырыуҙы ҡарау; һәйкәл тирәһендәге ерҙе нығытыу; аттың алғы һул аяғының өстән бер өлөшөн яңы эшләнгәненә алмаштырыу, шулай уҡ нигеҙҙе һәм ерҙе өҫтәмә рәүештә тикшереү кәрәк", - тиелә эксперттарҙың һығымтаһында.

Әйткәндәй, Салауат Юлаев һәйкәлен реконструкциялау планлаштырылыуы тураһында Өфө ҡала хакимиәте бер йыл самаһы элек хәбәр иткәйне. Ул ваҡытта реставрация эштәре йыл ярым - ике йылға тиклем дауам итеү ихтималлығы һәм экспертиза үткәрелгәндән һуң ғына эштәр башланыу мөмкинлеге белдерелгәйне.

*БАШ ҠАЛАМ*



# УРМАНСЫЛАР ПАРКЫНДА...

## уңайлыҡтар кәрәк

**Әгәр минең ҡулымдан килһә, мин баш ҡаланың һәр районында күберәк парктар, скверҙар, башҡа йәмәғәт урындары булдырыр һәм уларҙы халыҡҡа уңайлы булһын өсөн үҫешкән инфраструктура менән байытыр инем.**

Шул уҡ ваҡытта бындай территорияларҙың иң яҡшы сифаттарын төҙөкләндереү ярҙамында айырым билдәләп күрһәтергә кәрәк тип уйлайым һәм бының өсөн граждандар проект эшләү ваҡытында үҙҙәренең фекерҙәрен белдереү мөмкинлегенә эйә булырға тейеш. Бының өсөн проект семинарҙары ойошторорға һәм йәмәғәт территорияларын ҡулланыусы, йәғни ваҡытын ошонда үткәрергә теләүсе нимә күрергә теләгәнен асыҡларға кәрәк, сөнки үҫмерҙәрҙең ихтыяжы бер төрлө, ә ғүмеренең алтын көҙөнә аяҡ баҫыусылар ял итеүҙе бөтөнләй икенселәй күҙ алдына килтерә. Шуға күрә проектта ҡатнашыу өсөн процедураларҙың барыһын да үтәү мөһим, бында социаль селтәрҙәрҙә тауыш биреп йәки йәмәғәт фекерен йыйып ҡына тынысланырға ярамай.

Мин, ҡала кешеһе булараҡ, Якутов исемендәге паркты тәртипкә килтереүҙәрен теләйем, сөнки ул "Ҡашҡаҙан"да реконструкция эштәре барғанда ҡалала һыу сығанағы булған берҙәнбер парк. Икенсенән, ул ҡаланың тап уртаһында урынлашҡан, уға республиканың барлыҡ ҡунаҡтары һәм туристары килә ала. Әлеге ваҡытта Якутов паркы бысраҡ, унда бер ниндәй концепция юҡ, ул яҡшы инфраструктураға мохтажлыҡ кисерә.

Урмансылар паркында ла уңайлы инфраструктура юҡ. Башҡортостан ҡалаларын үҫтереү институты территория менән ҡулланыусылар, тирә-яҡтағы йорттарҙа йәшәүселәр өсөн проект семинары үткәрҙе. Граждандарҙың йүнәлеш күрһәткестәре, бәҙрәфтәр, таҙартылған территория һәм парктың тәртиптә булыуын күргеләре килә. Бынан тыш, улар парктың Өфөнөң йәшел каркасының бер өлөшө булараҡ бик мөһим икәнлеген билдәләне. Халыҡ паркты төҙөкләндерә башлау менән унда төҙөүселәр килер һәм парк территорияһында торлаҡ йорттар һалына башлар, тип хәүефләнә. Мин, БР Йәмәғәт палатаһының Инфраструктура һәм территориялар үҫеше буйынса комиссия рәйесе булараҡ, йәмәғәтселек фекеренә ҡолаҡ һалыуҙың мөһимлеген билдәләп, урман паркы зонаһының граждандарҙың прогулка территорияһы итеп ҡалдырылыуын теләйем. Был тыныс парк аттракциондарһыҙ һәм ныҡ үҙгәрешһеҙ һаҡланһын ине, сөнки ул Өфөнөң ҡаҙанышы һәм үҙенсәлекле табышы.

**Әлиә АЙСИНА,**
**Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы ағзаһы.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан тамырҙары

❖ Ҡан тамырҙарын таҙартыу өсөн ике ҡалаҡ онталған валериана тамыры, 1 стакан укроп орлоғо, 2 стакан балды 2 литрлыҡ термосҡа һалып, тултырғансы ҡайнар һыу ҡойорға һәм бер тәүлек төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Бөйөр

❖ Бөйөрҙө таҙартыу өсөн 1 балғалаҡ етен орлоғона 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнатырға һәм 2 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәгә лимон һуты ҡушылған һыуҙы өҫтәп ҡойоп, көнөнә бер нисә тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Бауыр

❖ Бауыр ауырыуҙарынан бер тигеҙ миҡдарҙа һөт һәм яңы һығылған кишер һутын ҡушып, иртәнге аштан 1,5-2 сәғәт алда 1-әр стакан эсергә. Был рәүешле дауаланыу осоро сикләүһеҙ.

### Сиҡаҡлағанда

❖ Балғалаҡҡа семтем гәрсис һалып, өҫтөнә аш һеркәһен тамыҙып бутарға. Шунан ошо әҙерләмәне телдең 1/3 өлөшөнә һөртөргә. Башта телде яндыра, әммә бер нисә минуттан үтә. Ауыҙҙы йылы һыу менән сайҡағас, сиҡаҡлауҙан туҡтайһың.

### Талаҡ

❖ Талаҡ ҙурайғанда 50-шәр грамм меңъяпраҡ һәм календуланы бутап, ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙын ябырға һәм бүлмә температураһында һыуынғансы төнәтергә. Тулыһынса һауыҡҡансы көнөнә ике тапҡыр 1-әр стакан эсергә.

### Һимеҙлек

❖ Көн һайын ашарҙан 30-40 минут алда яңы һығылған кәбеҫтә (белокачанная капуста) һутын 3-4 тапҡыр эсергә. Тәүҙә яртышар стакан эсә башларға, яйлап теүәл бер стаканға еткерергә. Был рәүешле 3-4 аҙна дауаланырға.

### Аяҡ тартышһа

❖ Көнөнә бер нисә тапҡыр табандарға лимон һуты һөртөргә һәм кипкәнсе аяҡҡа баҫмаҫҡа.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ Ихтилалға тиклем үк мулла Килмәк абыҙ билдәле кеше була. Уҡымышлылығынан тыш, Килмәк шәхси сифаттары менән айырыла. Быларҙың барыһы ла, уны Юрматы ҡәбиләһе башлығы итеп танырға булышлыҡ итә.***



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Шулай уҡ ҡолондарҙы һәм быҙауҙарҙы бәйләп тоторға ярҙам иткән, тәү ҡарауға ябай ғына күренгән хужалыҡ әйбере - шалтыраҡ та иғтибарға лайыҡ. Уның бер өлөшө ниндәйҙер тере йәнде һынландырған (тишек рәүешендәге күҙле баш һәм ҡабарынҡы түш асыҡ күренгән), икенсеһе иһә боронғо уңдырышлылыҡ символы - фалосҡа ишара яһай, күрәһең.



*Шалтыраҡтар. Белорет районы, 1971 й., В.М. Шутова һүрәте.*

Быуат ярым, ике быуат элек кенә ағас һырлау оҫталарының тағы бер үҙенсәлекле эш төрө - күнгә баҫып биҙәк төшөрөү өсөн орнаментлы үрнәктәр эшләү булған. Ғәҙәттә күнде уйылған семәр һалынған таҡтаға киргәндәр. Тикшеренеүселәр ағаста һәм күндәге семәрҙәрҙең оҡшашлығын билдәләй, әммә улар араһында тура бәйләнеш барлығын күҙҙән ысҡындыра. Ян һаҙағы һәм ҡорман, ҡанъяға, ҡаптырғаларҙың биҙәлеше камиллығы күп осраҡта ағас һырлаусының оҫталығынан торған.



*Семәрле ағас үрнәк ярҙамында баҫылған күн ҡаптырға.*

Ағас семәрләү сәнғәте хужалыҡ тармаҡтары һәм боронғо көнкүреш ғөрөф-ғәҙәттәре менән тығыҙ бәйле булыуы башҡорттарҙа художестволы ағас эшкәртеү иртә осорҙа барлыҡҡа килеүенә дәлил.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

БУЛҒАН БИТ БАТЫРҘАР!

# КИЛМӘК НУРЫШЕВ



**Тарихи шәхестәрҙең биографияһы һәр ваҡыт ҡыҙыҡһыныу уята. XVIII быуаттың беренсе яртыһындағы ҙур башҡорт ихтилалы юлбашсыһы Килмәк Нурышев кеүек халыҡ геройы тураһында һүҙ барһа, был мәғлүмәт бигерәк тә иғтибарҙы йәлеп итә.**

1737 йылдың 29 мартында Килмәктән һорау алыу протоколында "дед и отец ево старинные башкирцы" тип яҙылған (Материалы по истории Башкортостана. Уфа, 2002. Т.VI. С.365). Тимәк, Килмәк боронғо зыялы башҡорт ырыуына ҡараған. Артабан Килмәк үҫмер сағында Алдар ихтилалында ҡатнашыуын, унда атаһы һәләк булыуы хаҡында хәбәр итә. Ихтилалға тиклем ярты йыл алдан, йәғни 1706 йылдың аҙағында, 1707 йыл башында Алдар Иҫәкәев һәм уның дуҫы, Килмәккә туған тейешле кеше "төп бунтарь" Хажи Аҡҡусҡаров 27 кешенән торған делегацияны, ярҙам һорап, Ҡырым ханына һәм төрөк солтанына ебәргән. Ошо алыҫ һәм хәүефле сәйәхәттә Килмәк тә ҡатнаша. Күрһәтмәләрҙән күренеүенсә, ул яҡынса 1690 йылда тыуған. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, Хажи Аҡҡусҡаров 1707 йылда башҡорт ханы тип иғлан ителгән.

1660 йылдарҙа батша хакимиәтендә Юрматы ауылынан ағалы-энеле тархан Аҡҡусҡаровтар тураһында баҫылған бер нисә документ теркәлә. Дөйөм алғанда, уларҙа ҡайһы бер ауыл исемдәре, шулай уҡ Юрматы ырыуы шәжәрәһе билдәләнгән. Уның һуңғы төҙөүсеһе - Мырҙаш ауылынан Миңлеғол Зыянбирҙин. Ул XIX быуат уртаһында - XX быуат башында йәшәгән. Унан күренеүенсә, легендар Юрматы бейҙең алыҫ нәҫеле Аҡҡусҡар Айдашевтың Хажы ауылына нигеҙ һалған Хаджибаба исемле улы, Этҡол ауылына нигеҙ һалыусы Этҡол, Ҡолош, Суман, Иҫәнғол, Ғәйет һәм Ярат (старшина Сайран Сәйетовтың олатаһы) исемле улдары булған (Башкирские родословные. Уфа, 2002. С.51-104). Был бер-береһенә яҡын ғына тораҡ пункттарҙың барыһы ла әлеге ваҡытта Ишембай районында урынлашҡан.

1735-1737 йылғы ихтилал буйынса документтарҙа Килмәктең ағаһы Дауыт Иманов телгә алына. Уның исеме 1734 йылғы Юрматы олоҫо тархандары исемлегендә лә осрай (Әсфәндийәров Ә.З. Башҡорт тархандары. Өфө, 2006, 130-сы бит). Был факт Килмәктең Аҡҡусҡар нәҫеленән икәнлеген йәнә бер тапҡыр раҫлай.

Килмәктең ике туған ағаһы Дауыт Имановтың 1741 йылда Минзәлә төрмәһендә язалап үлтерелгәне билдәле. Шул ваҡытта Аҡай Күсемовтың улы Абдулла Аҡаевтың һәм Алдар Иҫәкәевтың улы Муса Алдаровтың башын киҫкәндәр (РГАДА. Ф.248. Кн.251. Л.1001). Хажи Аҡҡусҡаров 1735 йылда иҫән булған әле (Материалы ... Т.VI. С.52). Юрматы олоҫоноң төп һәм иң ҙур ауылы Һайран XVII быуат аҙағында XVIII быуат башында Юрматы тип аталған һәм Килмәктең тыуған төйәге булған тип уйларға урын бар.

Ихтилалға тиклем үк мулла Килмәк абыҙ билдәле кеше була. Уның мәсете ҙур популярлыҡ яулай. Уҡымышлылығынан тыш, Килмәк шәхси сифаттары менән айырыла. Быларҙың барыһы ла, тормош һәм хәрби тәжрибәһе менән бер рәттән, уны Юрматы ҡәбиләһе башлығы итеп танырға булышлыҡ итә. Һуңынан, ауыр һынауҙар осоронда, башҡорттар "уның исеме мең кешегә торош итә" ("имя ево служит за тысячу человек") тип әйтә (Материалы... Т.VI. С.368).

1734 йылдың ноябрендә Өфөлә Ырымбур экспедицияһы барлыҡҡа килеүе башҡорттарҙың батша власы менән үҙ-ара мөнәсәбәте тарихында яңы дәүерҙе аса. Тыныс ваҡытта ҙур ғәскәрҙең килеп инеүе, Сенаттың обер-секретары Иван Кириловтың Башҡортостандың көньяҡ сигендә Ырымбур ҡәлғәһен төҙөргә ниәте башҡорттарҙың үҙ ирке менән Урыҫ дәүләте составына инеү шарттарына тура килмәй. Әйткәндәй, был төҙөлөш хөкүмәттең аван-

ЫРЫУЫМ - ҒӘЙНӘ

# ПЕРМЬ БАШҠОРТТАРЫ



**Альберт Мәхмүтов - ғәйнә башҡорто, Пермь крайының Барҙа районында тыуып үҫкән, урындағы тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры, "Пермь башҡорттары" китабы авторҙарының береһе, төбәк башҡорттарының тарихын һаҡлау йәһәтенән күп көс һалған милләттәшебеҙ. Ул үҙенең арҙаҡлы яҡташы, билдәле милләттәшебеҙ Туҡтамыш Ишбулатовтың данын терегеҙеү, уға һәйкәл ҡуйыу өсөн күп тырышлыҡ һалған.**

Мәғлүм булыуынса, Туҡтамыш Ишбулатов - 18-се быуатта йәшәгән билдәле башҡорт шәхестәренең береһе. 1730 йылда Ишбулат Ҡамышев исемле башҡорт кешеһенең ғаиләһендә тыуған. 1767-1768 йылдарҙа -Уложенный комиссия депутаты. Заманының эре мәғдән сәнәғәтсеһе булған, егерме йыл тиерлек башҡорттарҙың иң күп халыҡлы, алдынғы Ғәйнә улысы старшинаһы вазифаһын башҡарған. Өфө провинцияһы башҡорттарының наказдары авторы. Киң белемле шәхес башҡорт халҡының социаль-иҡтисади, сәйәси-хоҡуҡи хәлен яҡшы аңлаған, башҡорт һәм рус телдәрендә иркен аралашҡан, уҡый-яҙа белгән.

Наказдарҙы ул 47 биткә, 35 бүлеккә яҙған. Унда ул башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуҡтарын, эске үҙидараһын, мосолмандарҙың дини хоҡуҡтарын яҡлаған. Уложенный комиссия ултырыштарында биш тапҡыр сығыш яһаған, Өфө сауҙагәрҙәренең монополиялы сауҙаһына ҡаршы көрәшкән, башҡорт старшиналарына беркетелгән һәм һәр аҙымын түрәләргә еткереп торған мишәр писарҙәренән арындырыуҙы талап иткән. 1771-1773 йылдарҙа Польша походында ҡатнашҡан.

**✓ 2 октябрҙә, 5 мең башҡортто туплап, Аҡай һәм Килмәк уларҙы әлеге Стәрлетамаҡ тирәһендә ҡаршы ала. Яу 4 көн дауам итә. Был ваҡытта ихтилал бөтә Башҡортостан биләмәһенә тарала.**



туристик планының башланғыс этабы ғына була. Бынан һуң Азиянан Һиндостанға тиклем поход ҡуҙаллана, унда башҡорттар ҡатнашырға тейеш була. 1734 йыл аҙағында Нуғай юлының төрлө олоҫ вәкилдәре, шул иҫәптән Килмәк Өфө янындағы Азиев мәсете янында йыйыла. Советта походта ҡатнашмаҫҡа ғына түгел, ә Ырымбурҙы төҙөргә ҡаршылыҡ күрһәтергә ҡарар ҡабул ителә.

1735 йылдың май аҙағында, июнь башында Өфө эргәһендә Ҡаҙан юлынан Аҡай Күсемов, Үмәр Таҡтаров, Солтан Морат Дюскеев, Мәсәғүт Уразаев һәм Нуғай юлынан Килмәк Нурышев, Бәпәнәй Бабкин, Һөйәрғол Сиремшанов, Ҡарамырҙа Аҫылов, Рысай Игимбәтов етәкселегендә 500 башҡорт йыйыла. Эшмәкәрлеге тураһында аңлатыуын һәм императорға башҡорт делегацияһын ебәрергә рөхсәт биреүен талап итеп, Кирилов лагерына ике тапҡыр вәкил ебәрәләр. Кириловтың ярҙамсыһы Алексей Тевкелев уларҙың икеһен дә язалап үлтерә. Килмәкте, Аҡай һәм Үмәрҙе юлбашсы итеп һайлап, башҡорттар тарала һәм һуғышҡа әҙерләнә башлай.

15 июндә ҡеүәтле артиллерия менән ҡоралланған өс меңлек отряд башында Кирилов Өфөнән сыға. Ул Юрматы олоҫо аша сыҡҡанда етерлек көсө булмағас, Килмәк уға ҡаршылыҡ күрһәтмәй. Бер нисә көндән Өфөнән подполковник Чириков етәкселегендә 700 кешелек Вологодский драгундар полкы ҡуҙғала. 1 июлдә Ерғән тауы тирәһендә уларға Килмәк һәм Аҡайҙың отряды һөжүм итә. Оҙаҡҡа һуҙылған яу барышында Чириков үҙе һәм уның ярты отряды һәләк була.

Драгундарҙы тулыһынса ҡырылыуҙан Кирилов яғынан килгән ярҙам ҡотҡара. Үҙенең планынан ситләшеп торорға мәжбүр булған Кирилов үс алыу менән яна. Ырымбурға нигеҙ һалғас, башҡорт ауылдарын яндырып, талап, Өфөгә йүнәлә. Ир-егеттәрҙең барыһын да үлтерәләр, ҡоллоҡҡа һатыу өсөн ҡатын-ҡыҙҙарҙы, балаларҙы әсирлеккә алалар. Бигерәк тә Әрмет йылғаһы буйындағы ауылдар ҙур зыян күрә.

2 октябрҙә, 5 мең башҡортто туплап, Аҡай һәм Килмәк уларҙы әлеге Стәрлетамаҡ тирәһендә ҡаршы ала. Яу 4 көн дауам итә. Был ваҡытта ихтилал бөтә Башҡортостан биләмәһенә тарала. Баш күтәреүселәргә ҡаршы Кириловтан башҡа баш ҡаланан ебәрелгән генерал Александр Румянцев етәкселегендәге махсус каратель ғәскәрҙәр сыға.

Башҡорттар "батша миһырбанлығы"на өмөтөн юғалтмаған була әле. 1735 йылдың 30 октябрендә Килмәк һәм Аҡай етәкселегендә Анна Иоановнаға коллектив хат яҙалар. Әммә яуап килмәй. Киреһенсә, Петербургтан Кирилов элекке килешеү мөнәсәбәттәрен бөтөргән һәм крайҙа колониаль сәйәсәтте иглан иткән 1736 йылдың 11 февраленәге указ менән әйләнеп ҡайта.

Мартта хөкүмәт ғәскәрҙәре һөжүм итә башлай. Өфөнән Килмәк отрядын сигендереп, Кирилов Нуғай юлына үтеп инә. Июлдә Табынск ҡәлғәһен төҙөү менән шөғөлләнә. Минзәләнән Румянцев Дим башҡорттарына ҡаршы сыға. Екатеринбургтан Василий Татищев Себер юлына һөжүм итә. Сыбаркүл ҡулене еткәс, башҡорттар Урта йөҙ ҡаҙаҡтары менән аралашмаһын өсөн, ошондай исемле ҡәлғәгә нигеҙ һала. Һөйәнтүҙ ауылы халҡын ҡанһыҙ рәүештә юҡ иткәндән һуң, Тевкелев Үрге Яйыҡ ҡәлғәһенән Яйыҡ буйлап түбәнгә йүнәлә.

1736 йылдың июнендә Килмәк Торатау янында Кириловҡа ҡаршы 8 меңдән ашыу башҡортто йыя. Ошо ваҡыт уға Солтан Морат Дюскеев килә һәм Румянцевта пленда булған Аҡайҙы азат итергә тәҡдим итә. 29 июнидә Үрмәкәй (Урмекеево) ауылында, әлеге Туймазы районы биләмәһендә, яу була. Аҡайҙы азат итә алмайҙар, әммә баш күтәреүселәр 180 һалдатты үлтерәп, күптәрҙе яралап, ҡаршы яҡты ныҡ ҡына ҡаҡшаталар. Тиҙҙән хөкүмәт Башҡорт комиссияһы начальнигын алмаштыра. Румянцев урынына ихтилалдар менән көрәш буйынса махсус органды бригадир Михаил Хрущев етәкләй. Килмәк уның менән бәйләнеш булдырырға, үҙ-ара килешеүгә саҡырырға теләй. Ошо маҡсат менән ул ике тапҡыр хат менән мөрәжәғәт итә. Тик Хрущев Румянцевҡа ҡарағанда ла ҡанһыҙыраҡ булып сыға.

Табынскиҙа булғанда Кирилов тоҙ ҡайнатыусыһы Иван Утятников менән Килмәкте ҡулға алыу буйынса план төҙөй. Балахон сауҙәгәре Килмәктең элекке таныш була. Шуны файҙаланырға ҡарар итәләр. Кирилов Һаҡмар казактар ҡаласынан киткәс, Утятников "знакумы"на, Петербургтан Өфөгә башҡорттар менән һөйләшә башларға кәрәклеге хаҡында хат килгән, тип хәбәр итә. Килмәк Өфө воеводаһы Степан Шемякинға был хаҡта белешергә кеше ебәрә.

Унының килешеүгә указ алыуын раҫлай һәм теймәҫкә ант биреп ышандыра. Туғандары, дуҫтары бармаҫҡа өндәһә лә, Килмәк ҡаты һуғыштан һәм аслыҡтан интеккән халҡы өсөн үҙенең әхлаҡи яуаплылығын тойоп, барырға ҡарар итә. 1737 йылдың 5 февралендә 25 кешенән торған ярандары менән Табынск ҡәлғәһенә килә. Бүләккә бер нисә тиҫтә ат, һыйыр, бер нисә батман бал, тун, аҡса алып бара (РГАДА. Ф.248. Кн.249. Л.908.). 9 февралдә Утятников оҙатыуында һәм үҙенең 7 иптәше менән Өфөгә килә. Шул көндә уҡ Шемякин планлаштырылған операция тураһында белгән Минзәләләге Хрущевҡа хат яҙа. Икенсе көнөнә үк көслө баҫым аҫтында Килмәк Нуғай һәм Себер юлдары юлбашсыларына ҡорал һалырға һәм баш эйеп килергә хат яҙа. 19 февралдә ул Аҡай, Себер юлы юлбашсыларының береһе Йосоп Арыҡов һәм башҡалар ябылған Минзәлә төрмәһенә килтерелә. Һорау алыуҙар башлана. 21 февралдә Хрущев Минзәләнән китә, уның урынын яуызлығы менән айырылған генерал Леонтий Соймонов ала. Килмәк менән Аҡайҙы, башҡаларҙы ла ҡаҙыҡҡа ултыртырға булалар. Әммә башҡа баш күтәреүсе командирҙарҙы өркөтмәҫ өсөн ваҡытлыса язалмай торорға бойороҡ килә. Был сара үҙенекен итә. Бер аҙҙан ошондай уҡ алдаҡ юл менән билдәле юлбашсы Көсәп Солтанғолов ҡулға алына.

3 һәм 17 майҙа Килмәкте көрәштәштәренә яңы саҡырыу ебәрергә мәжбүр итәләр. Шул ваҡытта уға үҙенең ғаиләһенә хат яҙырға рөхсәт бирәләр. Көҙән ул ғаиләһен Һәләүек йылғаһы башынан Ашҡаҙар сыҡҡан урынға ҡышлауға алып килә. Апрелдә уны, Кирилов бойороғо менәндер, бәлки, Һаҡмар казактары баҫып ала. Йөҙ тирәһе кеше һәләк була, шул иҫәптән Килмәктең улы Ҡотлобәк, ике туғандары Маитмәҫ батыр, Исмаҡ батыр, Мораптал һәм башҡа туғандары, ҡатыны Хәлимә, 10 йәшлек улы Ғүмәр һәм килене әсирлеккә алына. Шуны ла билдәләп үтеү мөһим: баш күтәреүселәрҙең береһе Һөйәрғол Сиремшанов та Килмәктең ике туғаны булған. Уның нәҫеле аҙаҡтан Көсәпҡол ауылында йәшәне.

Май айында Соймонов язалауға күсә. 18 июнгә ул 98 кешене язалай. Властың ҡанһыҙлығы менән риза булмай, башҡорттар йыйылып хат яҙа, Килмәкте сығарыуҙарын һорай, ҡаршылашыуҙы туҡтатырға вәғәҙә итә һәм, әгәр сығармаһалар, һуңғы кеше ҡалғансы һуғышыуҙары менән янай (Материалы... Т.VI. С.506.). Хатта ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер ҙә Килмәкте азат итеүҙәрен үтенә (Материалы по истории Башкирской АССР. М.-Л., 1936. Ч.1. С.360). Билдәле булыуынса, ихтилал 1740 йылға тиклем дауам итә.

1739 йылдың ғинуарында Василий Татищев Мәскәү аша Петербургҡа бара, үҙе артынан Килмәк, Аҡай һәм Йосопто алып килергә бойора. Мәғлүм булыуынса, 1740 йылдың яҙында улар иҫән була әле (Материалы... Ч.1. С.418.). Уларҙың әйләнеп ҡайтыуы тураһында бер ниндәй документ та юҡ. Халыҡ азатлығы өсөн көрәшкән был батырҙар язаланып үлтерелгән тип уйларға урын бар.

**Салауат ТАЙМАСОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

---

Альберт Мәхмүтов әйтеүенсә, арҙаҡлы милләттәшебеҙгә уның тыуған яғында һәйкәл ҡуйыу мәсьәләһе күптән күтәрелһә лә, был хәл былтыр, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ярҙамында тормошҡа ашырылған (скульпторы - Ө. Ҡобағошов). Унда Туҡтамыш Ишбулатовтың шәжәрәһен дә күрергә була. Әйткәндәй, был шәжәрә - киң, тәрәндән өйрәнелгән һәм мәғлүмәт сығанағы булып тора. Һәйкәл, анығыраҡ әйткәндә, тап ошо шәжәрәгә таянып яһалған. Альберт Мәхмүтов һуңғы йылдарҙа Башҡортостан һәм Барҙа башҡорттары араһында хеҙмәттәшлек еҫтәре ныҡыныуын, урындағы йәмәғәт ойошмаларының милләттәштәребеҙҙе берләштереү буйынса ҙур эштәр алып барыуын билдәләй. Милли кейемдәрҙе тергеҙеү, Туҡтамыш Ишбулатов һәйкәле янында тағы ла арт-объекттар асыу - ошо иҫәптә.

Альберт Мәхмүтов - әүҙем, рухлы шәхес. Ул Милли кейем парадында ҡатнашҡан һәм Барҙа башҡорттарының милли кейем өлгөләрен тергеҙеү өсөн күп көс һала. "Беҙҙең нимә теләгәнде, нескәлектәрҙе Өфө ҡалаһындағы оҫтаханалар шунда уҡ төшөндө һәм онотола башлаған ғәйнә башҡорттары баш кейемдәре - таҡыяны, келәпәште тергеҙҙек. Көмөштән генә йыйылған келәбәш ҡабатланмаҫ үҙенсәлеге менән һоҡландыра. Боронғо ҡомартҡыны Гөлдәр Шәбиева тергеҙгән. "Ҫаҡал" тип аталған милли биҙәүес тә шулай уҡ уның ҡул эше. Бөгөн бындай биҙәүес өлгөһөн Санкт-Петербургтағы Рәсәй этнография музейында осратырға мөмкин. Башҡорт халҡының милли ҡомартҡыһы XIX быуаттан һаҡланған", - ти Альберт Мәхмүтов.

Ул Ғәйнә башҡорттарының бик боронғо тарихлы, көслө ырыу булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. "Һөйләшебеҙ үҙенсәлекле, ул элек-электән килгән һәм әле лә беҙ ошо һөйләшкә тороп ҡалабыҙ. Өфөгә килһән, "телең татарсаға тартым", тиҙәр, Ҡаҙанда иһә, "татар теле түгел", тип белдерәләр. Был - башҡорт теленең бер һөйләше, ғәйнәләр теле һәм беҙ уның менән ғорурланабыҙ", - ти Альберт Мәхмүтов.

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы сайтынан.**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Күп тә үтмәй, беҙҙең яугирҙар билгән позицияларға дошман танкылары, уларҙың артынан немец һалдаттары һөжүм башлай. Улар яҡынлашыу менән, беҙҙең артиллеристар көслө ут аса, танкылар броняһына тейгән снарядтарҙың шартлауы даланы яңғырата. Өлкән лейтенант Миңлеғол Гәрәевтың батареяһы дошмандың 3 танкыһын, лейтенанттар Мөғин Нагаевтың, Әнүәр Ғазимуллин һәм Шакирьяновтың батареялары тағы ла 9 танкыны ҡыйрата. Шуға ҡарамаҫтан, дошман пехотаһы һөжүме туҡталмай, уларға беҙҙең позицияларға етергә ни барыһы 500 метрлап арауыҡ ҡала. Тап шул мәлдә яҡындағы ағаслыҡ араһынан беҙҙең реактив установкалар залп бирә, дошман рәттәре шартлауҙарға, ут-ялҡынға күмелә.

Давыдовка поселогы эргәһендәге бәрелеш 45 минут дауам итә. Дошман гарнизоны тулыһынса тар-мар ителә. Г. Фондеранцев үҙенең махсус боевой төркөмө яугирҙары менән поселок урамдарына бәреп ингәс, 294-се полктың башҡа яугирҙары дивизия прокуроры Афзал Ғималетдинов етәкселегендә яу ҡырында иҫән ҡалған, әммә шаңҡыған немец һалдаттарын һәм офицерҙарын әсиргә ала. Улар араһында 3 өлкән офицер була. Ошо алышта дошман 950 һалдат һәм офицерын, 12 танкыһын юғалта. 4 төҙөк танк беҙҙең яугирҙар ҡулына эләгә. Немецтар бик күп ҡоралдарынан яҙа: 15 станковый, 32 ҡул пулеметы, 1 меңдән ашыу автомат һәм пистолет трофей итеп алына.

Давыдовка янындағы уңышлы алыштан һуң 294-се атлы полкта комиссар вазифаһын үтәүсе капитан Хәсән Бикчурин партия йыйылышы уҙғара. Тәүҙә йыйылма полк комиссары С.Р. Ҡадиров Ворошиловград йүнәлешендә һәм рейд башында булып үткән алыштарға баһа бирәп, командование ҡуйған боевой бурысты намыҫ менән үтәп сығыу хаҡында һөйләп үтә. Шунан һуң айырым яугирҙарҙы партия сафына алыу мәсьәләһе хәл ителә. Разведчик Әҙһәм Саҙрыевтың ғаризаһы ҡарала. Ул үҙ сығышында дошман тылындағы 3 тимер юл күперен шартлатыуҙа һәм ике тимер юл составын ҡыйратыуҙа ҡатнашыуы, немецтарҙың 19 һалдатын һәм офицерын юҡ итеүе хаҡында һөйләй. Ул үтә ҡатмарлы шарттарҙа Дзержинская станцияһына табан йүнәлгән ике тимер юл составын шартлатҡанда төркөм етәксеһе лейтенант Дилмөхәмәтовтың һәм һалдат Павловтың һәләк булыуҙарын иҫкә ала. Шулай уҡ артиллерист, сержант Ғәбит Әхмәровтың да партия ағзаһы булыр өсөн лайыҡлы булыуы билдәләнә: уның расчеты 5 дошман танкыһын, 8 автомашинаһын, 4 дзотын емертә (Федоровка районы егете һуңынан 313-сө полк составында һуғыша, 1944 йылдың февралендә уға Советтар Союзы Геройы званиеһы бирелә).

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Тик бер көндө ҡатыны уға: "Күпмелер ваҡыт минең пенсияма йәшәп торорбоҙ. Һин үҙеңдекенә, кредит алып, улымдың фатирын түләш әле", - тийәсәк һәм матур йылмайып, ҡарттың сал сәстәрен һыйпаҡлаясаҡ.*



*ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!*

# БЕР ЙӘШЛЕКТӘ, БЕР ҠАРТЛЫҠТА,

## йәки Үткәндәрҙе ҡайтарыу мөмкинме?



**"Мөхәббәт бер генә, килмәй ул гел генә..." тип йырлай инек йәш саҡта. Был йыр популяр булған ваҡыттарҙан инде ярты быуат самаһы үтеп тә киткән. Уны ҡасандыр һағышланып йырлаған кешеләр ҙә инде олоғайҙы. Ниндәй йәштә генә булыуына ҡарамаҫтан, бер кем һәм бер ҡасан битараф булмаған, йырҙарҙа йырланған ана шул мөхәббәт хаҡында фәлсәфәләп алырға ниәтем.**

Инде алтынсы-етенсе тиҫтәһен ҡыуып барамы, әллә әле генә ун етеһен тултырғанмы, һәр кем уны үҙенсә аңлай. Тормош борон-борондан шулай киләлер инде. Ҡасандыр, сәскәләй йәш мәлдәрендә бер-береһен өҙөлөп һөйөп, хатта ҡауышып, бергә-бергә ғүмер итеп, хәҙерге көндә инде байтаҡ йәшкә еткәндәрҙең хистәре хаҡында бер аҙ ғына фекерләп алайыҡ. "Заман башҡа - заң башҡа", тигәндәй, "һөйөү" тип аталған был абстракт төшөнсәгә инде тормош һуҡмаҡтары буйлап оҙон ғына юл үткән кешеләрҙең ҡарашы йәш саҡтағыһынан ныҡ ҡына айырыла, минеңсә. Оло кешеләрҙең күпселеге ошо мәсьәләгә инде башҡасараҡ - өлкәндәрсә баға, тимәксемен. Бындай фекер төрләлөгө уларҙың тәненә хас булған физиологик торош, һәр төрлө гормональ процестарҙың түбәнәйеүе менән генә бәйле түгелдер. Йәше, тормош тәжрибәһе өҫтәлгән һайын кешенең психологияһы, донъяға ҡарашы ла ныҡ ҡына үҙгәрә, етдиләнә бара. Элекке нескә хистәр урынын бихисап көнкүреш проблемалары биләп ала. Урамда китеп барғанда тротуар ситендә берәй йәш парҙың ҡосаҡлашып торғанын күрһәң, уларҙың ҡылығы әллә нисегерәк, хатта әҙәпһеҙлек булып тойола башлай хәҙер... "Үҙеңде бел әле, ҡартлас, һин үҙең дә йәшлегеңдә тап шундай инең бит", тип тағы үҙ-үҙеңде эстән генә тәнҡитләп, йәштәрҙе күрмәмешкә һалышып үтеп китергә генә ҡала. Оло кешеләрҙең ғаиләһендәге үҙ-ара татыу ғына аралашыуҙар ҙа хәҙер фәҡәт балалар, ейән һәм ейәнсәрҙәр хаҡында сөкөрҙәшеүҙән, шунан ҡәнәғәт табыуҙан ғибәрәт. Баштағы "мөхәббәт", "һөйөү" тип аталған төшөнсәләр урынына хәҙер инде "ихтирам итеү" тигән һүҙ урынлыраҡтыр...

Әммә, оло йәшкә етеүенә ҡарамаҫтан, үҙенең тәүге һөйөү хәтирәләрен һис кенә лә онотмай, күңел түрендә һаҡлап, ҡәҙерләп йөрөткәндәр ҙә бар. Әлеге әйткәндәй, "саф мөхәббәт - мәңгелек", тигән инаныуҙа улар һаман. Башлыса, бындай тойғолар йәшлектә осрашып, бер-береһенә ҡарата ҡайнар мөхәббәт хистәре кисерешеп тә, ниндәйҙер сәбәп арҡаһында "яртышар-яртышар" ҡалып, ҡауышыу бәхетенә ирешә алмағандарға хас. Ана шул элекке ғашиҡтарҙың башҡа ғаиләләр төҙөп, хатта бер ҡалала йә күрше ауылдарҙа йәшәп, бер-береһен унда-бында ишетә-күрә генә йөрөгәндәре лә аҙ түгел. "Ҡараштарың ҡағылып-ҡағылып китә, күҙҙәремде йәшерәм һәр ваҡыт... Ағастарҙа алтын, сәстәремдә - көмөш, ваҡыттарҙы булмай туҡтатып..." тип, үҙҙәренең инде алтын көҙө еткәненә бойоғоп, үткәндәрҙе һағынып йырҙар ҙа сығарып йырлайҙар. Йөрәктәре әле булһа йәш, эстәрендәге һөйөү уты һүрелмәгән бына ошо кешеләрҙең бер категорияһына айырыуса иғтибарымды йүнәлтмәксемен.

Тормош һәр саҡ тигеҙ генә бармай. Инде олоғая килә, сир-маҙар килеп тотоп, ҡайһы берәүҙе яҡты донъянан алып та китә... Әлеге әйткәндәй, мөхәббәтле булмаһа ла, әллә күпме тиҫтә йылдар парлы йәшәргә күнеккән, һәүетемсә олпат йәштәге кеше "һыңар" ғына булып тороп ҡала. Ир кешеме ул, әллә ҡатынмы... Хәләл ефетен юғалтыу ҡайғыһы онотола башлау менән уның алдына "яңғыҙлыҡ" тигән проблема килеп баҫа. Әле үҙен яҡшы ғына тойған, йәшәү дәрте һүнмәгән шундай тол ҡатынға: "Яңғыҙың бер өйҙөң дүрт мөйөшөнә ҡарап ултырма. Ана, Фәлән ауылдағы "егетең" хәҙер буйҙаҡ бит. Әллә ни бирешкәндәй ҙә түгел, донъяһы ла төҙөк, пенсияһын да арыу ала тиҙәр, балалары ла башҡа сығып китеп бөткән. Риза булһаң, хәҙер үк үҙем барып һөйләшәм, һиңә яусы ебәрһен..." - тип, уның күңел ебен зымбырҙатып ебәреүселәр ҙә табыла. Йә булмаһа, ир кешегә: "Йәш сағында үҙең яратып йөрөгән Фәләнбикәңдең бабайы үлеп ҡалғаны хаҡында ишеткәнһеңдер, моғайын. Нишләп бер үҙең генә йәшәп ятаһың былайтып? Шул "элеккеңә" тәҡдим яһаһаң ни була? Ана, ҡалай йонсоп киткәнһең. Тамағың да ҡәҙерле булыр ине. Ул да һине ярата ине лә баһа..." тигән һымағыраҡ кәңәш биреүҙәре лә тәбиғи. Унһыҙ ҙа инде ошо хаҡта уйлана башлаған был ирҙең (йә ҡатындың) "зәңгәр томандар артында" ҡалған әлеге тәүге һөйөү хистәре ҡабаттан яңырып, нәк тә элеккесә уны "яндыра" ла башлауы ихтимал... Бәғзеләре, бер нәмәгә лә ҡарамаҫтан, ҙур өмөт бағлап, йәшлек мөхәббәтенә мөрәжәғәт тә итә. Ғәҙәттә, ир кешенең инициативаһы менән, берәй уңайын табып, осрашып, үткәндәрҙе иҫләй-иҫләй, аулаҡта сәй эсеп тә алалар. "Һин дә яңғыҙ ҡалдың, мин дә, тигәндәй, әйҙә, бергәләп тормош ҡорайыҡ", - тип, ир кеше әлеге "егетлеген" итеп, тәҡдим дә яһай. "Һинең хаҡта мин ғүмер буйы уйланып йәшәнем", - тип өҫтәп тә ебәрә. Яңғыҙ йәшәргә күнекмәгән, өҫтәүенә, үҙенең дә йөрәге ҡабаттан "ҡымырйып" барған ҡатын-ҡыҙҙың: "Әллә инде, балалар быға нисек ҡарар бит әле..." - тигән булып, бер аҙ ғына ыңһарлауы ла тәбиғи. Етди ирҙең: "Балаларҙың ни - үҙ тормошо. Бер-беребеҙгә терәк булып йәшәрбеҙ әле..." - тип, тағы ниндәйҙер матур һүҙҙәр әйтеүе гүзәл заттың күңелен бөтөнләйгә иретеп ебәрә...

Оҙаҡламай улар береһенең өйөндә бергә тора ла башланылар, ти. Эйе, был - ысынлап та "һөйөү уты менән йылытылған" яңы тормош! Хәҙер был парға артабан бәхет диңгеҙендә генә йөҙөргә лә йөҙөргә... Инде мөхәббәтле ғаилә ҡорған, ҡасандыр үрелеп тә буйы етмәгән хыял йондоҙон ҡулына алған бына ошо парҙың һәр һыңары күҙлегенән сығып, уларҙың уртаҡ донъяһына бағырға тырышып ҡарайыҡ. Ир йортона ингән ҡатындың артабанғы йәшәйеше хаҡында башта бер аҙ сурытып алыу кәрәктер. "Тәүге никах кисе"нән башлайыҡ. Бына шул яуаплы мәлдә кемеһененеңдер "ҡартайыңҡырап" киткәне беленеүе лә мөмкин, әлбиттә. Ярай, бер аҙ "уңышһыҙ" үткән бындай төнгә, әйтәйек, ҡул ғына һелтәнеләр икән, ти. Тәүге бабайы мәрхүм менән дә инде нисәмә йыл айырым мендәрҙә йоҡлап йөрөгән ҡатын был хәл менән тиҙ генә ризалашты ла, ти. "Йомшаҡ характер"лы ир менән дә бынамын тигән итеп йәшәргә була ла баһа. Тик әлеге "бөйөк" хистәр генә һүрелмәһен. Өйҙәге ваҡ-төйәк эштәрҙе эшләп, ҡыбырлап йөрөһә лә, йәш саҡтарҙы иҫләй-иҫләй, янында бергә сәй эсешеп ултырһа ла, яҡшы бит. Унда-бында алып йөрөргә "Жигули"һы ла бар. Әммә...

Эш мендәрҙә генә йә сәй эсеүҙә, йә иһә машинала ғына торһа икән дә ул! Бәғзе бер яҡындарының "Олоғайған көнөндә үҙеңде генә ҡарап ултырһаң ни була, айырым торһалар ҙа, балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең бар..." тигән һымағырыҡ иҫкәртеүенә лә ҡарамай, "Мин уны яратам бит", тип әлеге иргә сыҡҡан ҡатын оҙаҡламай, ысынлап та, үкенә башлауы ла ихтимал. Ни өсөн? Сөнки был бабайҙың үҙенең балалары араһында, әйтәйек, "әпсәһенә оҡшаған усал" ҡыҙы бар. Әйтәйек, күрше ауылда йәшәгән был ҡыҙы хәл белешергә килә. Атаһы янында өлтөрәп йөрөгән сит ҡатынға күҙ ҡырыйы менән генә ҡарап, һөйләшер-һөйләшмәҫ булып, тырт-мырт итеп, ул йыуған һауыт-һабаларын ҡабаттан йыуып, "был апай"ҙың тамам кәйефен төшөрә. Атаһын, мәрхүм әсәһенән ҡалған йорт-ҡаралтыһын ҡыҙғанауы ла ҡыҙының тын алышынан һиҙелә. "Киләһе аҙнала тағы килермен, атай, һау бул", тип, был ҡатын менән хушлашмайынса ла ҡайтып китә. Өҫтәүенә, ирҙең даими эше булмаған, йыш ҡына "төшөрөргә" яратҡан бер улы ай һайын, атаһы пенсия алған көндә килеп, "бахмурға" аҡса һорап ҡаңғыртҡылауы хаҡында был ауылдағы бер таныш ҡатын сер генә итеп иҫкәрткәнен иҫенә төшөрә ҡатын. Бына шулай. "Әллә инде, артабан бергә йәшәп булырмы-юҡмы", тигән уйҙар ҡатын кешене көндән-көн йышыраҡ борсой башлауы ла мөмкин...

Тағы бер шундай ғаилә вариантын алып ҡарайыҡ. Йәш сағында йәндәй күреп, күтәреп кенә алып йөрөгән зифа буйлы һылыуҙы, олоғайғас ҡына ҡатын итеп алған ирҙең хәле хатта күпкә мөшкөлөрәк тә булыуы мөмкин. Тик уны күтәрә алмауҙа түгел эш... Ҡартыбыҙҙың ошондайыраҡ хәлгә тарыу ихтималлығын күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Әйтәйек, элеккегә ҡарағанда тулыраҡ, ә йөҙгә мөләйемерәк тә булып тойолған был ҡатыны баштан уҡ уның күңеленә ятты икән, ти. Яғымлы ҡатын уның пенсияһына өр-яңы костюм да һатып алып бирҙе, баҙарҙан алған яңы бүрек тә ҡарттың күңеленә хуш килде. "Мин һине элеккеләй йәш, матур итеп күргем килә", тип әйтеүҙәре үҙе ни тора! Инде ун биш-егерме йылдай хәмер тигән нәмәне ауыҙына ла алмаған ҡартына "аппетит өсөн" тип "илле грамм" да һалып бирергә иткәйне, әммә ир әҙәпле генә итеп унан баш тартты. Ирҙең иҫерткес эсемлекте эсмәүен ҡатын да бик оҡшатты, буғай. Хатта бер яҫтыҡта ла йоҡлайҙар... Ә уны элекке ире менән сағыштырып, нисегерәк итеп маҡтағанын ишеткәс, әллә ниндәй "туң" ерҙәрең дә иреп китер. Бына ҡайҙа ул - бәхет! Тик бер көндө ҡатыны уға: "Күпмелер ваҡыт минең пенсияма йәшәп торорбоҙ. Һин үҙеңдекенә, кредит алып, улымдың фатирын түләш әле", - тийәсәк һәм матур йылмайып, ҡарттың сал сәстәрен һыйпаҡлаясаҡ. Ҡатындың үткән йыл ғына өйләнгән кинйәһе ипотека бурысына төшөп, шунан сыға алмай аҙаплана икән... Бабай шунда уҡ былтыр үҙенең улы ла уға тап ана шундай һорау менән мөрәжәғәт иткәнен иҫләй. "Шәриғәттә процентҡа аҡса алыу, биреү ҙә ҡәтғи тыйылған. Гонаһынан ҡурҡам", тигәс, улы башҡаса көсләшеп тормай. Ә был һөйөклөһөнә ни тип яуап бирергә? "Балалар менән кәңәшләшеп ҡарарға кәрәк..." тигән булыр. Ҡарттың шыбыр тиргә батып, артабан ни әйтергә белмәй ултырғанын күргән "йәнкиҫәген" бер нисә секунд эсендә, гүйә, бөтөнләйгә алыштырып ҡуялар: "Ҡайҙа һинең элекке егетлегең? Мин, бер ҡатлылығым менән, олоғайған көнөмдә туғандарым, таныштарым алдында оятҡа ҡала-ҡала һиңә ышанып, кейәүгә сығырға ризалығымды бирҙем. Ә һин ниндәйҙер бер ваҡ ҡына мәсьәләне лә балаларыңдан тыш хәл итә алмайһың икән!" - тип, иң нескә урындарға тейә-тейә "һөжүм"гә күсер. Көн дә ошо хаҡта мыжып, ана шуға бәйле, артабан бергә тороу-тормау мәсьәләһен "ҡабырғаһы менән" ҡуя башлар ҡатыны. "Ундай нәмәне дин ҡәтғи тыя ла баһа", тигән һүҙҙәрҙе хатта ҡолағына ла элмәҫ. "Ҡайһы арала шулай изге булып киттең әле", тип кенә ебәрер... "Ярай әле, был ҡатын үҙенең кемлеген алдараҡ белгертте. Бындай ҡатын менән артабан ғүмер ҡыҫҡартаһым юҡ..." тигән уй башына килеп, элекке "һөйөү усағы"ның бер бөртөк осҡон ишараты ла ҡалмағанлығына тамам инанған бабай артабан тороу-тормау мәсьәләһен үҙ файҙаһына хәл итте, ти. Башында аҡылы булған ирҙең, тап бына ошолай итеп фекерләп, ваҡытында "ҡотолоп" китеүе лә мөмкин.

Бабайыбыҙ бер аҙ "асығауыҙ" булды икән, тип ҡарайыҡ: Аллаһ һаҡлаһын! Әллә күпме сумма кредит алып, башҡа ауыл, ҡалаларҙа йәшәгән үҙенең балалары ошо хаҡта хәбәрҙар була ҡалһа, ана шул ғәзиздәренә ниндәй күҙ менән ҡарар ине?.. Ә инде шундай парҙың бер һыңары кинәт кенә был донъянан китеп барған хәлдә... Һуңынан бындайҙарҙың балалары араһында тыуған бүлеш, ыҙғыш-тартыш, судлашыуҙар аҙмы ни?

✓ *Йылҡыға бәйле кәсептәр ҡабаттан ҡул араһына инде. Ир-егет тай өйрәтә ала, йылҡы үрсетеп хужалыҡ итә. Быны яҡшы төшөнгән кешеләр әйтеүенсә, атҡа хужа булыу ул машиналы булыуҙан ныҡ айырыла икән.*



"Йәшләй һөйгән йәрҙәрҙең" әле һанап киткәндән дә хәтәрерәк проблемаларға барып юлығыу ихтималлығы ла бар бит.

Һуң ғына тормош ҡорған быйна шундай бәғзе берәүҙәрҙең татыу-татлы ғына йәшәп китеүҙәренә бихисап кәртәләр булыуына, шулай ҙа, кемеһе гәйепле? Ирме, әллә ҡатынмы? Ә бит, тәрәнерәк уйлап ҡараһаң, икеһе лә хаҡлы уларҙың. Береһе лә насар кешеләрҙән түгел. Тик кемдер һәм ҡасандыр уйлап сығарған "мәңгелек һөйөү" тип аталған нәмәгә үҙен-үҙе ышандырырға тырышып, ғүмер буйы көнөлдәрендә һаҡлап йөрөткән улар был төшөнсәне. Үҙҙәренең башҡа тормошо, ғаиләләре булыуына ла ҡарамаҫтан. Бөгөнгө көн улар бер-береһе өсөн бөтөнләйгә ят. Һәр береһенең үҙ балалары - ғәзиздәре... Урыҫтар әйтмешләй, һәр кемдең күлдәге үҙ тәненә яҡын. Ошо хәҡиҡәтте бик һуң ғына аңлайҙыр бәғзе әҙәм балаһы. Ярай әле, аңларлыҡ хәлдә булһа... "Яңылышты төҙәтеп, яҙмышты үҙгәртеп йәшәһәң, йәшлек кире ҡайтыр кеүек" тип, олоғайғансы үҙ хистәренә алданып ғүмер итеүсе яҡташтарым өсөн булды был әйтер һүҙем.

Мөхәббәтте бөтөнләйгә инҡар итергә маташа икән был ағай, тип тә уйлай башлағандыр бәғзеләр. Юҡ, әлбиттә! Ялҡынлы, ҡайнар, саф мөхәббәт тигән терминдарҙы үҙҙәренең шаулап-гөрләп килгән йәшлек яҙында дәрттәре ташып торған алтындай йәштәребеҙ, әйҙә, ҡулланһын! Ана шундай тылсымлы һүҙҙәр аша йәш хәләл ефеттәр бер-береһенә хистәрен аңлатышһын, танһыҡтары ҡанғансы!.. Әммә оло кеше үҙенең хәлен, урынын белергә тейеш. Икеүең дә иҫән сакта, ян-яғыңды ҡымтып, "боронғо" хистәреңде бер ергә ныҡыраҡ йәшереп, хатта кәрәккән-кәрәкмәгәнгә лә бер-береңде хуплаштырып, "майлаштырып", дөйөм балаларыңды ғына хәстәрләп, шуларың өсөн шатланып, ғүмер аҙағына тиклем барып етеү хәйерлерәктер. Етди сирләп, үлем түшәгендә ятҡан хәлдә лә, әллә күпме тиҫтәләгән йыл бергә ғүмер иткән хәләл ефеттәндән, үҙеңдең ғәзиз балаларыңдан артығыраҡ һине бер кем дә ҡарай алмаясаҡ. Әгәр берәйең яңғыҙ тороп ҡалды икән, инде үҙҙәре лә олоғайып килгән улдарың, ҡыҙҙарың, үсеп килгән ейән-ейәнсәрҙәрең хаҡында иң беренсе нәүбәттә фекерләү кәрәк. Ныҡ ҡартайған мәлеңдә ана шул ғәзиздәреңдән дә яҡыныраҡ бер кемде лә таба алмаҫһың. Ҡабаттан ғаилә ҡорорға йөрьәт иткәндәр айырыуса һаҡ, иғтибарлы булырға тейеш, тимәксемен. "Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ", тигән бит боронғолар.

**"Һуңлап", әммә һәр яҡтан ентекле уйлап ҡоролған бәхетле ғаиләләр ҙә бар, әлбиттә. Бөгөнгө һүҙем улар хаҡында түгел. Мөхәббәтте данламаған, өҫтәүенә, уны мәңгеләштереү яғында ла булмаған фекерҙәрем менән ризалашмаусыларҙың күп булыуына шигем юҡ. Ә һеҙ, шулай ҙа, ошо мәсьәләгә нисек ҡарайһығыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар?**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*

# АТЫ БАРҘЫҢ ҠАНАТЫ БАР



**Донъяла ҡайһы бер тереклек заты әҙәмгә хеҙмәт итеү һәм уның сикһеҙ һөйөүен татып йәшәү өсөн генә яратылған кеүек. Шуларҙың иң беренсеһе, моғайын, йылҡы малылыр. Бигерәк тә төрки халыҡтарҙа, һәм шул иҫәптән башҡорттарҙа, был мал кеше йәшәйешендәге мөһим бер символик образ кимәленә тиклем үҫешкән.**

Ат яратып, йылҡы малына мөкиббән китеп үҫеү беҙҙең ир балаларға ҡан аша күсеп бирелә торған бер код һымаҡ. Һикһәненсе йылдарҙа хужалыҡтарҙа ат булманы тигәндәй, әммә колхоз-совхоздар ярайһы ҙур ғына өйөрҙәр тотто. Һәм ауыл малайҙары ана шул өйөр тирәһендә турғай көтөүе шикелле йыйылырға яратты. Мәктәптән сығып тура киткәләр ине "канюшныйға". Атайым йылҡы ҡараны һәм был атҡа ғашиҡ малайҙар уның тирәһендә нисек ярарға белмәй йүгерләнә. Аттарға һоло һалыу, һыулауға алып барыу, таҙалау, егеү, туғарыу кеүек эштәрҙә һәр береһе үҙен күрһәтергә тырыша, талашып һуғышып китәләр, ти торғайны атайым. Ҡулынан килгәнерәк малайҙар уға ярҙамлаша, ә бәләкәсерәктәре ялан кәртәләрҙең баштарында ҡарлуғас балаларылай теҙелешеп ултырып, сәғәттәр буйына аттарҙы күҙәтә, һәр береһенә исемдәр биреп, холоҡ-фиғелдәрен өйрәнеп, ҡайһы саҡ тик күҙ талдырып һоҡланып ҡына ултыралар. Бына шундай йөрәктәрендә йылҡыға булған сикһеҙ һөйөү һәм башкөллө ғашиҡлыҡ йөрөткән малайҙар быуыны ине минең замандаштарым.

Унан инде егеттәрҙең йылҡы өйрәткәнен, уларҙы сабыштарға әҙерләгәнен дә, йәш бейәләрҙе тәүге һауынға индергәндәрен дә, өйөрҙә баҫып алыуға айҡашҡан айғырҙар алышын да, ҡолоно артынан ташҡынға һикереп һәләк булған бейәне лә, янып үлгән атты ла күрергә насип булды. Был тәбиғи ине. Сөнки йылҡы малы ауыл халҡының айырым хис тулҡынында йәшәгән изге йән эйәһе булды һәм әле лә шулай. Сағыштырмаға алғанда, ниндәй генә файҙалы булһа ла, һыйырға хөрмәт бар, ә ундай төпһөҙ һәм абсолют мөхәббәт юҡ бит.

Башҡорт халҡында атҡа арналған йырҙар ғына ла йөҙҙән ашыуҙыр. Был үҙе үк аттың мөһимлеген күрһәтә. Ә инде уларҙың төҫтәре үҙе бер фәлсәфә. Туры, ҡара-туры, ҡара ат, ҡола, аҡ ҡола, һары ат, ерән, күрән, күк ат, саптар, сысҡанһыրт ала ат, сыбар, бурыл. Уйлап ҡараһаң, был аталған төҫтәргә тура ғына килгән аттар донъяла юҡ та һымаҡ. Мәҫәлән, һары бейә, ҡыҙыл юрға, күк ат тигән һымаҡтары. Был халыҡтың ниндәйҙер бик эстәлекле мәғәнә төшөнсәләренә нигеҙләнгән айырымлыҡтарылыр, күрәһең. Һәм, үкенескә ҡаршы, бөгөн ана шул билдәләмәләр ҙә юғалыу сигендә. Бөгөн беҙ күҙебеҙ күргән төҫтәрҙе генә атай алабыҙ бит. Шуға ла аттарҙың да атамалары хәҙер Малай, Казбек, Буран һымаҡ яһалма ҡушаматтарға әйләнеп бөткән. Борон йылҡыға тик төҫө буйынса ғына исем биргәндәр. Күрән икән уның исеме лә шулай Күрән айғыр, Күрән бейә, аҡтың ҡуйыраҡ төҫөндә икән - Күкбуҙ, Күк юртаҡ, салт аҡтары Аҡбуҙ, Аҡъял, Аҡанай һәм башҡалар. Аттарҙың төҫөнә ҡарап, уларға ҡылыҡһырлама ла бирелгән. Бына уларҙың бөгөнгө телдә һаҡланып ҡалған бер нисәһе:

Туры - туры турһыҡ тотмаҫ, туҫтаҡҡа төшөр, йәғни ҡыҙыу, турһығың да эйәрҙән өҙөләп төшөп ҡалыр.

Ҡара - ҡараға ҡот бир, китәсәк тә китәсәк.

Ерән - ерәнгә ер әҙ, сап та сап...

Һары - һарыла барһаң, һарһылтып бар. Бик ҡыҙыу түгел, йырлап барырлыҡ.

Ҡола - ҡола ҡолатмаҫ, тимәк, ҡабаланмаҫ, һөрөнмәҫ, юҡ-барға өркмәҫ.

Күк - күкте үп, ярат, тимәк, наҙлы, иркә.

Бурыл - бурылды бүре алмаҫ. Йылғыр, һиҙгер мәғәнәһендә.

Саптар - саптар бар, тимәк, ат бар.

Күрән - күрән барҙа күрәк кәрәкмәҫ. Йәғни күберәк эш аты. Ер эшкәртеүгә ҡулай.

Башҡорт аттарын монгол урҙалары менән килеп ҡалған тоҡом аттары, йәки ҡышҡы һыуыҡтарға ла бирешмәгән, йөнтәҫ, сыҙамлы Себер аты менән көньяҡтан килгән, күберәк һыбай йөрөү өсөн ҡулайлашҡан ҡыпсаҡ, ғәрәп аттары менән аралашыуҙан килеп сыҡҡан мал тип фәлсәфә һатыусылар ҙа бар. Әммә башҡорт атының килеп сығыуы әллә ҡасанғы үткән быуаттарға, тарих төпкөлөнә барып тоташа. Әгәр хатта уның беренсе ата-бабаһы Аҡбуҙатҡа эйәреп Йылҡысыҡҡан күленән сыҡҡан тигәненә генә иғтибар иткәндә лә, эпостың йөшенә ҡарап ҡына ла, был малдың башҡортта әле милләт, халыҡ булып аталғанға тиклем үк булғанлығын аңлауы ла, ҡабул итеүе лә ҡыйын түгел.

Крайҙы өйрәнеүсе Зәкирйән Әминев башҡорт аттары тураһында бына нимә тип яҙа: "Ғалим Рәшит Шәкүрҙең яҙыуына ҡарағанда, һуңғы тарпанды уҙған быуаттың 20-се йылдарында хәҙерге Бөрйән районы ерҙәрендә күреүселәр булған. Башҡорт аты үҙе формалашҡан ергә ныҡ береккән мал. Ҡырыҫ Урал тәбиғәтенә яраҡлаштырып формалаштырылған мал булараҡ, башҡорт аты бик сыҙамлы, көслө тоҡом. Билдәле булыуынса, Уралдың ҡалын ҡарлы, көслө буранлы, сатлама һыуыҡлы (ҡайһы бер йылдарҙа 42-52 градусҡа еткән), етешәр айға һуҙылған оҙон ҡыштары һәм төрлөсә килгән, йә эҫе, ямғырһыҙ, ҡоро, йәиһә, киреһенсә, һалҡын, ямғырлы йәйҙәре - былар бөтәһе лә башҡорт атын формалаштырыуҙа ҙур роль уйнаған. Башҡорт аты йыл буйы тибендә йөрөп, оҙон ҡыштарын ҡаты тояҡтары менән ҡалын ҡар аҫтынан да үҙенә ризыҡ таба алырлыҡ мал. Ҡышҡа ҡарай был аттар әҙерәк бөҙрәләнеп торған оҙон йөн менән ҡаплана. Белгестәр яҙыуынса, бөҙрәләнеп торған оҙон йөн башҡорт атының иң төп билдәләренең береһе".

Быуаттар буйына ошо ерлектә йәшәп түгел, ә ошо ерлектә барлыҡҡа килеп һәм ошо климат, йәшәү шарттарында формалашҡан йылҡы аҫаба халыҡтың беренсе ярҙамсыһына әүерелгән. Бында уның һыбай йөрөүгә талымһыҙ, сыҙамлы, йөк ташығанда ғәйрәтле булыу сифаттары ла күҙ уңында тотолған. Ошо юғары талаптарға яуап биргән йылҡы, тәбиғи һайлап алыу һөҙөмтәһендә йәшәүен һәм үрсеүен дауам итеп, Урал алды һәм Урал арьяғы райондарында ғына түгел, Пермь, Силәбе, Ырымбур, Свердлов һ. б. өлкәләрҙә киң таралған таҙа тоҡомло башҡорт атын барлыҡҡа килтергән.

Бөгөн башҡорт атын үҙләштереп ятҡандар ҙа бар. Был мәсьәлә йәш тайҙарҙы, ҡолондарҙы күпләп һатып алып ситтә үрсетеү нигеҙендә килеп сығалыр. Улай еңел генә башҡа ерлек тоҡом малдарын үҙеңдеке итеп булһа, әллә ҡайҙағы ғәрәп дел-дөлдәрен дә, төркмән юрғаларын да, Себер йөк аттарын да алып ҡайтып ҡына үрсетеп, "бына беҙҙеке" тип күрһәтергә булыр ине. Әгәр ул тоҡомдар шул ерле халыҡтарҙың быуат-быуатлыҡ тарихтарына, ауыҙ-тел ижадына һәм аңына һеңмәгән булһа. Әгәр ул малдар шул ерлектәрҙә бар булып-формалашып, шул климаттар өсөн генә яраҡлашмаһа. Икенсе урындарҙа улар тәү булмышын, тоҡом сифаттарын, холоҡ-фиғелен юғалтыр булмаһа. Шунлыҡтан, кемдәрҙеңдер тоҡомло малына ҡул һуҙыу ул яһиллыҡ ҡына түгел, ә наҙанлыҡтыр ҙа.

Һуңғы йылдарҙа йылҡы малына иғтибар арта. Ауылдарҙа хәҙер ҙур булмаған өйөрҙәр тотоусылар ҙа, хатта тотош көтөү итеп аҫырауселар ҙа бар. Ҡымыҙсылыҡ, йылҡы итенән азыҡ-түлек етештереү ҙә киң тарала бара. Колхоздар осоронда ҡымыҙ йорттарынан ирекле рәүештә ҡымыҙ алып эсеп булмаһа, хәҙер һәр хужалыҡ үҙе йылҡы тота алғанлыҡтан, ҡымыҙҙы ла һәр кем етештереп сығара ала. Миҙгел осоронда ҡымыҙҙың һәр төрләһен алып тәмләргә лә, хатта һайлап ҡына эсергә лә була.

Йылҡы тотоуға ирек килеүе халыҡта күптән юғалып бөткән атҡа бәйле кисерештәрҙе, ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы тергеҙә килә. Шул уҡ ҡымыҙ һауыу ҙа бөгөн күҙ алдында, ҡатын-ҡыҙҙар ҡымыҙ шөғөлдәрен янынан өйрәнеп алды. Малайҙар ат янында үҫеү, ҡолонсаҡлы булыу бәхетенә ирешә. Йылҡыға бәйле кәсептәр ҡабаттан ҡул араһына инде. Ир-егет тай өйрәтә ала, йылҡы үрсетеп хужалыҡ итә. Быны яҡшы төшөнгән кешеләр әйтеүенсә, атҡа хужа булыу ул машиналы булыуҙан ныҡ айырыла икән. "Атлы булыу ул ҡанатлы булыу" тигәндең ысын мәғәнәһен тояһың, тиҙәр. Быны атлылар яҡшы аңлайҙыр, моғайын. Асылда, былар буш һүҙҙәр түгел. Башҡорттоң йылҡы малына, атҡа ни тиклем бәйле булыуы уның үҙе лә төшөнөп етә алмаған иң ҡатламдарына йәшеренгәндер ул. Һәм әлеге көн аттарҙың күбәйеүе, үрсеүе ул халыҡтың рухи күтәрелешенең бер күрһәткесе лә, йәки өйөрҙәрҙең ҙурая барыуы уларҙың һыбайлыларын да ҡанатлы итәләр.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

***✓ Ҡулдарын шаҡарып тотоп килгән сержант аяғын ишеккә арҡыры ҡуйҙы ла Ишмырҙаның елкәһенә төртөп ебәрҙе: "Иди в Башкортостан!" Шундай көс менән төрттө, егет йөҙө менән бетон иҙәнде һөрөп барып ятты.***




Уларҙы милиция бүлегенә алып ингәс, нык ҡына итеп туҡманылар. Кеше туҡмау үҙе һөнәр, рәтен белеп бирҙеләр. Әллә ни арала аяҡ-ҡулдарын бәйләнеләр ҙә типкеләргә тотондолар. "Бауырын төй, бауырын!" - тип бер-береһенә миҙәт бирҙеләр. Шулай төйгөсләгәндә: "Бүтәнсә милицияға ҡул күтәрмәҫһеңме? Ғүмерлеккә иҫеңдә ҡалдыр, ҡәбәхәт!" - тип ләззәтләнделәр.

Туҡмалыусылар, таҙа кәүҙәле, көслө егеттәр, бирешмәй маташтылар, погонлыларҙың бер-икеһенә нык ҡына эләктереп тә өлгөрҙөләр. Әммә тегеләр күмәк һәм оҫталар, бүрене йыҡҡан эттәр шикелле ҡыланалар. Туҡмалыусылар ҙа, туҡмаусылар ҙа йәш яғынан бер самала, шуға ла милиционерҙарға тегеләрҙе бәргесләү айырата ләззәт ине. Тимәк, мин һинән көслөрәк, мин һине еңәм!

Тотҡондарҙың көс-ғәйрәте ташып тора ла бит, аяҡ-ҡул бәйләүле, ҡаршылашыр әмәл юҡ. Алға бөгөлә биреп алғандар ҙа, тик ултыралар. Үҙҙәре, ике ауылдан килгән әҙәмдәрҙәй, икеһе ике ҡиәфәттә: береһе һап-һары сәсле, сағыу зәһәр күҙле, икенсеһе тау ситенән табылған таштан юнып яһалғандай, ҡара һоро төҫтә һәм шул таш шикелле үк дәү кәүҙәле.

Һары сәслеһенең күлдәге йыртылып киткән дә аҡ тәне йылтырап тора. Тәне шундай таҙа, ниҙәндер бешекләп яһалған, тип торорһоң. Погонлылар ауыр итектәре менән типкәндә йәш тән, нык тултырылған резина туп һымаҡ, йәмшәймәй ҙә, аяҡтар ғына ҡаҡлығып китә төҫлө. Шуға ауыртмайҙыр ҙа инде. Ауыртыуын ауырталыр, әлбиттә, тере тән бит, тик туҡмалыусы һиҙҙермәй, ауыҙың тулы ҡан булһа ла, дошманың алдында төкөрмә, типтер, ыңғырашмай ҙа, ялбармай ҙа, өҙләкһеҙ һүгенә генә. Һүгенеүен оҫта һүгенә, нигеҙҙә, русса һүгенә, ара-тирә татарса ла ысҡындыра. Сығыу менән туҡмаусыларҙан үс аласағын, ҡон ҡайтарасағын әйтә. Ә тегеләр уның һайын нығыраҡ бирә: "Ты еще ума не набрал? Вот тогда!"

Икенсеһе, ҡара, яҫы битлеһе, тынысыраҡ, күҙгә эләктереп ҡуймаһындар типтер инде, башын нык эйгән дә тештәрен генә шығырлата. Түҙергә тырыша. Күрәһең, көрәш, һуғыш спорты менән шөғөлләнгән кеше: тәне тик тарамыштан ғына. Тегеләр типкәндә йөҙө сирылып китә, әммә тауыш сығармай, тик ҡара күҙҙәренән ап-аҡ осҡондар сәсрәй.

Тотҡондар әлегә ауыртыныуҙы һиҙмәй шикелле: берҙән, икеһе лә арыу ғына төшөргән, икенсенән, нык ярһыуҙан тәндәренең иҫе бөткән. Әлегә генә шулай, хәтәре аҙаҡ булыр. Хәйер, тотҡондарҙа алдағының ҡайғыһы юҡ, тиҙерәк бер-бер ҡарарға килһендәр, былай яфаламаһындар ине. Ни эшләтеп ҡуйырҙар: бер төн ҡундырырҙар ҙа сығарып ебәрерҙәрме, әллә ун биш көнгә ябырҙармы? Улайтһалар - харап бит, тота ла хәбәр итәләр инде эшеңә лә, өйөңә лә.

Ярар, эште артыҡ ҙурға ебәрмәҫтәр әле. Урлашмағандар, кеше таламағандар, үҙҙәре килеп бәйләнгәс, ҡаршылаштылар инде. Ошо кәүҙәләре менән шул салагаларҙан туҡмалып торһондармы!

Әммә тегеләр эште йәһәт кенә хәл итергә ашыҡманы, башта күңелдәре булғансы туҡманылар, шунан исем-фамилияларын, ҡайҙан икәнен генә яҙҙылар ҙа икеһен ике камераға илтеп яптылар. Хатта һорау-фәлән алып та торманылар. Следователгә саҡыртһалар, үҙҙәрен нисек туҡмауҙары тураһында һөйләй алырҙар ине.

Күпме үткәндер, ниһайәт, икеһен дә бер бүлмәгә килтерҙеләр. Капитан погонындағы следователь бите-башы күгәренгән, кейемдәре йыртҡыланған, яраларынан ҡан һарҡырап торған был байғоштарға, көтөүенән имен ҡайтҡан малын ҡаршылаған хужа шикелле, иҫе китмәй генә ҡараны ла: "Капитан Голубь", - тип үҙе менән таныштырҙы. Шунан, ултырығыҙ тигәнде аңлатып, ике яҡ стена буйындағы ике ултырғысҡа күрһәтте. Папкаһынан, асып, ҡағыҙҙар алды, ручкаһын сығарҙы, бер ниндәй асыуһыҙ-ниһеҙ һары сәскә ҡараны:

- Исемең, фамилияң, эш урының?

- Бер тапҡыр яҙҙылар бит инде! - Егеттең кәйеф шәп түгел, араҡы шауҡымы үтеп маташа, ауыҙ кипкән, тән һыҙлай.

Следователь тыныс, әммә баяғынан ҡатыраҡ итеп:

- Исемең, фамилияң, эшең, торған урының? - тип ҡабатланы. Тауышынан, әйткәнде үтә, юғиһә, насар булыр, тигән ым аңлашылып тора.

- Ну, Кальметов Мәснәүи, ти! Өфөнөкө, заводчанин...

Капитан үҙ ғүмерендә бындай әҙәмдәрҙе күп күргән, күп һорау алған, шуға ла, барыбер сиселерһең, сисербеҙ, тигән шикелле, үҙен тыныс, ышанысЛы тота. Һорашты-һорашты, яҙҙы-яҙҙы ла, күҙҙәрен был икәүҙән алмайынса ултырған ҡара сәсле егеткә ҡараны.

- Ә һин? - Капитан уға тупаҫыраҡ өндәште, сөнки быныһының кейеме, һын-ҡиәфәте, хатта күҙ ҡарашынан уҡ ситтән - ауыл тирәһенән килгәнлеге күренеп тора ине. Ә тотҡон, капитан хәҙер үҙҙәрен йоҙроҡ төйөп әрләй башлар тип шөрләп ултырған кеше, офицерҙың һин дә мин генә һорашыуын күргәс, бер аҙ иркенәйҙе:

- Мин - Буранбаев Ишмырҙа булам, Баймаҡ районыныҡы. Баяғы, шул колхозда витаминный мука әҙерләйем... - тине. "Баймаҡ районынан" тигән һүҙҙе ул бер дәрәжә менән әйтте. Яҡын-тирәлә, хатта Өфөлә генә лә түгел, ә бөтә донъяла Баймаҡтың да, баймаҡтарҙың да алданыраҡ йөрөгәнен, һәр хәлдә, үҙҙәренең шулай уйлағанын яҡшы белә ине. Ғөмүмән, Буранбаев, теге һары сәс шикелле, ҡаршы әйтеп маташманы, һорағандарына теүәл яуап биреп кенә ултырҙы. "Эйелгән башты ҡылыс сапмай, ауыҙын ҡайыр, башҡа был капитанды күрәһең бармы, күңеле булһын да тиҙерәк сығарып ебәрһен", - тип уйланы.

- Ниңә йәмәғәт тәртибен боҙҙоғоҙ? Ниңә һуғыштығыҙ? - Следователь быяла һымаҡ күҙҙәрен йүгертеп алды ла, һин башла, тигәнде аңлатып, Кальметов тигәненә ҡараны. Боланың башы ошо әҙәмдә кеүек күренде, ахырыһы. Ә һары сәс бирешеп барырҙайҙарҙан түгел, иренәнән һарҡырап торған ҡанды һөртөп алды ла өндәшмәй ултыра бирҙе.

- Кальметов, нимә, ишетмәйһеңме? Ниңә һуғыштығыҙ?

- Нимә, мин уң яғыма һуҡҡанда, һул яғымды ҡуйып торорға тейеш что ли! Кем башлаған бит!

- До этого еще дойдем! - тине капитан Голубь. - Ниңә ҡала майҙанында кеше күп йыйылған ерҙә һуғыш сығарҙығыҙ? Икәү башлағанһығыҙ. Бына уның менән! - Капитан Ишмырҙа яғына баш һелкте. - Ниндәй маҡсатта янъял сығарҙығыҙ?

- Ул миңә "татар" тине... - Һары сәс ҡаршыһында ултырған егеткә нәфрәт менән ҡарап алды. Следователь бындай яуапты көтмәгәйне шикелле, аптырап ҡалғандай итте, әммә эсендәген тышҡа сығарманы.

- Татар тине? - тип ҡабатланы. - Ә үҙең кем һуң?

- Ну, татар!..

- Һуң, татар булғас?..

Мәснәүи өндәшмәне, следователь яуап таптырып торманы, эстән генә ниҙер уйланы ла ҡуйҙы, шикелле. Шунан Ишмырҙаға боролдо:

- Ни өсөн һуғыштың?

- Ул миңә "башҡорт" тине.

- Ә һин полякмы ни? - Капитан быны мыҫҡыл менәнерәк әйтте. Ишмырҙа, әлбиттә, капитан Голубтың тел төбөн аңламай түгел ине, бите тартышҡандай итте, күҙҙәренән осҡон ялтланы, нисек тә ыңғайға торорға тырышҡан әзмәүерҙең төҫө ҡарайҙы. Ниндәйҙер бер Голубь мыҫҡыл итеп маташа түгелме үҙен!

- Башҡорт! - Ишмырҙа ҡаты итеп әйтте. - Мин уның шикелле... - Буранбаев һары сәскә ҡараны, - милләтемде әйткәнгә ғәрләнмәйем, ғорурланып ҡына китәм!

- Ә ғорурланғас, ниңә "башҡорт" тигәнгә һуғыша башлаһың?

- Ул килеп йәбешкәс, мин ҡарап торорға тейешме? Үҙ илемдә теләһә кемдән туҡмалып торорға! - Ишмырҙа тигәненең йөҙө ҡомһарылып китте. Күрәһең, былай ғына йомшаҡ күренә, сәменә тейҙеләрме, оҙаҡ уйлап тормай торған кеше.

- Үҙ илеңдә? - Капитандың күҙҙәре сысҡан күргән бесәйҙеке шикелле булды, мыйығы тороп ултырғандай итте. - Үҙ илеңдәме? Ә мин, бына был Кальметов, кемдең, һинең илеңдә йәшәйбеҙ булып сығамы?

Ишмырҙа ярамаған һүҙ ысҡындырғанын, был урында һәр һүҙең өсөн яуап бирергә тура киләсәген төшөндө шикелле:

- Һеҙҙе белмәйем, мин үҙ илемдә йәшәйем, - тип шымалап ҡуйҙы. Следователь егеттәге зиһенде һиҙҙе, һүҙҙе сәйәси яҡҡа борорға теләмәне.

- Өфөгә ниндәй маҡсат менән килдең?

Был һорау ҙа асыуына тейҙеләр, һаман киреләнә бирҙе:

- Ниңә, килергә ярамаймы ни? Өфө беҙҙең баш ҡалабыҙ!

- Һин һорағанға яуап бир, Буранбаев. Бында "Ҡыҙыл Байраҡ" колхозының контораһы түгел. Килеүеңдең маҡсаты барҙыр бит?

- Маҡсатмы? - Теге кинәйәле өндәште: - Беҙ үҙебеҙгә суверенитет алырға килдек!

- Суверенитет? - Капитан быға мыҫҡыллы ҡарап алды. - Шунан, алдыңмы суверенитетты?

Башҡорт өндәшмәне, ни әйтергә белмәне, күрәһең. Маңлайына йәбешкән сәсен һыпырҙы, яраһынан ҡан аға башланы.

- Электән таныштар инегеҙме? - Капитан күҙен теге байғоштарға йүгертте.

Өндәшмәнеләр.

- БыҒаса бер-берегеҙҙе белә инегеҙме? - Тәфтишсе ҡатыраҡ өндәште.

- Белмәйем, белергә лә теләмәйем! - Яуапты Мәснәүи бирҙе. - Мин - Өфөнөкө, ә ул ана ҡайҙан килгән. Мин: "Татарларга азатлык!" - тип ҡысҡырғанда килде лә яғанан алды.

Башҡорт урынынан тороп баҫты, ҡалын ҡаштарын төйөп, быға текәлде.

- Нимә алдайһың! Наоборот, мин: "Башҡортостанға - суверенитет!" - тип ҡысҡырғанда, үҙең килеп йәбештең! Шунда ауыҙыңды йырырға кәрәк булған да бит!

Мәснәүи ырғып торҙо:

- Вот, нахал башҡорт! Һеҙ йөрөнөгөҙ бит унда: "Суверенитет тик башҡорттарға ғына!" - тип!

Баш-биттәре күгәргән, ауыҙ-морондары ҡанға туҙған был ике ҡурҡыныс әҙәм күҙ уҡтары менән бер-береһен атып үлтерерҙәй булып бер-береһенә ҡараштылар. Осҡон ғына кәрәк, милиция бар, тип тормаҫтар.

- Сержант! - Капитан ишек яғына ҡысҡырҙы. Шуны ғына көтөп торғандарҙыр, ике әзмәүер килеп баҫты.

- Еще не протрезвели. Охладите!

Офицерҙың бойороуы булды, сержанттар, ҡуянға һөсләткән һунар эттәре шикелле, килеп тә йәбеште:

- Руки назад!

Егеттәр ғорур, үҙ теләктәре менән ҡулдарын артҡа ҡуйып йөрөргә өйрәнмәгәндәр, һинең арҡала, тигән шикелле, бер-береһенә ҡарап алдылар ҙа тора бирҙеләр:

- Что, не слышите? - Әзмәүерҙәр йәлт иттереп быларҙың ҡулдарын артҡа шаҡарҙылар, ыңғайына тубыҡтары менән арт һандарына типтеләр.

- Марш!

Оҫталар. Хәйер, уларҙың эше шул: тәртипһеҙҙәрҙе тәртипкә ултыртыу, именлек урынлаштырыу, законды тотоу. Ә уның өсөн көс, оһоллоҡ кәрәк.

Коридорҙа тағы ике милиционер тора ине, дүртәү булып киттеләр. Береһе - алдан, шунан Ишмырҙа, тағы милиционер, шунан Мәснәүи бара. Арттан икәүҙәр, немецтарҙы эләктергәндәрме ни!

Бер аҙ барҙылар ҙа уңға боролдолар. Тимер ишеккә еткәс, алдағыһы камераны асты. Ҡулдарын шаҡарып тотоп килгән сержант әллә ни арала аяғын ишеккә арҡыры ҡуйҙы ла Ишмырҙаның елкәһенә төртөп ебәрҙе: "Иди в Башкортостан!" Шундай көс менән төрттө, маңгаралай оҙон егет йөҙө менән бетон иҙәнде һөрөп барып ятты. Тимер ишек шалтырап ябылды.

Татар быны күреп торҙо: тимәк, үҙен дә шул уҡ хәл көтә. Тауышын йомшағыраҡ сығарырға тырышып:

- Слушай, син үзебезнең җиреткә ошагансың... - тине.

- Молчи! - Сержанттың бәләкәй йәшел күҙҙәре йыландыҡылай мызлай. Ҡулы йылт итеп кенә ҡалды, ул-былға әҙер торған Мәснәүи ҙә бөгөлөп төштө.

- Синарға азатлык ана шунда! - Сержант был һүҙҙәрен татарса әйтте. Ишекте япҡас, янындағы йәшерәк милиционерға ҡараны:

- Ну, ничек?

- Оста-а! - Теге һоҡланыуын йәшермәне.

- Афганец! - Өлкән сержант тәкәббер йылмайҙы. - Әйдә тартып алабыз.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

# МИН БАШ ИТЕП КҮРӘМ ИРҘЕ,

## Аша бик атламайым

Наилә ХӘМБӘЛИЕВА





### Беҙ - башҡорт!

- Атай, минең һорауым бар.
- Әү, балам, әйт, тыңлайым.
- Минең телем бөтә тиеп
Әйтәләрсе көн һайын?..

- Юҡ, юҡ, балам,
буш хәбәр ул!
Яман кеше хәбәре.
Тел бөхете күрмәгәндең
Үҙ-үҙенә йәбере.

- Ә Салауат кем ул, атай?
- Аһ, балам, матур һорау!
Быға яуап белеү була
Халҡыңа һөйөп ҡарау.

Салауат ул, батыр, балам,
Ҡанбабаң, рухи бабаң.
Башҡорттарҙы әйҙәгән ул
Яҡты ҡиблаға табан.

- Әсәй, ҡашмау, яға нимә?
- Ҡыҙым, был кейем йәме.
Ғорур, ипле башҡорт ҡыҙын
Иман нурына күмә.

- Атай, әсәй, беҙ башҡортмо?
- Алтындарым, һеҙ -
Башҡорт!
Бөйөк, азат илебеҙгә
Һеҙ - ышаныс, һеҙ - йәш ҡот!

Беҙҙән һеҙгә, балаларым,
Бер фатиха, аманат -
Маңҡорт ҡаны ҡушылмаһа,
Башҡортта һынмаҫ ҡанат,
Илебеҙ булыр азат!

* * *

Анау болот бигерәк һаран -
Урты тулы тамсыны
Биҙрәләп ҡойһасы һуң!
Күрәлер бит - сарсаған Ер
Тамсы һыуға тамшана!

Елбәҙәк ел ыңғайына
Елкәндәрен кирә лә,
Хөрриәт эҙләп китә микән?
Белмәй, ахыры, бәхет янда.
Бәхет бында - бирелә.

Йөҙгән ерендә бушатһа,
Күнәк-күнәк ямғырын,
Баҫыр ине йөҙ бысраткан,
Тупрағына ерекмәгән,
Ерҙең йылғыр саңдарын.

Баҫыр ине һыуһындарҙы,
Асылыр ине тындар.
Хозур булып тыуыр ине,
Һыҙылып торған таңдар.

Бер тамсыһы бер еләктең
Һутына батыр ине.
Сәскәләрҙең һәр тажында
Ирәйеп ятыр ине.

Ҡаурыйынан ҡошсоҡтарҙың
Шыуышып төшөр ине,
Ысыҡ тулы туғайҙарға
Ҡалай килешер ине!

Их, һаран шул анау болот...
Тотоп алып һығаһы.
Минең хәлемдән килһәме...
Көн һайын да сафлар инем
Ергенәмдең һауаһын.

### Башҡортлоҡ

Башҡортлоҡтоң теге яғында
Башҡорт тора аҡса һағында.
Был донъяла башҡа
ҡиммәт бар,
Йәм бар, тиген уйҙар юҡ унда.

Башҡортлоҡтоң теге яғында
Башҡорт тора тәхет һағында.
Тәхет ҡыры тиҙер - мәңгелек,
Көнитмеше рәхәт сағында.

Башҡортлоҡтоң теге яғында,
Башҡорт тора әшнә һағында.
Туған хаҡы - изге хаҡ, тиген,
Тамырына бағыу юҡ унда.

Башҡортлоҡтоң ысын яғында,
Башҡорт тора Ил, тел һағында.
Намыҫ һатыу,
ҡуштан йыр йырлау,
Рухын мәсхәрәләү юҡ унда.

Башҡортлоҡтоң ысын яғында,
Башҡорт тора милләт һағында.
Тамырынан аҡҡан хаҡ ҡанын
Изге күрә иҫән сағында.

Башҡортлоҡтоң ысын яғында,
Башҡорт тора
башҡорт янында.
Күҫәк түгел ҡыҫып тотҡаны,
Изге тупраҡ ике усында.

### Ирҙәр

Мин ирҙәрҙе кәмләмәйем,
Мин ирҙәрҙе күтәрәм.
(Кәмселеккә ҡалған иргә,
Мин - бисәнән һүҙ әрәм).

Мин баш итеп күрәм ирҙе,
Башбаштаҡ түгел үҙем.
Башлы ирҙең эргәһендә
Тыныс бит күңел үҙе.

Мин баш итеп күрәм ирҙе,
Аша бик атламайым.
Тик талабым - ир үҙе лә,
Асылын ваҡламаһын.

Асылында ирҙең - көрәш,
Иреш, баҫтырыш түгел.
Әйтһә лә, ирҙең әйткәне -
Оран. Ҡыҫҡырыш түгел.

Әйтә белһен тимен, ирҙәр,
Һүҙҙең тоғро, хаҡлыһын.
Батшамы ул төбәлгәне,
Башҡамы ул - үҙ һүҙенең
Намыҫ, бәҫен һаҡлаһын.

Баҙамаһын ине ирҙәр,
Түрә-ҡара ҡашында.
Ҡарашын ергә төбәргә,
Ялыҡ түгел, ир белдеге -
Аҡыл даһа башында.

Ҡаушамаһын ине ирҙәр,
Бисә ҡаушаған ерҙә.
(Аттар тулай, дилбегәһе
Ирҙең бушаған ерҙә).

Мин ирҙәрҙе кәмләмәйем.
Ирҙәр - донъя терәге.
Терәктәрҙе еректерә,
Ирмен тиген ирҙең генә
Тоғро типкән йөрәге.

* * *

Йәштәремде һорамағыҙ,
(Үҙемдән дә йәшерәм).
Һыҙыҡ өҫтәп ҡуйғас ҡына,
Ҡыҙыҡ өсөн тикшерәм.

Сәстәремә ҡарамағыҙ,
Сал түгел, буяҡ ҡына.
Үтә ҡаты бәрелмәгеҙ...
(Яулыҡһыҙ яланбашымдың
Өйрәндем оятына...)

Һырҙарымды һанамағыҙ,
Артыҡ та түгел, кәм дә.
Йәшәрергә тырышмайым,
Ихлас итеп йылмаям да,
Йәшерәм генә тим дә!

Күңелемә ҡағылығыҙ,
Тойоғоҙ йөрәгемде.
Йәшәлгәндә йәшнәйек тип,
Дөрләйҙәр.
Күрәгеҙме?..

### Бәхеткә юл

- Бер аҙым да яңылышмам,
Тамсы үкенес эсмәм.
Ысыҡтай таҙа күңелем
Бысранмаҫ нәфрәт, үсгән.

Ал да гөл булыр тормошом,
Тамсы ла хәсрәт кисмәм,
Һағыш тулы һауыттарҙың
Бер йотом һыуын эсмәм.

- Аҙым түгел, тере һуҡмаҡ,
Һалырһың хаталарҙан.
Юлға төшһән, аяғыңа
Уралып буталырҙар.

Буталырҙар, күңелеңде
Этерҙәр нәфрәт, үскә.
Ҡотолорһоң - бирешмәһәң,
Йәшеңде йотоп эскә.

Тамсы түгел, хәсрәттәрҙең
Сумырһың дингеҙенә.
Бәхет кенә хаҡ һорай ул,
Хәсрәттәр тинһеҙ инә.

Был донъяла бер кеше юҡ,
Ҡаса алған һағыштан.
Бәхетлеләр барыһы ла,
Һағыш аша табышҡа.

### Монар

Беҙҙең яҡты монар баҫты,
Юйҙы офоҡ һыҙатын.
Күршеләргә бәлә килде -
Ут ҡыуалай ҡуҙ-атын.

Ялмап алды ла яҙалай
Яландарҙы, урманды.
Йөрәктәргә көс бир, Аллам,
Аңлар өсөн был хәтлемгә,
Ниндәй гонаһ ҡылғанды.

Йәшел генә йәмле ҡалҡан
Кем гонаһын күтәрә?
(Әллә яуап тотор мәлде,
Үҙен ҡорбан итеп һалып
Тағы, тағы күсерә?..)

Ҡурылып ятып ҡырылған,
Тереклектә ни гәйеп?
Улар урманға һыялмай,
Йоҙроҡ төйөп, ер һелкетеп,
Йөрөмәй бит шәбәйеп!

Улар һайрай, туйлай, үҫә,
Орлоҡ сәсә, тарала.
Беҙ генә ул,
Кеҫәләрҙе,
Күнәктәрҙе,
Күңелдәрҙе
Тултырғанда иҫләйбеҙ ҙә,
Онотабыҙ был Ерҙә лә,
Ожмах бары турала.

Ләүләп килгән аждаһаға
Йәйәүләп сығып ҡара...
Биленән ала урманды,
Һындырып арҡа тирәһен,
Аяуһыҙ йығып бара.

Йәйәүләп сыкты.
Сыкмайса,
Түҙәме инде Кеше?
Хәйер, сыкты белдеклеһе -
Тәбиғәт - йөрәк көсө.

...Ғәйеплене табырҙар ул.
(Тапмаһалар - эшләрҙәр).
Ғәйеплеләр - беҙ үҙебеҙ.
Тик үҙебеҙ, тигәнгәсә,
Еребеҙҙе әйләндереп,
Тулғандырып көсләрҙәр...

...Беҙҙең яҡты монар баҫты.
Монар - афәт илсеһе.
Килеп етмәҫ, ялмамаҫ тип,
Кемебеҙҙән йөрәге һуң
Саҡырымдар үлсәһен?

* * *

Күҙ елдәре таңдан йөрөй,
Осраштығыҙмы?
Ҡасан күсенеп киләләр,
Һораштығыҙмы?
Ниәттәре ниндәй Күҙҙең?
Өлгөрә микән?
Улай тиһәң, ул хәтлемен
Ел белә микән?
Күҙ үҙе лә юл хәлдәрен
Белмәйҙер әле.
Килеп етһә, йәм тултырып
Бер һөйләр әле.
Ә әлегә күстәнәсе,
Их, һалкын ғына!
Анау ҡайынға ҡағылған -
Суҡ алтын ғына.

### Һөйөү

Шундай матур донъяларҙа
Ыҙғышҡа ла урын бар.
Бәрәүҙәргә Йыһан етмәй,
Икенсегә урам тар.

Шундай бөтөн донъяларҙа
Көнсөллөккә урын бар.
Ҡара көйгән күңелдәрҙә
Һөрәм, тынсыу, урын тар.

Шундай йомарт донъяларҙа
Ҡомһоҙлоҡҡа урын бар.
Йомоҡ усын мүкләндереп,
Ҡалтырана һарандар.

Мөхәббәтле донъяларҙа
Нәфрәткә лә урын бар.
Араларҙа ҡыл өҙәлһә,
Олой дауыл, бурандар.

...Шундай матур донъяларҙа
Әлдә әле мин дә бар.
Һин дә барһың.
Һәм йәшәүҙе,
Һәр таңда ла таңһыҡ иткән,
Һөйөү тиген билдә бар.

### Ҡуштау

Үҙемде ҡуя алмайым -
Һүҙемде ҡуям.
Ҡуштау!
Йөҙәр саҡрым аша
Сараһыҙлыҡ һырҙар һалған
Йөҙөндә тоям.
Ҡулымды һуҙа алмайым -
Уйымды һуҙам.
Ҡуштау!
Йөҙәр саҡрымдарҙа
Ыңғырашкан тауышыңдан
Йөрәгем һыҙа.
Һаҡлаусың була алмайым -
Яҡлаусың булам.
Ҡуштау!
Ләғнәт утында башҡалар
Намыҫын, рухын яҡҡанда,
Яҡмаусың булам.
...Тәнемде ҡуя алмайым -
Йәнемде ҡуям...

*ИНТЕРНЕТТАН*

# АТАЙ БУЛЫП ӨЛГӨР

■ Джорджтаун университеты хеҙмәткәрҙәре иҫәпләүенсә, ҡайһы параметрҙар буйынса бала тыуыуы өсөн буласаҡ атайҙың биологик йәше әсәйҙекенә ҡарағанда ла мөһимерәк. Шуға ла билдәле бер йәшкә тиклем атай булып өлгөрөргә кәрәк, ти улар. Атай кеше 40 йәште үтһә, баланың аутизм менән тыуыу ихтималлығы арта икән. Шуға ла 40 йәшкә тиклемге арауыҡ иң яҡшыһы һанала. Шулай уҡ тыумыштан килгән нәҫел дефекттары, шизофренияның юғары кимәле лә буласаҡ атайҙың йәше менән бәйле. Әгәр ҙә ул алкоголле эсемлектәр ярата икән, яңы тыуған баланың ауырлығы нормаға тулмауы ихтимал. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн бала табыу өсөн иң оптималь йәш - 25-тән 35 йәшкә тиклем, ти Цюрих университеты ғалимдары.

■ Рио-де-Жанейро дәүләт университеты тикшеренеүселәре кунжутка бай ризыҡтарҙы күберәк ашарға тәҡдим итә. Улар организмдың әселәнеүенә юл ҡуймай. Ғалимдар, гипертония, 2 типлы диабет сирлеләрҙең әселәнеү маркеры кимәленә кунжут ҡулланыуҙың тәьҫирен тикшергән. Асыҡланыуынса, кунжут ашағандан һуң организмда антиоксиданттар кимәле күтәрелгән, әселәнеү стрессы кимәле түбәнәйгән.

■ Экзема - тиренең хроник йоғошло булмаған ауырыуы. Сирҙең барлыҡҡа килеүенә тышҡы факторҙар ҙа тәьҫир итә ала, ти белгестәр. Лондон колледжы университеты ғалимдары Бөйөк Британияла йәшәгән 1300 өс айлыҡ сабыйҙы тикшергән. Белгестәр һыуҙың ҡатылығы, ундағы хлорҙың концентрацияһы, тиренең һаҡланыу үҙенсәлектәре, экзема араһында бәйләнешкә ҡараған. Һыуҙың ҡатылығы экзема хәүефен 87 процентҡа күбәйткән. Хлорҙың кимәле һөҙөмтәгә йоғонто яһамаған.

■ Белгестәр сәләмәтлек өсөн зыянлы булған бер нисә төр кейем-һалым һәм аксессуар билдәләй. Уларҙың береһе - тар джинсылар. Ул ҡан әйләнешен боҙа, һейҙек-ҡыуыҡ системаһы сирҙәренә алып килә. Боттоң эске яғынан үткән нервыларҙы ҡыҫа, һөҙөмтәлә аяҡтар һыҙлай башлауы бар. Шулай уҡ сифатһыҙ бижутерия ла аллергияға алып килеүе ихтимал. Кедалар ҙа һаулыҡҡа насар йоғонто яһай, ти улар. Даими рәүештә кеды кейеп йөрөүселәрҙә айыу табан сире барлыҡҡа килә.

■ Артыҡ тән массаһы кешенең сәләмәтлегенә ҙур зыян килтерә. Тән ауырлығы норманан кәм булһа ла насар. Йель университеты ғалимдары раҫлауынса, ныҡ ябыҡ кешеләр йышыраҡ инфаркт миокарды кисерә. Һынауҙарҙа инфаркт менән дауаханаға эләккән 60 мең кеше ҡатнаша, уларҙың барыһының да тән ауырлығы норма кимәлендә йә унан түбәнерәк булыуы асыҡлана.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2000-2015 йылдарҙа ғүмер оҙайлығы 5 йылға артҡан. Аҙаҡҡы тапҡыр ғүмер оҙайлығы артыуы 1960 йылда күҙәтелгән булған. Иң ҙур үҙгәрештәр Африкала, унда кешеләр 9,4 йылға күберәк йәшәй башлаған һәм хәҙер уртаса ғүмер оҙайлығы 60 йәшкә еткән. Был сабыйҙар араһында үлем кимәленең кәмеүе, малярияны контролгә алыу менән бәйле. Японияла ҡатын-ҡыҙҙар оҙағыраҡ йәшәй (86,8 йәш). Ир-егеттәр араһында (81,3 йәш) был күрһәткес Швейцарияла иң юғарыһы. 2015 йылда тыуған балаларҙың ғүмер оҙайлығы яҡынса 71,4 йәш буласаҡ, тип фаразлана. Әммә был бала ҡайһы илдә тыуыуына ла бәйле.

*АФАРИН!*

# АҪАЛЫ БАЛАҪ ҺУҒЫУСЫЛАР

## боронғо һөнәрҙе яңырта



**(Башы 1-се биттә).**

Ауылға ингән ерҙә, юл-урам саттарын бергә төйнәгәндәй ҡалҡып, ыҡсым ғына мәҙәниәт йорто тора. Уның тирә-яғын уратҡан кәртәләүгә аллы-гөллө аҫалы балаҫтар эленгән. Иң башта был күргәҙмәне буйлап-танышып сығырға кәрәктер. Балаҫ һуғыу урынын ҡороп, гөм халыҡтың геүләгәнен тын ғына тамаша ҡылып ултырған оло йәштәге ҡатынға яҡынлашам. Күсәрбай ауылында ғүмер кисергән Аҡсулпанова Гөлтүташ инәй икән. Үҙе бынан алыҫта, мең ырыуы йәшәгән яҡта - Ауырғазы районы Яңы Бигәләш ауылында тыуып үҫкән. Күсәрбайҙа аҫалы балаҫ һуҡҡан боронғо кеше булыуы бик икеле ине, тимәк, килгән килендәрҙең шөғөлө булған ул. "Юҡ, был ауылда аҫалы балаҫ юҡ ине, - ти Гөлтүташ апай ҙа, - килен булып төшкәнемдә әҙер балаҫтарым бар ине. Заманына күрә бирнәм бай килде! Ике аҫалы балаҫым, һуғылған шәлем, тарыраҡ булһа ла, кейеҙем дә булды. Шаршауымды ла өлгөрттөк. Инәйемдәр тырышты инде. Йыраҡҡа килдем бит, әллә нисә һыу сығып, әллә нисә тау ашып, тигәндәй... Бында килгәс, колхоз эшенә, ғаилә эсенә сумдым, балаҫ һуғыу ҡайғыһы булманы..." Шулайтып, кейәүгә китер ҡыҙ үҙ бирнәһен үҙе етештереп, "бай килен" исеме күтәрерлек мал туплай. "Балалар үҫкәс, донъяның ыуаҡай-мыуаҡай эштәре ҡулдан төшкәс, әүәлге урынды (һуғыу станогын) яңыртып эшләтеп алдым. Тәү мәлдә хатта ҡулдарым ҡалтырай торғайны, шатланам бит әй! Ысынлап та мин балаҫ һуғаммы! Ҡартаймаҫ борон бик күп итеп аҫалар күсереп һуғайым, тип ашҡындым. Ныҡ һағынғайным. Бер ниен дә онотмағанмын, үҙем ебен оҙатып, үҙем аҫаһын күтәрмәләп ҙурып алдым да киттем! Үәт әйкәйем!. Ана шулайта ул йәштән өйрәнеү! Бер ҡайҙа ла юғалмай, бер ҡайҙа ла ҡасмай - йөрәк төбөндә генә көтөп тик ята!" - тип һүҙен осланы Күсәрбай ағинәйе Гөлтүташ апай.

Балаҫ фестивале күргәҙмәләре буйлап артабан китәбеҙ. Бер нисә өҫтәл артында бәләкәй генә һуғыу ҡоролмалары ҡуйылған, ун-ун ике йәшлек ҡыҙ балалар тар ғына балаҫ өлгөләре һуғып ултырған була. Ындай уйынсыҡ эштәрҙе Раевка район Пионерҙәр йортонда, Бөрө ҡалаһында күргән бар. Балаларҙы балаҫ һуғыуға йәлеп итеүҙе былар ҙа уйында башлаған икән, тибеҙ. Ләкин балалар янында инә ҡаҙҙай өйөрөлгән уҡытыусылары менән танышҡас, фекер үҙгәрә. Бәҡһан, Күсәрбай мәҙәниәт йортоноң тас маңлайына киреп ҡуйылған оҙон баннерҙағы яҙыу күп нәмәне асыҡлай: "Башҡорт балаҫы этникаһы байрамы" - тип яҙылған унда. Күсәрбайҙа ла ағинәйҙәр балаҫ һуғыу темаһын күтәреп сығып, уны үҫтереү буйынса республика Башлығы грантын ала, ошо эште Күсәрбайҙа ғына түгел, төбәктәге башҡа ауылдарҙа ла таратырға, тигән маҡсат менән "Башҡорт балаҫы этникаһы байрамы"н иғлан итә! Был, исмаһам, тархандарса киң фекерләү, тип уйлап ҡына ҡуям да, был турала әйтергә ашыҡмайынса, ары китәм.

Һораш ҡына, яуаптар бар: ауыл мәктәбендә балаларҙы балаҫ һуғырға өйрәтмәк булып түңәрәк эше башланған. Уны Минһылыу исемле оҫта етәкләй. Күсәрбайҙан Гүзәл Аҡсулпанова, Айыусынан Нурия Миниғужина башҡорт кәсептәрен өйрәтеү буйынса эш алып бара икән. "Нәзифә Абдуллина ғүмер буйы мәктәптә эшләгән, ә бөгөн ул балаларға балаҫ һуғырға өйрәтә.

"Башҡорт балаҫы этник байрамы"н тантаналы асҡан саҡта, етәкселәрҙән фатиха алғас, оҫталарға ла һүҙ бирелә. Бер етәксенең һүҙе ныҡ хәтергә уйылды: "Егерме биш йыл ошо районда эшләйем, әммә бындай байрамды күргәнем юҡ", - тине ул. Бөгөнгө байрамдың баһаһын күтәрергә теләп әйтте, ләкин шунса дәүер ошо яҡта эшләп, халыҡ кәсептәрен күрмәүе, уларҙы күтәрерлек байрамдары булмауын фаш итте лә ҡуйҙы. Бына, ниһайәт, Күсәрбай балаҫсыһы алға сыға. Күсәрбайҙың баш ағинәйе дәрәжәһен йөрөткән Флүрә Аҡсулпанова ул. Абруйлы оҫтаның һүҙҙәрендә бик күп тәрән мәғәнә ята. Бигерәк тә бөгөн ауылдарҙа ағинәй булыуҙың ни хәтле яуаплы һәм ҡатмарлы күренеш тә булып китеүе асыла. Ағинәйлек бөгөн тәсбих әйтеп, аҡтан кейенеп, аҡыл өйрәтеп ултырыу түгел, ул халыҡ күңелен үҫтерә торған һәм уны ағарта торған эшғәмәлдең башында тороп, юл башларға, өлгө күрһәтергә, эш күрһәтергә әйҙәүсе лә ул. Хатта "аяҡтары бик ныҡ ауыртһа ла"... Флүрә Зәйнулла ҡыҙы үҙенең ҡотлау һүҙен ихлас ослап ҡуя: "Ашарға бар, кейемдәр бар, эшләһәк, яратҡан эшебеҙ бар - артығы кәрәкмәй. Акса өсөн йәшәмәгеҙ. Ул байлыҡ беҙгә нимә килтерер, яҡшыға алып барырмы, кем һәм ни өсөн тотонор ул байлыҡты? Иман - бына ул донъя байлығы. Иман таратайыҡ, иманлы булып йәшәйек. Яратҡан эшем итеп Аллаһы ошо эшкә ҡушҡан өсөн рәхмәтлемен..." Уның сығышына оҙаҡ итеп ҡул саптылар...

Шулай итеп, быйыл "Айыҡ ауыл" номинацияһында еңеп, Хөкүмәттән биш миллион һум бүләккә сертификат алған Күсәрбайҙа балаҫ фестивале гөрләй. Уны туктатыр көс юҡ. Район ауылдарынан йыр-бейеү коллективтары алмашлап сығып ҡына тора. Беҙҙе ҡырҙан килгән ҡунаҡтар ҙа ҡыҙыҡһындыра. Йылайырҙан Юлдыбай, Сидоровка ауылы ағинәйҙәре үҙ машиналарын ҡыуып, үҙҙәре эшләтеп алған тукыу һәм һуғыу урындарын тейәп, килеп еткән. Йылайырҙың баш ағинәйе Миләүшә Моратова, яҡташы Люция Таһирова менән сепрәк йыртып һуғылған балаҫтарҙы - турпышаларҙы йәйеп һалған. Ҡасандыр беҙ барыбыҙ ҙа тиерлек ошондай балаҫ өҫтөндә уйнап үҫтек, шуларҙы тотоп бирнәле булып кейәүгә оҙатылдыҡ. Улар тарих сүплегендә тороп ҡалды, ҡытай тауары менән баҫылып онотолдо микән, тинәк, бынағайыш, артыбыҙҙан "яңы күренеш" булып - һөнәрмәнлек һәм халыҡсан кәсеп өлгөһө булып баҫтырып килмәләрсе!.. Аҫалы балаҫты ғафуриҙар "көйәҙ", ти, бөрйәндәр "йөн балаҫ" ти, стәрлеләр "келәм", ти, күгәрсендәр "биҙәкле балаҫ" тип йөрөтә. Сепрәк балаҫты әбйәлил менән баймаҡтар, йылайырҙар менән бөрйәндәр "турпыша", ти. Ни генә тиһәләр ҙә, улар был көндә "Башҡорт балаҫы этникаһы байрамы" түрендә.

Ишембай районы Кинйәбулат ауылынан килгән Гөлсирә Дәүләтова менән танышабыҙ. Һуҡҡан аҫалы балаҫтары ла бик күркәм, үҙе лә бик мөләйем, бик матур, һәм бының сере лә бар икән. Гөлсирә апайҙың йөҙөн яҡтыртып торған "көҙгөһө" - янындағы килене Регина Дәүләтова булып сыҡты. Ҡәйнәһенең эшен ҙурлап, аңлап, күтәрмәләп тороуын күреү - үҙе бер кинәнес. Шайтан ҡолағы һаңғырау булһын, күҙ теймәһен. Әммә ҡыйыуһыҙ ғына торған ҡәйнәһенең һуҡҡан балаҫтарын килене маҡтап бөтә алмай, кеше алдында уны оҫта икәнен күрһәтергә тырышыуына рәхмәт. Регина килен үҙе Кинйәбулат ауыл мәҙәниәт йортонда художество етәксеһе булып эшләй икән. Ҡул эштәренә лә тотонған: селтәр, хәситә, ҡашмау эшләп һата. Күсәрбай йыйынын да бик матур яңы хәситәһе менән балҡытып торҙо. Тарихын да һөйләргә иренмәне: "Был хәситәне 1930 йылдарҙа төшкән иҫке фотонан ҡарап эшләнек, ул ғаилә байлығын беҙҙең өләсәйҙәр бала ғына саҡтан уҡ эшләтеп таҡҡан. Бөтә биҙәүестәрен Ишембай яғы башҡорт ҡатындары Бөйөк Ватан һуғышында фашистарҙы енер өсөн самолет һатып алырға биргән... "

Ирекһеҙҙән, бөгөнгө ҡатмарлы заманда ла халыҡты ҡотҡарыу һәм һаҡлау өсөн башҡорт ҡатын-ҡыҙы йәнә үҙенең биҙәүестәрен тәҡдим итә түгелме, тигән уй башҡа килә. Нисекме? Ыныйы-мәрйен теҙәме, ука-биҙәк сигәме, еләнкамзул тегәме, аҫалы балаҫ һуғамы - йәш ҡыҙҙар һәм малайҙар мөкиббән китеп, донъяһын онотоп ошо ижад эшенә сума бит. Абайлап ҡарағыҙ әле ошо хәлдә. Милли кейем тергеҙеү, милли уйындар уйнау, милли аштар бешереү, милли тел хазнаһын һәм йыр-моңдарҙы өйрәнеү беҙҙең балаларҙы йәнә ҡотка-

✓ **Ҡулдан һуғылған йөн балаҫтарҙың иң затлыһы һәм ҡатмарлыһы - аҫалы балаҫ. Һарыҡ йәки кәзә йөнөн иләп, буяп, билдәле бер орнамент, геометрик фигура менән аҫалап һуғылған балаҫ "аҫалы балаҫ", тип атала.**



рыр, зиһенен томалаған һәм һаулығын ҡороткан интернет-гаджет ауҙарынан аралар. Шулай ти йәш быуынды милли кәсепкә йәлеп итеүсе, эшкә өйрәтеүсе ағинәйҙәр.

Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан килгән Роза Раҡаева - электән күренекле аҫалы балаҫ һуғыу оҫтаһы. Ул 1990 йылдарҙа уҡ Башҡортостанда республика Халыҡ ижады үҙәге башлаған "Башҡорт балаҫы" фестивалдәрендә ҡатнаша килә, ул һуҡҡан аҫалы балаҫтар менән Салауат йыйыны тирмәләре лә йыл һайын биҙәлде. "Башҡортостан" гәзите ойошторған "Һөнәрмән" республика күргәҙмә-бәйгеһендә лә еңеүселәрҙең береһе булды ул. Шул ваҡытта алған рәхмәт хаттарын яттан белә ул, дипломдарын һәм Ҡаҙан ҡалаһына сәйәхәт путевкаһы менән бүләкләнеүен онотмай һөйөнөп һөйләй. Уны Күсәрбайға, "Башҡорт балаҫ этникаһы байрамы"на етәкләп тиерлек алып килеүсе - Федоровка яғы ағинәйҙәре башлығы Минсара Иҫәнғолова икән һәм ул үҙе лә балаҫ һуға. Ә Роза Раҡаева һуҡҡан балаҫ башҡаларҙан ныҡ айырыла бит. Нисек, нимәһе менән айырыла, тиһегеҙме? Был хаҡта уны уратып ҡарап тороусылар бер ауыҙҙан баһалар-аңлатмалар яуҙыра: "Беренсенән, Роза Раҡаеваның балаҫы - ул башҡорт традицион аҫаһы һәм бары тик һарыҡ йөнөнән, үҙе иләп, буяп әҙерләгән йөн ептәрҙән һуғылған. Икенсенән, йөн буяуҙары - элекке анилин бояҡ, улар бик сифатлы һәм баҙыҡ төҫтәрҙе оҙаҡ бөтмәй һаҡлана. Өсөнсөнән, балаҫтағы төҫтәр бер-береһенә яҡшы тура килә, күҙгә бәрелмәй, һаҙлама үтә сағыу төҫ юҡ - ҡара һарыҡтың тәбиғи төҫтәге йөнө, ҡыҙыл буяулы йөн, үләнгә тартым йәшкелт талғын төҫ. Тап ошо дөрөҫ табылған төҫтәр һәм дөрөҫ күсерелгән аҫалар арҡаһында Роза Искәндәр ҡыҙының һуҡҡан балаҫтары художестволы картина кеүек, ҡарап туймаҫлыҡ бер күренешкә әйләнә..."

Был хәтле маҡтауға иреп китеп, Роза апайыбыҙ үҙенең бер серен сисеп ташланы: "Буяу ныҡ керһен өсөн, оҙаҡ һаҡланһын өсөн мин уның буяғын эркет һыуына һалып ҡайнатам, шуға манам. Тәүҙә эркетте ҡаҙанда ҡайнатам, аҙлап ҡына буяҡтың онтағын (порошок) һибәм. Самалап ҡына һалғас, болғатып бер биш минут ҡайнатам да шунда уҡ буяй торған йөндө лә сумдырам. Үәт шәп була - эркет буяҡты дан итә!" Быуна шулай итеп быуаттар артында "аҙашып ҡалған " халыҡ кәсебе серҙәре беҙҙә ҡыуып етте лә ҡуйҙы.

Шул урында ниндәй ағас-үләндәрҙән нисек итеп тәбиғи буяуҙар алғанын да иҫкә төшөрә оҫталар. Кесерткән һабағы - йәшел буяҡ, һуған ҡабығы - һарғылт йәки ҡыҙғылт ерән төҫ (оранж), ерек ҡабығы - көрәнҡыҙыл төҫ бирә икән. Был эштә әсе ҡатыҡ һыуы йәки ҡороттан һарҡыған эркет бик урынлы "ярҙамға килә".

Дим-Күгиҙел йылғаһының үренән - Бишбүләк районы Ҡаныҡай ауылынан дүрт ҡунаҡ бар ине йыйында: Әминә Абдрахманова, Мәрйәм Хәкимова, Светлана Хәйруллина һәм Гөлшат Хәлиуллина. Ҡунаҡ, тимәй, хәл юҡ, сөнки улар үҙҙәренең яғында бик ныҡ таралған аҫалы балаҫтарҙың, исмаһам, береһен дә тотоп килмәгән. Күрһәң, тапмағандар... Йәки, кәрәк тапмағандар. Мостай Кәрим яҙғанса, "иң һылыу ҡыҙҙар - Дим үрендә", тигәндәй, үҙегеҙҙе күрһәтергә килдегеҙме әллә, тип шаяртабыҙ. Әйткәндәй, Раевкала уҙған республика "Аҫалы балаҫ" фестивалдәрендә лә Бишбүләктән бер генә оҫта килә торғайны. Усаҡлыкисеү ауылынан Сәгәҙәт Фәсхиева.

Нисек кенә булмаһын, бөтә килгән кешенең кәйефе тәбиғәттеке кеүек - бер нимәгә ҡарамай, шат һәм ғорур ине ул көндә. "Ҡаныҡай ҡыҙҙары был юлы Күсәрбай фестиваленә "байҡар" булып, йәғни, "разведчик" булып килгән", - тип ихлас шаяртты халыҡ. Ысынлап та, кем белә, бәлки улар киләһе республика балаҫ йыйынын үҙҙәренең ауылында үткәрер. Ике йыл элек Бишбүләктең Ҡаныҡай ағинәйҙәре ҡыш уртаһында балаҫсылар менән осрашыуға мәктәп уҡыусыларын, ҡул эше оҫталарын йыйғайны. Аҫалы балаҫтары күҙҙең яуын алып торҙо. Бигерәк тә шул балаҫтар өҫтөндә ултырып, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләгән балалар иҫтә ҡалды.

Байрамда Стәрлетамаҡ район хакимиәте башлығы Әнүәр Абдрафиҡов, район советы секретары Люция Шәйәхмәтова, урындағы етәкселектән Рима Ниғмәтуллина, Стәрлетамаҡ район мәғариф идаралығы етәксеһе һәм район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Эльвира Иманғолова сығыш яһаны. "Нимә һуң ул башҡорт аҫалы балаҫы" тигән һорауға яуап эҙләмәне улар, ә, тыңлап, урындағы халыҡҡа яңы заманда элекке оҫталыҡты тергеҙеү юлдарын табырға кәңәш бирҙе, изге теләктәрен еткерҙе.

Шулай ҙа нимә һуң ул "Башҡорт балаҫы? Милли хазинабыҙ, республика башҡорт бренды, ил ҡото булған аҫалы балаҫтарыбыҙ бик күп тарафтарға таралып, икенсе ҡәүемдәр өсөн дә "үҙ мөлкәте" булып китеүе бар. Ә башҡорт аҫалы балаҫы булған, бар һәм буласаҡ. Һәр кемгә билдәле: егәрле башҡорт ҡатынҡыҙҙары бер төбәктә дебет шәл бәйләй, икенсе яҡта кейеҙ баҫа, ә ҡайһы бер урында балаҫ һуға. Балаҫ һуғыу - башҡорт халҡының боронборондан килгән һөнәрҙәренең береһе. Ҡулдан һуғылған йөн балаҫтарҙың иң затлыһы һәм ҡатмарлыһы - аҫалы балаҫ. Һарыҡ йәки кәзә йөнөн иләп, буяп, билдәле бер орнамент, геометрик фигура менән аҫалап һуғылған балаҫ "аҫалы балаҫ", тип атала. Бер яҡтан, "аҫа" һүҙенең мәғәнәһе балаҫ һуғыу ысулын аңлата, йәки ептәрҙе асып-айырып, йөн ептәрҙе арҡыры үткәреп, аҫалап-биҙәк һалып һуғыу менән бәйле. Халыҡта "балаҫ аҫалау, аҫалап һуғыу", тип һөйләйҙәр. Артабан "аҫа" һүҙе балаҫҡа ҡуйылған, йәғни һуғылған орнаментты, биҙәкте лә белдерә. "Аҫалау", "барсалау", тигән һүҙҙәр ҡул эше оҫталары телмәрендә йыш осрай - биҙәк һалыу, биҙәкләү, мәғәнәһендә йөрөй улар. Тимәк, аҫалап һуғылған балаҫ "аҫалы балаҫ" тип йөрөтөлә.

Борон-борондан матурлыҡ һәм байлыҡ, уңғанлыҡ һәм мәҙәнилек күрһәткесе булған аҫалы балаҫ башҡорттар йәшәгән бөтә ерҙә осрай. Ҡайһы бер яҡта уны "йөн балаҫ, келәм" тип тә йөрөтәләр. Урал аръяғындағы Баймаҡ, Учалы, Бөрйәндә, көньяҡтағы Күгәрсен, Хәйбулла, Белоретта йәшәгән аҫалы балаҫ һуғыусы оҫталарҙың эше милли музейҙарҙы, каталогтарҙы биҙәй. Ғафури, Архангел, Ауырғазы, Шишмә ауылдарында балаҫ һуғыусылар элек күп булған. Дим-Өршәк йылғалары буйында йәшәгән мең ырыуы башҡорттарында айырыуса киң таралған. Бик боронғо, ҡатмарлы, зауыҡлы һәм серле күренеш булған аҫалы балаҫ Бишбүләк, Миәкә, Әлшәй, Дәүләкән яғында һәр бер йортта осрай, был төбәктә аҫалы балаҫтар әле лә күпләп һуғыла. Танылған оҫталар бар - Әлшәй районынан Фатима Шөғәйепова, Минзилә Муллаголова, Нәсимә Зәйҙуллина, Гөлсөмбаныу Ғәбдрәхимова, Миңлегөлсөм Ғәлиуллина, Рәйсә Рафиҡова, Тәслимә Кәлимуллина, Вәрисә Имаева, Зөһрә Әхмәтовалар, Миәкәнән Рәйлә Зәйнуллина... Оҫталарҙың да оҫтаһы, "Башҡорт балаҫы" республика фестивале лауреаты, Дәүләкән районы Ҡорьятмаҫ ауылынан Назыя Әхмәтвәлиева данлыҡлы балаҫ һуғыусыларҙан һанала, уға етә Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Рабиға Йәрмиеваның, Минира Харрасованың эштәрен танайбыҙ.

Балаҫты һуғырҙан алда йөндө тетеү, иләү, сиратыу, буяу, йомғаҡлау эше тора. Уны өмә менән башҡарыу яйһыҙ. Йөн эптең йыуанлығы, сираҡлығы балаҫтың сифатында сағыла. Шуға күрә иләү-сиратыу бер ҡулдан, йәғни бер генә кеше тарафынан эшләнһә, балаҫ тигеҙ була. Буласаҡ балаҫ һәр ваҡыт кемгәләр бағышлап һуғыла. Һатыр өсөн әҙерләнгән балаҫ та Аллаға тапшырылып, изге теләк, матур хистәр менән һуғыла. Аҫаны - орнаментты һайлау ҙа бик мөһим һанала. Ҡыҙ балаға йәки ир балаға тәғәйен аҫалар була. Ҡайһы бер оҫта ҡулы-күҙе өйрәнгән айырым бер аҫаны ғына үҙ итә. Ләкин ысын оҫталар боронғо аҫаны ғына күсерә, үҙгәртеүҙән-боҙоуҙан тыйыла. Һәр аҫаның көсө, ырымы, мәғәнәһе булыуға улар ышана. Һуңғы осорҙа балаҫҡа сағыу роза сәскәләре һүрәтен ҡуйыуҙы балаҫ оҫталары һәм ғалимдар хупламай. Самаһыҙ сыбарлыҡ, артыҡ сағыу төҫтәр балаҫтың тылсымлы матурлығын кәметә. Шуға күрә аҫалы балаҫтары боронғо башҡорт геометрик орнаменттарына өҫтөнлөк бирелә. Башҡорт аҫалы балаҫының халыҡсанлығы, эпик мәғәнәһе, зауыҡлы төҫтәрҙә балҡышы бик юғары баһалана.

Башҡорт аҫалы балаҫына арналған республика байрамы - ул күргәҙмәләр, йәрминкәләр, оҫталыҡ тантанаһы ғына түгел. Ҡасандыр "Ағиҙел" художестволы производство берекмәһе балаҫты күпләп етештергән, унда махсус станоктар эшләнгән, ауылдарҙан оҫталар йәлеп ителгән. Әммә берекмә тарҡалыу менән бөтә эш тәжрибәһе ҡыйраған, станоктар юҡҡа сыҡҡан, эшләүселәр таралған. Бөгөн "Ағиҙел"дә һуғылған балаҫтар башҡорт милли төҫтәренән, биҙәктәренән бик алыҫ тора. Тураһын әйткәндә, уникаль халыҡ кәсебен артабан үҫтереүҙән бигерәк, уны тамам онотторроу, башты бутау уның бөгөнгө текстиль продукцияһы.

Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылында булып үткән "Башҡорт балаҫы этникаһы байрамы" тип аталған саранан һуң баш әйләнерлек ҡыуаныс булмаһа ла, башты юғары сөйөрлөк ғорурлыҡ күңелде күтәрҙе. Төбәктәге оҫталарҙың ижадына ихтирам йөҙөнән иғлан ителгән был сараның маҡсаты - ауыл халҡының матди хәлен яҡшыртыу ғына түгел бит. Иң мөһиме, борондан уңғанлыҡ-гүзәллек сағылышы булған аҫыл һөнәрҙең рухи байлыҡ, милләт хазинаһы икәнен күрһәтеү, балаҫ аҫалауҙың серҙәрен йәш быуынға тапшырыу. Бөгөн халыҡҡа эш урыны булдырырлыҡ предприятие асыу, боронғо оҫталыҡтың үрнәктәрен һаҡлау - аҫалы балаҫтар байрамының төп маҡсаты. "Аҫалы балаҫ - үткән заман, тип ҡараусылар бар. Ә беҙ, киреһенсә, уның киләсәктә лә башҡорт өйөнөң, мәҙәниәтенең, халыҡ сәнғәтенең үҙәгендә буласағына ышанабыҙ", - ти улар.

**Сәрүәр СУРИНА.**
**Июнь, 2021**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Юғары Мин менән берлекте тергеҙеү

**Хәҙер һеҙ эшләргә тейешле процедура еңел булһа ла, уның һөҙөмтәләре һуңынан күренәсәк. Йәғни, уның һөҙөмтәләре күп яҡлы.**

Үҙегеҙҙең Ижадсыға тоташҡанлыҡты аңлап, яңы эске тормош менән йәшәй башларһығыҙ. Үҙегеҙҙең ижад итеүҙәге урынығыҙҙы яҡшыраҡ аңларһығыҙ. Һуңынан, артабанғы бүлектәрҙе уҡып, Юғары Минегеҙҙе тулыһынса сағылдырыуға һәм байлаҡ, һаулыҡ, мөхәббәт һәм тыныслыҡ алып килеүсе ағымға асылырға сираттағы аҙымығыҙҙы яһарһығыҙ.

Бәләкәй генә кәңәш: был турала бер кемгә лә һөйләмәгеҙ. Был рухи тәжрибәне һөйләп бирер өсөн кәрәкле һүҙҙәр эҙләй башлаясаҡһығыҙ. Ә һүҙҙәр етмәйәсәк. Шуға ҡарамаҫтан, был эшкә тотоноп, тәжрибәгеҙҙе һүҙҙәр менән асып бирергә тырышһағыҙ, үҙегеҙ ҙә һиҙмәҫтән, уны һүҙҙәрегеҙгә тап килтереп, үҙгәртә башлаясаҡһығыҙ. Бының өсөн һеҙ байлыҡ, сәләмәтлек, мөхәббәт һәм тыныслығығыҙ менән түләйәсәкһегеҙ. Тәжрибәгеҙҙе боҙмағыҙ. Әйҙә ул саф, тере һәм эшлекле булып ҡалһын.

Нимә эшләргә тейешлегегеҙ, бәлки, һеҙгә таныш та тойолор. Был турала Уолтер де ла Мер былай тип яҙа: "Тәжрибә миңә фонарҙың яҡты нуры кеүек күренде. Ул аңда быға тиклем булған, әммә тоноҡ ҡына шәйләнгән нәмәне яҡтыртып ебәрә".

Друидтар Юғары Мин менән бәйләнеште файҙаланыусыларҙан тәүгеләр түгел. Ошо алымға уларға тиклем мең йыл элек тә мөрәжәғәт иткәндәр. Был кеше уға мөрәжәғәт итергә ҡарар ҡылыу менән, хәтер өҫкә ҡалҡып сыҡҡан бик һирәк ваҡиға. Ул: "Шаҡығыҙ, мин яуап бирермен", - ти.

Һеҙ шаҡырға әҙерһегеҙме?

* * *

**Түбәндә бирелгән инструкцияны уҡығыҙ. Уны китапты бер минутҡа ситкә алып ҡуйырлыҡ итеп ике йәки өс тапҡыр уҡығыҙ.**

Үҙегеҙҙең Юғары Минегеҙ менән осрашыу мөмкинлеге биргән күнегеү шундай: уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ; асыҡ итеп бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ; бүлмәгә кеше инә, тип күҙаллағыҙ. Ул һеҙҙең кеүек үк, тик бер метр - метр ярымға һеҙҙән бейегерәк һәм аҡ яҡтылыҡҡа сорналған; өс тапҡыр эстән генә: "Мин һине яратам һәм һинең ярҙамыңа мохтажмын", - тип ҡабатлағыҙ; уйығыҙҙа ғына урынығыҙҙан тороғоҙ, был кеше менән ҡосаҡлашығыҙ һәм кире урынығыҙға ултырығыҙ; күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм үҙегеҙгә энергияны итеп ,"Мин үҙ аңымда һәм Ижадсыға яҡынараҡмын", тип әйтегеҙ.

Китапты ситкә алып ҡуйығыҙ һәм күнегеүҙе ҡабатлағыҙ. Ошо тәжрибә аша үтеп, мәлдең мөһимлеген аңлау өсөн бер ни тиклем ваҡытҡа уҡыуығыҙҙы туҡтатып тороғоҙ. Бер сәғәткә булһа ла ярай.

Һеҙҙә үҙгәреш булды. Был эске үҙгәреш ҡасан да булһа тормошоғоҙҙағы хәл-торошта үҙен һиҙҙерер. Был кеше үҙ-үҙенән, ә яҡшыраҡ юл бармы, тип һораған ваҡытта донъя буйлап таралған психорухи үҙгәреш.

Был рухи уяныуҙың бер сағылышы булып, фәрештәләргә булған ҡыҙыҡһыныу тора. Бөгөн фәрештәләр бестселлерҙарҙа, журнал тыштарында, телевизион шоуҙарҙа ғына күренә. Һеҙҙең Юғары Минегеҙ фәрештәләрҙең энергияһына яҡынлашты. Хәҙер һеҙ үҙегеҙҙең Юғары Минегеҙгә яҡынланығыҙ. Тимәк, фәрештәләрҙең энергияһына яҡын килдегеҙ. Фәрештәләрҙең энергияһы Ижадсының булдырыусы ҡулы икән... Фекерҙе тамамлауҙы үҙегеҙгә ҡалдырам.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 20 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 "Время покажет" с Артемом Шейниным. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Русские горки". [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Царство женщин". К юбилею Эдварда Радзинского. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Подражатель". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**9.15 "Сәләм". [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Людмила Гурченко". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.30 Специальный репортаж. [12+]**
**11.45, 17.45 История одного села. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00, 4.00 Х/ф "В поисках золота". [16+]**
**2.15 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!". [12+]**

## 21 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 "Время покажет" с Артемом Шейниным. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Русские горки". [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Царство женщин". К юбилею Эдварда Радзинского. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.00 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Подражатель". [16+]
23.40, 1.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 Д/ф "Лужков". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Людмила Гурченко". [12+]**
**11.00, 16.00, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Хазина о хазине. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.50 Хоккей. "Северсталь" (Череповец) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00 Х/ф "Птицелов". [16+]**
**3.00 Спектакль "Хаджи эфэнди женится". [12+]**
**5.00 Топ 5 клипов. [12+]**

## 22 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 "Время покажет" с Артемом Шейниным. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Русские горки". [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Царство женщин". К юбилею Эдварда Радзинского. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Подражатель". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Людмила Гурченко". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда.**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Деньги: Американская мечта". [16+]**
**2.45 Спектакль "Счастье". [12+]**
**4.30 Башкорттар. [6+]**
**5.00 "Бай". [12+]**

## 23 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 "Время покажет" с Артемом Шейниным. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Русские горки". [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Царство женщин". К юбилею Эдварда Радзинского. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Подражатель". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Людмила Гурченко". [12+]**
**11.00, 16.00, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Үткән гүмер. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Октябрьскому-75. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.20 Хоккей. СКА (Санкт-Петербург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Всех порву!" [16+]**
**2.45 Спектакль "Сваха". [12+]**
**4.45 "Весело живем!" [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 24 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.30 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.20 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.40 Мужское / Женское. [16+]
17.00 "Время покажет" с Артемом Шейниным. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос 60+". Новый сезон. [12+]
23.40 Вечерний Ургант. [16+]
0.35 Д/ф "Миры и войны Сергея Бондарчука". [12+]
1.40 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина-2021. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.50 Х/ф "Сила сердца". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Легенды космоса". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.15 "Курай даны". [12+]**
**14.30 Башкорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Д/ф "Аксаков и Башкирия". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.00 Д/ф "Пожары". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Двойная игра". [18+]**
**2.00 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**4.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 Вопрос + Ответ = Портрет.[6+]**
**5.45 "Алтын тирмә". [0+]**

## 25 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.05 "ТилиТелеТесто" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.30 Д/ф "Я больше никогда не буду". К 105-летию Зиновия Гердта. [12+]
16.35 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.05 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.40 Д/ф "Я оставляю сердце вам в залог". К 115-летию Дмитрия Шостаковича. [12+]
0.40 Х/ф "Ковчег". [12+]
2.20 Модный приговор. [6+]
3.10 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету. [16+]
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного. [16+]
10.10 Сто к одному. [16+]
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Пенелопа". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Катерина". [12+]
1.10 Х/ф "Храни тебя любовь моя". [12+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Курай даны". [6+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Башкорттар. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Звезды сцены". [12+]**
**19.00 Ради добра. [12+]**
**19.20 Хоккей. "Локомотив" (Ярославль) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.00, 2.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.45 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**0.30 Х/ф "Форсаж. Диабло". [16+]**
**3.00 Спектакль "Пустая колыбель". [12+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 26 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
4.45, 6.10 Т/с "Катя и Блэк". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Х/ф "Приходите завтра..." Кино в цвете. [0+]
15.45 Д/ф Премьера. "Напрасные слова". Ко дню рождения Ларисы Рубальской. [16+]
17.35 Три аккорда. [16+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Вызов. Первые в космосе". [12+]
23.00 Д/ф Премьера. "Короли". [16+]
1.10 Д/с "Германская головоломка". [18+]
2.05 Наедине со всеми. [16+]
2.50 Модный приговор. [6+]
3.40 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1
5.25, 3.15 Х/ф "Напрасная жертва". [12+]
7.15 Устами младенца. [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым. [16+]
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым. [16+]
10.10 Сто к одному. [16+]
11.00 Большая переделка. [16+]
12.00 Парад юмора. [16+]
13.40 Т/с "Пенелопа". [12+]
18.00 Дуэты. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин. [16+]
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 Х/ф "Таблетка от слез". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [0+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**12.30 "Ете егет".**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Посмотрим... [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 I Международный музыкальный фестиваль Ильдара Абдразакова. Гала-концерт. [12+]**
**18.15 Д/ф "Караван-Сарай". [12+]**
**19.00 Лидеры региона. [12+]**
**19.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**20.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.45 Х/ф "Интервью с убийцей". [16+]**
**1.15 Спектакль "Кукольный дом". [12+]**
**3.30 История одного села. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

✓ *Цезарь армияһы легионерҙары йылыныу маҡсатында кесерткән менән сабынған. Рәсәйҙә лә үлән белемселәре үҫемлектең ҡан туҡтатыу һәм яраларҙы уңалтыу сифатын, уның һаулыҡ өсөн зарары бик әҙ булғанлығын үҙ иткән.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЮБИЛЕЙҘАРЫН БИЛДӘЛӘНЕЛӘР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**33-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Башҡорт. Манси. Ураҡсы. Аҡыҡ. Абазин. Нанай. Аҡыл. Шәм. Алтмыш. Алеут. Маори. Солтан. Туңдырма. Нардуған. Тура. Ҡарт. Учет. Үтек. Наиб. Әрем.

**Вертикаль буйынса:** Нуғайбәк. Аҙна. Елкән. Татар. Уҡа. Ай. Диуана. Моң. Шимпанзе. Фа. Аҡтүбә. Сыуаш. Руна. Твид. Атама. Сапотек. Телеут. Залим. Нағыш. Нужа.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# КЕСЕРТКӘН
## һәм шәкәр сире

**Кесерткәндең шифаһы боронғо донъя тарихынан бирле билдәле. "Кесерткән бер үҙе ете табипты алмаштыра", - тигәндәр элек был үҫемлеккә ихтирам менән. Беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, боронғо грек табибы Гиппократ кесерткәндең шифалы үҙенсәлектәре хаҡында яҙып ҡалдырған.**

Халыҡ дауалаусыһының ватандашы Диоскорид иһә был үләнде ҡан туҡтатыу үҙенсәлеге өсөн юғары баһалаған. Римлеләр кесерткәнде ауыртыныуҙы баҫыу һәм һыуыҡтан ҡотолоу сараһы булараҡ файҙаланған: Цезарь армияһы легионерҙары йылыныу маҡсатында тәндәрен кесерткән менән ҡайыҙлаған һәм сабынған. Рәсәйҙә лә үлән белемселәре үҫемлектең ҡан туҡтатыу һәм яраларҙы уңалтыу сифатын, шулай уҡ уның һаулыҡ өсөн зарары бик әҙ булғанлығын үҙ иткән. Шифалы сифаттарына килгәндә, кесерткән тағы ла 2-се типтағы шәкәр сирен әкренәйтә, уның артабан аҙыуын туҡтата ала икән. Инсулин терапияһы элементы булған был үҫемлек матдәләр алышыныуҙы тиҙләтә, органдар һәм ҡан тамырҙары эшмәкәрлеген яйлай. Кесерткәнде оҙаҡ ваҡыт ҡулланып, ашҡаҙан аҫты биҙе эшмәкәрлеген тергеҙергә була. Үлән күҙәнәклеге эсәк юлдарын таҙарта, аҙыҡ эшкәртеүҙе әкренәйтә, ә был ҡандағы шәкәрҙең тиҙ күтәрелеүен тотҡарлай. Был үҫемлек составындағы секретин гормоны ҡандағы глюкоза кимәле тупланыуҙы түбәнәйтә, шунлыҡтан уны диабет сирен дауалауҙа электән үк ҡулланалар. Шулай уҡ ундағы С, А, В төркөмө витаминдары шәкәр сирлеләрҙең хәлен яҡшырта, тик шулай ҙа ул сирҙе тулыһынса дауалай алмай, ә тик табип тәғәйенләгән препараттарға файҙалы өҫтәмә булараҡ баһалана, шуға күрә кесерткәнгә генә өмөт итеп, дарыуҙар эсеүҙе туҡтатырға ярамай.

**Кесерткән төнәтмәһе.** 3 аш ҡалағы ваҡлап туралған йәшел кесерткәнде термосҡа һалып, өҫтөнә 450 мл ҡайнар һыу ҡойғас, ике сәғәт торорға, аҙаҡ тәүлегенә 150-шәр мл төнәтмәне ас ҡарынға көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

**Ҡайнатмаһы.** Ваҡлап, киптерелгән 1 аш ҡалағы кесерткән тамырын 450 мл бүлмә температураһындағы һыуҙа 12 сәғәт тотҡас, һыуын алмаштырып, талғын утта 15 минут ҡайнатырға һәм һыуынғас, һөҙөп, ашарҙан алда көнө буйына яйлап эсеп бөтөрөргә.

**Онтағы.** Шәкәр сиренең еңел формаһында көн һайын бер стакан ойоған һөт, майһыҙ кефир йә йогуртҡа 2 аш ҡалағы киптерелгән кесерткән онтағы ҡушып эсергә.

**Иҫтә тотоғоҙ!** Кесерткән менән дауаланыуҙы ике аҙнанан оҙаҡҡа һуҙмағыҙ, 10-14 көнгә тәнәфес эшләп алығыҙ. Шулай итеп, барлығы 5 курс үтһәгеҙ, был үләндең файҙаһы оҙаҡҡа етер.

**Кемдәргә кесерткән ярамай:** бөйөр сирлеләргә; ошо сәбәпле йәки йөрәк сиренән организмда артыҡ шыйыҡлыҡ туплана; ҡан ағыу күҙәтелгәндә; ҡан ойошоуы юғары булғанда һәм тромбофлебит сирлеләргә; депрессияға ҡаршы йәм йоҡоһоҙлоҡтан дарыуҙар ҡулланғанда.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Сентябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (13) дүшәмбе | 5:29 | 6:59 | 13:30 | 17:48 | 19:18 | 20:48 |
| 21 (14) шишәмбе | 5:31 | 7:01 | 13:30 | 17:45 | 19:15 | 20:45 |
| 22 (15) шаршамбы | 5:33 | 7:03 | 13:30 | 17:43 | 19:13 | 20:43 |
| 23 (16) кесе йома | 5:35 | 7:05 | 13:30 | 17:40 | 19:10 | 20:40 |
| 24 (17) йома | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |
| 25 (18) шәмбе | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 17:35 | 19:05 | 20:35 |
| 26 (19) йәкшәмбе | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 17:33 | 19:03 | 20:33 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 сентябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+

**23 сентябрь "Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашененников). 12+

**24 сентябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 сентябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00, 14.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23 сентябрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 0+

**25-26 сентябрь "Три поросенка"** (С. Михалков). 11.00, 13.00, 16.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 сентябрь "Башҡортостан"** ДКЗ сәхнәһендә "Урал легендалары" (С. Сурина), мюзикл. 6+

**25 сентябрь** М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә **"Минең йөрәк һиндә тибә"** (Р. Ҡуйбағаров), драма. 13.00 12+

**"Киҫәкбикә. Риүәйәт"** (М. Башкиров), драма. 12+

✓ Хоҙай Тәғәлә Әҙәмде лә Һауаның ҡабырғаһынан яратҡан булһа икән... Ҡалай көслө булыр ине ирҙәр!

(Мечислав Шарган).



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЙӘШТӘР ҠОЛАҒЫНА...



**Сентябрҙә 14-22 йәшлек егет-ҡыҙҙарҙың электрон "Пушкин карта"һын алыу мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Унда быйыл Рәсәйҙәге мәҙәни сараларға барыу өсөн өс мең һум аҡса һалынған. Киләһе йылда был сумма 5 мең һум була. Аҡсаны йыл аҙағына тиклем һәм 23 йәш тулғансы тотоноп бөтөргә кәрәк.**

Картанан файҙаланыу өсөн Дәүләт хеҙмәттәре порталында һәм "Дәүләт хеҙмәттәре. Мәҙәниәт" махсус мобиль ҡушымтаһында теркәлергә кәрәк. Карта виртуаль итеп эшләнә һәм махсус ҡушымта аша ғына ғәмәлдә була. Бынан тыш, проекттың операторы "Почта Банк" ғариза буйынса пластик карта биреүе ихтимал. Был аҡсаны мәҙәни ялға: музейға, театрға, галереяға, филармонияға, консерваторияға һәм башҡа мәҙәниәт учреждениеларына ғына тотонорға ярай. Әммә "Пушкин карта"һына үҙаллы аҡса һалып булмай, картаға аҡсаны йылына бер тапҡыр дәүләт күсерә.

Башҡортостанда 21 дәүләт мәҙәниәт учреждениеһы "Пушкин картаһы" программаһын ғәмәлгә ашырыуға ҡушылды, улар араһында 17 театр-концерт ойошмаһы һәм 4 музей бар. Республикала Эксперт советы булдырылған, ул теге йәки был ваҡиғаның "Пушкин карта"һы программаһында ҡатнашыуы тураһында ҡарар ҡабул итергә тейеш. "Бөгөнгә беҙҙең республика буйынса порталда 300-ҙән ашыу сара (спектаклдәр, концерттар, күргәҙмәләр) урынлаштырылған. Киләсәктә китапханаларҙы ла йәлеп итеү күҙаллана. Карта алған йәштәр илебеҙҙең теләһә ниндәй төбәгендә мәҙәниәт учреждениеһын һайлау хоҡуғына эйә, сөнки был - федераль проект", - тине Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

Башҡорт опера һәм балет театрының генераль директоры Илмар Әлмөхәмәтов һүҙҙәренсә, Опера һәм балет театрына билет хаҡы 100 һумдан башлана, премьераға билет 2,5 мең һум тора. Йондоҙҙар килһә, хаҡтың 7 меңгә етеүе ихтимал. Башҡортостан Республикаһының Милли музейы директоры Альбина Ярмуллина республика музейҙары араһынан программала Өфө филиалдары менән Милли музей, Нестеров исемендәге Художество музейы, Милли әҙәбиәт музейы һәм Хәрби дан музейының ҡатнашыуы тураһында һөйләне. Билет хаҡы - 80-100 һум. Республика музейҙары сайттарында "Пушкин картаһы буйынса алырға" тигән махсус төймә бар. "Пушкин картаһы"н йәшәгән төбәктә генә түгел, ил буйлап сәйәхәт иткәндә лә ҡулланырға мөмкин. Аҡсаны федераль, төбәк һәм хатта шәхси мәҙәниәт учреждениелары билеттары өсөн тотонорға була.

# СӘХНӘЛӘ - АЗАТЛЫҠ ШАҢДАУЫ



**Көҙ етеү менән республиканың мәҙәни донъяһы ла йәнләнеп китә: театр-филармониялар сираттағы ижад миҙгелдәрен аса. Тамашасылары менән күрешмәй торған арала ла илһамланып эшләгән коллективтар репертуарын яңы тамашалар менән байытҡан. Ошо көндәрҙә 31-се ижад миҙгелен асҡан Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе лә шундай бүләк әҙерләгән: учреждениеның башҡорт драма театры коллективы "Киҫәкбикә. Риүәйәт" драмаһын сәхнәләштергән.**

"Киҫәкбикә. Риүәйәт" драмаһының сценарийын билдәле яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева хикәйәһенә таянып драматург Михаил Башкиров ижад иткән, ә ҡуйыусы режиссеры - Ҡалмыҡ Республикаһынан саҡырылған Борис Манджиев. Театр вәкилдәре әйтеүенсә, спектаклдә яҡынса 18-се быуаттарҙағы осор ваҡиғалары сағылыш тапҡан. Төп героиня - 60 йәшлек Киҫәкбикә (Киҫәнбикә) Байрасованың яҙмышы ошо йылдарҙағы меңәрләгән башҡа башҡорт кешеләренекен ҡабатлай: ул көсләп суҡындырыуға ҡаршы булып, ҡасҡынға әүерелә. Ҡатындың күңел кисерештәрен, ҡаһарманлығын, йәшәйешен һүрәтләгән спектаклдә төп ролде Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ләйсән Кәримова башҡара. "Киҫәкбикәнең саялығы, азатлыҡ һөйөүе, көслө рухы миңә бик ауаздаш. Мәрйәм Бураҡаеваның ошо батыр башҡорт ҡатыны тураһындағы әҫәрен уҡығас та коллективҡа сәхнәләштерәйек тип тәҡдим иттем. Режиссер һәм автор бер фекергә килгәс, яңы сәхнә әҫәре яҙылды", - ти Ләйсән Ғәбделбарый ҡыҙы.

Әйткәндәй, Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең "Киҫәкбикә. Риүәйәт" драмаһын башлап өфөләр ҡарай аласаҡ. Коллектив 25 сентябрҙә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә уйнай. Шулай уҡ 24 сентябрҙә Өфөләге "Башҡортостан" Дәүләт концерт залында "Урал легендалары" мюзиклы менән сығыш яһай. Мюзиклдың авторы - драматург Сәрүәр Сурина, ҡуйыусы режиссеры - Стәрлетамаҡ филармонияһының художество етәксеһе Лира Фәйзуллина, композиторы - БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Урал Иҙелбаев. Урал тауҙарына, халҡыбыҙ тарихына бәйле, башҡорт халыҡ эпостарына нигеҙләнеп яҙылған философик әҫәр тыуған еребеҙҙең матурлығын, йомартлығын йөрәк түренән үткәреп, йәш быуынды ошо хозурлыҡтың ҡәҙерен белеп, уны һаҡлап йәшәргә саҡыра.

АТЫҢ КЕМ?

# СЕРЛЕ ИСЕМДӘР УТРАУЫНА...

БАШҠОРТОСТАН
викимедиасылары
төркөмө

**Исемегеҙҙең нимә аңлатҡанын, атай-әсәйҙәрегеҙҙең исеменә ниндәй мәғәнә һәм сер йәшеренгәнен, республикала һәм унан ситтә күпме аҙашығыҙ йәшәгәнен һәм башҡа мәғлүмәтте белгегеҙ, ул ғына ла түгел, уларҙы асыҡлауҙа үҙегеҙ ҙә ҡатнашҡығыҙ киләме? Мәҫәлән, киң таралған Айгөл исеме барлығы барыбыҙға ла билдәле, ә бына Ҡырғыҙстандың Баткен районында ғына үҫкән, лилиәләр ғаиләһе, рябчиктар ырыуына ҡараған Айгөл исемле күп йыллыҡ үҫемлек барлығын беләһегеҙме? Юҡтыр, быны быға тиклем беҙ ҙә белмәй инек...**

Шундай ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр табырға һәм уларҙы бер урынға тупларға, исемегеҙгә бәйле башҡа серҙәрҙең төбөнә төшөргә теләһәгеҙ, Башҡорт Википедияһының "Башҡорт исемдәре - 2021" тип аталған ижади конкурсына рәхим итегеҙ! Уның төп маҡсаты - башҡорт теленең һүҙ байлығын өйрәнеү, башҡорт исемдәренең тылсымлы серен асыҡлау, интернетта башҡорт теле даирәһен артабан үҫтереү, исемдәр аша халҡыбыҙҙың билдәле шәхестәре, шәхес исемдәре менән бәйле республиканың ер-һыу атамалары, тарихи-мәҙәни объекттары тураһында мәғлүмәтте барлыҡ донъяға еткереү.

Конкурс 2021 йылда Башҡортостан Республикаһы Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фондының Энциклопедик белем таратыуға булышлыҡ итеүсе "Викимедиа РУ" коммерцияға ҡарамаған партнерлығына бирелгән Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты сараларын тормошҡа ашырыу сиктәрендә ойошторола. Конкурс мәктәп йәшендәге балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәр өсөн тәғәйенләнә. Конкурста шулай уҡ теләге булған һәр кем ҡатнаша ала. Сикләүҙәр юҡ.

Конкурста ҡатнашыусыларҙың ижади эшенә 2021 йылдың октябрь-ноябрь айҙарында йомғаҡ яһала. Әүҙем ҡатнашыусыларға виртуаль миҙалдар бирелә, шулай уҡ "Аҡбуҙат", "Аманат", "Шоңҡар" журналдарына һәм "Йәншишмә", "Йәшлек" гәзиттәре грант иҫәбенә бушлай яҙҙырыла, иң-индәргә "Озон" интернет магазины сертификаты тапшырыла. Ә инде еңеүселәргә ярҙам итеүсе ололарға йәки уларҙың остаздарына ойоштороусыларҙың электрон Рәхмәт хаты тапшырыла.

Балаһына матур исем биреү ата-әсә бурыстарының иң яуаплыһы. Исем менән кешенең киләсәк тормошо билдәләнә, сөнки һәр исемгә тылсымлы сер һалынған. Ә һеҙ ошо сер артынан тормош диңгеҙендәге Исемдәр утрауына юлланырға әҙерме?

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҒЫУ ЯҺАҒАН - АҒЫУҘАН, һөңгө яһаған һөңгөнән үлер

Хаталанмаған кешеләр була ул. Сөнки улар өсөн башҡалар уйлай һәм... хаталана.

**(Хенрик Ягодзиньский).**

Йәшлектә барыһын да үҙ хыялдарың менән, ҡартлыҡта - үҙ хәтирәләрең менән сағыштыраһың.

**(Эдуар Эррио).**

Бюрократ - аңламау һәләтлеге бирелгән кеше.

**(Жорж Элгози).**

Ваҡыт етмәй, тип зарланыусынан һаҡлан - ул һинең ваҡытыңды урлай.

**(Хуго Штейнхаус).**

Хоҙай Тәғәлә Әҙәмде лә Һауаның ҡабырғаһынан яратҡан булһа икән... Ҡалай көслө булыр ине ирҙәр!

**(Мечислав Шарган).**

Кешеләр сер итеп кенә әйтелгән бар хәбәргә ышана. Шуның өсөн, һине ишетеүҙәрен теләһәң, хәбәреңде шым ғына, сер итеп кенә һөйлә.

**(Малькольм де Шазаль).**

Ҡатын-ҡыҙ бирелмәһә - еңә, бирелһә - еңеүсегә үҙ шарттарын көсләп таға.

**(Карел Чапек).**

Беҙҙең балалар беҙҙән өлкәнерәк, сөнки уларға артабан йәшәргә, беҙ булмаған киләсәккә китергә кәрәк. Шуға ла улар ҡайһы саҡта беҙгә сит.

**(Марина Цветаева).**

Ҡат-ҡат ҡабатланған ялған, әлбиттә, хәҡиҡәткә әйләнмәй, ләкин уның ғәҙәткә әйләнеүе ҡурҡыныс та инде...

**(Оливер Хассенкамп).**

Үбешеүҙе ҡатын-ҡыҙҙы аҙ ғына булһа ла һөйләүҙән туҡтатып тороу өсөн ирҙәр уйлап сығарған.

**(Жюльен де Фалкенаре).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер уҡыусы остазынан һорай икән: "Остазым, донъя ҡайғы-хәсрәт менән тулған. Әйт әле, ошондай заманда кеше ни менән йыуанырға, ҡайғы-хәсрәттән нисек арынырға тейеш?" "Ниндәй кеше тураһында әйтеүеңә ҡарап, яуап бирәм, - тигән остаз. - Аҡыллы кеше "Яҙмышыма яҙылған икән, был ҡайғы-хәсрәткә мин тарырға тейеш булғанмын", тип йыуана. Ахмаҡ иһә, "Былдай ҡайғы-хәсрәт мине урап үтәсәк, миңә ҡағылмаясаҡ", тигән уйҙан йыуаныс таба".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
10 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3250
Заказ - 1096

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

1 582218 911006 21038